ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

12-18 июнь (һөтай) 2026
№23 (1218)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • Һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Ышаныс яулау һөҙөмтәһе



2

Башҡорттарҙың телен...

һәм мәҙәни мираҫын белгән ғалим



7

Милли мәктәптәребеҙ...



Башҡортостан мәғарифының йөҙөк ҡашы кеүек

8-9

"Урал батыр" тантанаһы



12-13

@kiskeufa

Беҙҙең VK төркөмөнә рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ!** ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә республика ҡалалары һәм районларының бөтә почта бүлексәләрендә лә 2026 йылдың икенсе ярты йыллығына **1124 һум 40 тингә** яҙыла алаһығыҙ. Әйткәндәй, ике кешегә (562 һум 20 тин), өс кешегә (374 һум 80 тин) бер дана гәзит алдырыу ҙа хуплана. Һәр ваҡыттағыса, гәзиткә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙең кемдәрелер матур башҡорт китаптары менән бүләкләнер.*

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### ? 12 июнь - Өфө ҡалаһы көнө. Баш ҡалабыҙ һеҙҙе нимәһе менән арбаны, ни өсөн һеҙ тап ошо ҡалала төпләнергә ҡарар иттегеҙ һәм Өфө йәшәйеш өсөн уңайлымы?

***Хөрмәтулла ҮТӘШЕВ, Башҡортостан Республикаһының һәм Рәсәй Федерацияһының халыҡ артисы:*** Кеше, ғәҙәттә, үҙе йәшәгән урынға бәйләнә, эҫенә торған зат. Мин дә йәш саҡта үҙем уҡыған Магнитогорск, Стәрлетамаҡ ҡаларына ла, театрында сәхнә эшсеһе булып хеҙмәт итеп киткән Салауатҡа ла өйрәнеп өлгөргәйнем, әммә Өфө уларҙан бөтөнләй айырылып торған, икенсе мөхитле, милли рухлы ҡала. Әрменән ҡайтып килешләй, баш ҡалаға килеп төшөү менән ошонда йәшәүсе Саша тигән хеҙмәттәш егеттән Салауат Юлаев һәйкәленә алып барыуын һораным. Һушым китеп, һоҡланып ҡарағайным мин был һынға. Һәм бер заман, "Телеүҙәк" туҡталышында кемдәрҙендер радионан яңғыраған һымаҡ матур итеп йырлағанын ишетеп ҡалдыҡ. Баҡһаң, Өфө сәнғәт институты һәм училищеһы студенттары киске уйындан һуң автобус көткән арала



йырлашып торған икән. Эйе, башҡорт һәр ваҡыт моңло булған, әммә шул ваҡытта йәштәрҙең йырҙарҙы профессиональ тауыштар менән башҡарыуы таң ҡалдырғаны бөгөнгөләй хәтеремдә. Һәм Өфө дәүләт сәнғәт институтына уҡырға ингәндә, уны уҡып бөткәндән алып, бында эшкә ҡалырға тигән хыялым бар ине һәм, Аллаға шөкөр, бына инде 45 йыл ғүмерем баш ҡалаға бәйләнгән.

Үҙәктә йәшәүсе кеше булараҡ, минең өсөн Өфө һәр яҡлап та уңайлы. Бында ижад итер, үҫеш өсөн бөтә шарттар ҙа бар, ә беҙгә, артистарға, роль өҫтөндә эшләү, персонаждар хаҡында мәғлүмәт туплау өсөн китапхана, музейҙарҙың ҡул аҫтында ғына булыуы бик мөһим. Белем усаҡтары, театрҙар, радио-телевидение эргәлә генә булғас, хатта водитель таныҡлығым да юҡ минең. Эшкә лә күптән йәйәү йөрөргә ғәҙәтләнеп алғанмын: иң тәүҙә Мидхәт Шакиров, Маяковский скверҙары аша Аҡмулла һәйкәле янынан Совет майҙанына сығам, унан Зәки Вәлиди исемендәге Милли китапхана янынан үтәм дә, әле реконструкцияла булған Ленин паркы аша Башҡорт дәүләт академия театрына барып та етәм. Ошо маршрутымда урынлашҡан, үҙем спектаклендә актер булараҡ та, ҡуйыусы булараҡ та ҡатнашҡан, хөрмәт иткән Миңлеғәле Шайморатов, бөйөк шәхестәребеҙ Арыҫлан Мөбәрәков, Мортаза Рәхимов һәйкәлдәре мине иртәнсәк һәм кистәрен оҙатып ҡала. Әйткәндәй, республиканың тәүге Президентының һәйкәлен булдырыу, Салауат Юлаев һәйкәлен яңыртыу мин директор булған "Иман-Башҡортостан" хәйриә фонды аша үтә. Йәғни, театрҙан тыш, йәмәғәт эшмәкәре, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты ағзаһы булараҡ та, төрлө саралярҙа алып барыусы һәм режиссер сифатында ла ҡалабыҙға файҙа килтерергә тырышам.

Өфөнө мин ныҡ яратам, ул көндән-көн матурлана, сәскә ата, килгән ҡунаҡтарға күрһәтер матур урындар ла бихисап, әммә киләсәктә башҡараһы эштәр ҙә күп әле. Мәҫәлән, баш ҡалабыҙ архитектураһы уның үҙ йөҙөн, милли үҙенсәлеген күрһәтеп торорлоҡ булһа бигерәк тә яҡшы булыр ине. Илебеҙҙең барлыҡ республикаларының тигәндәй, баш йәки ваҕыраҡ ҡалалары биҙәлешендә уларҙың миллилеген сағылдырған һыҙаттар бар бит, беҙҙең етәкселегебеҙ ҙә алдағы ваҡытта ошо яҡҡа иғтибарын нығыраҡ йүнәлтер тигән өмөттәмен.

## ӘЙҘӘГЕҘ!

# МИЛЛИ МАТБУҒАТТЫ УҠЫП...




## телебеҙҙе лә, үҙебеҙҙе лә һаҡлайыҡ!

**"Әйҙәгеҙ, уҡыйыҡ!" тигән саҡырыу, эйе, беҙҙең телдән төшмәй. Бындай борсолоу ҡатыш өндәшеүҙәрҙең сәбәбе, әлбиттә, милләттәштәрҙең гәзит-журналдарҙан, китаптарҙан йөҙ бороуы. Был туған телеңдән, рухыңдан, мәҙәниәтеңдән дә ситләшеү тип баһалана. Һәм улай ғына ла түгел. Уҡыусыларға туған башҡорт теленең һаулыҡҡа ни тиклем ыңғай тәьҫир итеүе хаҡында мәғлүмәт еткерәм.**

(Дауамы 4-се биттә).

## ШАҒИР ҺҮҘЕ

# БАШҠОРТ ҠАЛАҺЫ

***Минең Өфөм сал быуаттар аша***
***Ҡаруан юлы менән тоташҡан:***
***Асҡандыр ул мәғрифәттең юлын,***
***Ҡай саҡ булған был юл тоташ ҡан.***

***Нисә быуат элек бында килгән***
***Сәйәхәтсе ғалим Иҙриси?***
***Әллә уға өндәшәйек микән,***
***Үткәр, тиеп, Тарих дәресе?***

***Мин Өфөмдә меңъйыллыҡтар аша***
***Сырамытам сармат иленән.***
***Меңдәр, юрматылар, табындарҙың***
***Рухы ҡалҡа тарих көлөнән.***

***Башҡорт ҡалаһына бар тарафтан***
***Юлы төшә сауҙагәрҙәрҙең.***
***Мәҙәниәт, сауҙа - шулар менән***
***Йөҙө яҡты егәр зәргәрҙең.***

***Минең Өфөм, Имән ҡала булып,***
***Заманаһы менән айҡашҡан.***
***Дәүерҙәрҙең дөбөрҙәүен үтеп,***
***Гүзәл һында тыуған ул таштан.***

***Ваҡыт каруандарын, ҡолас асып,***
***Ҡаршылайһың, Өфөм, һин бөгөн.***
***Киләсәккә һин илтәһең кеүек***
***Кешелектең бөйөк бер йөгөн.***

***Ул йөк - миһырбанлыҡ.***
***Ул - ғәҙел һүҙ.***
***Ул - тыныслыҡ яҡлы улдарың.***
***Ҡитғаларҙы тоташтырып торһон***
***Мәғрифәтле каруан юлдарың!***

**Тамара ИСКӘНДӘРИӘ.**

12+

✓ **Республикабыҙҙың төп инсталляцияһы - һалма интеллект технологиялары ярҙамында эшләнгән ун метрлыҡ интерактив "Шәжәрә ағасы" форумдың иң сағыу һәм һоҡланғыс экспозицияларының береһе булды.**



ҠЫҪҠАСА

# ИҪКӘРТЕҮ КӘРӘК!

**Башҡортостанда 8-28 июндә "Йөк автомобиле" махсуслаштырылған иҫкәртеү сараһы уҙғарыла.** Ул ҙур йөк машиналары ҡатнашлығындағы аварияларҙы кәметеүгә йүнәлтелгән, тип хәбәр иттеләр республиканың дәүләт автоинспекцияһынан. Сараларҙы көсәйтеүгә хәүефле статистика сәбәпсе булды. Ағымдағы йылдың биш айы йомғаҡтары буйынса республикала йөк транспорты водителдәре ҡатнашлығында 87 юл-транспорт ваҡиғаһы теркәлгән, уларҙа 28 кеше һәләк булған һәм 9-һе йәрәхәттәр алған. Йөк машиналары водителдәре айырым иғтибар үҙәгендә. Шулай уҡ инспекторҙар транспорт сараларының техник торошон, ғәмәлдәге диагностик карталарҙың һәм тахографтарҙың булыу-булмауын, хеҙмәт һәм ял режимының үтәлешен тикшерә.

✓ **"Ирәмәл" тәбиғәт паркында айыуҙарҙың әүҙемләшеүе күҙәтелә.** Тайыштабандар "Төлөк" контроль-үткәреү пункты яғынан популяр маршрутта айыруыса күп, тип иҫкәрттеләр туристарҙы парк дирекцияһында. Шуға күрә Ирәмәл тауы тирәһендә әлегә палаткала ҡуныу кәңәш ителмәй. Тауға менергә яратыусыларға хәүефһеҙлек ҡағиҙәләре тураһында иҫкә төшөрҙөләр: маршрутты мотлаҡ теркәргә һәм парк хеҙмәткәрҙәренә килеүең тураһында хәбәр итергә кәрәк, төркөм менән йөрөү яҡшыраҡ.Айыуҙарҙы ҡурҡытыу өсөн маршрутта ҡысҡырып һөйләшеү, йырлау, һыҙғыртҡыс алып йөрөү зарур. Һуҡмаҡтарҙа аҙыҡ-түлек һәм сүп-сар ҡалдырырға ярамай. Ә йыртҡыс менән осрашҡанда уға яҡын барыу һәм ашатыу йәки фотоға төшөрөү тыйыла.

✓ **Башҡортостандың туғыҙ районында 12 ауыл "Мәғлүмәттәр иҡтисады" милли проектының "Һанлы тигеҙһеҙлекте бөтөрөү" программаһы сиктәрендә быйыл интернетлы булды.** Улар - Әбйәлил, Бәләбәй, Благовещен, Борай, Ҡалтасы, Мәсетле, Мишкә, Учалы һәм Шаран райондары ауыл-ҡасабалары. Уларҙың ҡайһы берҙәрендә 100-ҙән аҙыраҡ кеше йәшәй, башлыса 300 кешелек ҡасабалар, тип билдәләнеләр Башҡортостандың Һанлы үҫеш министрлығында. Мобиль элемтә операторҙары билдәләүенсә, интернет менән файҙаланыу буйынса ауыл ере ҡала менән тигеҙләшә, 2020 йылда "ауыл" трафигы ике тапҡырға тиерлек аҙыраҡ ине. Һанлы үҫеш министрлығында белдереүҙәренсә, интернетҡа тоташҡан ҡасабалар араһында - туристар араһында популяр булған урындар, мәҫәлән, гүзәл тәбиғәтле Әбйәлил районында Бөрсәнсә һәм Атауҙы күлдәре менән билдәле Дәүләтша ауылы.

✓ **Шишмә районында төҙөләсәк заманса турбазаға инвестициялар күләме ярты миллиард һум самаһы тәшкил итәсәк.** Ул Өҫтөнлөклө инвестиция проекттары исемлегенә индерелгән, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан Хөкүмәтендә. Турбазаны "Ковчег" компанияһы төҙөй, ул уға 449 миллион һум инвестиция һала һәм 30 эш урыны булдыра. Туркомплекста эко-парк, 10 ҡунаҡ йорто, ресторан, кофейня, хайуандарҙы ваҡытлыса аҫрау урыны, ат һарайы һәм манеж, шулай уҡ ветеринария комплексы була, тип һөйләнеләр компанияла. Бында иппо - һәм канистерапия (аттар һәм эттәр менән) менән шөғөлләнергә мөмкин. Дәүләт ярҙамы алыу һәм бизнес-план әҙерләү өсөн инвесторға документтар пакетын әҙерләгәндә ярҙам күрһәтелде, тейешле ер участкаһы табылды, район хакимиәте менән инеү юлын ойоштороу, ә ресурстар менән тәьмин итеүсе ойошмалар менән объекттарҙы инженер селтәрҙәренә тоташтырыу мәсьәләһе тикшерелде.

РӘСМИ СЫҒАНАҠ

# ЫШАНЫС ЯУЛАУ ҺӨҘӨМТӘҺЕ

**Республиканың Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров етәкселегендәге рәсми делегацияһы 29-сы Петербург халыҡ-ара иҡтисади форумында ҡатнашты. Быйыл төп тема - "Эшлекле диалог - тотороҡло киләсәккә юл". Унда 100-ҙән ашыу илдән 20 меңгә яҡын ҡатнашыусы, шул уҡ ваҡытта 76 илдән дәүләт эшмәкәрҙәре һәм сәйәсмәндәр йыйылды.**



- Форумда ҡатнашыуҙың төп бурыстарының береһе - төбәктең мөмкинлектәрен, тәҡдимдәрен, инвестиция проекттарын презентациялау. Минеңсә, беҙ ошондай бурысты үтәнек, - тине республика Башлығы. - Әҙерлек барышында һөйләшеүҙәрҙең киң исемлеген билдәләгәйнек, сөнки бында ҙур компаниялар, төбәк етәкселәре менән осрашыуҙар көтөлә ине бит. Ә һандар, контракттар буйынса мәғлүмәтте бер аҙ һуңыраҡ билдәләйәсәкбеҙ.

Башҡортостан стенды - Петербург халыҡ-ара иҡтисади форумында иң сағыуҙарының береһе булды. Был хаҡта форумда ҡатнашыусы - Федерация Советының фән, мәғариф һәм мәҙәниәт буйынса комитеты рәйесе Лилиә Ғүмәрова хәбәр итте: "Түгеге сәғәттәрҙә үк Башҡортостан стенды барыһының да иғтибарын йәлеп итте. Республикабыҙҙың төп инсталляцияһы - һалма интеллект технологиялары ярҙамында эшләнгән ун метрлыҡ интерактив "Шәжәрә ағасы" форумдың иң сағыу һәм һоҡланғыс экспозицияларының береһе булды. Ағас һалма интеллект ярҙамында төрлө һораүҙарға яуап бирә: сәнәғәт һәм экспорт потенциалынан алып башҡорт балының төрҙәренә тиклем, Башҡортостан стенды - төбәктең киләсәккә ҡарашының символы. Беҙ прогресҡа һәм инновацияларға ынтылабыҙ, әммә шул уҡ ваҡытта тамырҙарыбыҙҙы һәм традицияларыбыҙҙы һаҡлайбыҙ",- тип билдәләне ул.

Форум барышында йыл да Стратегик башланғыстар агентлығы эшҡыуарҙарҙан һорау алыу нигеҙендә төҙөгән Рәсәй төбәктәрендә Инвестиция мөхите торошоноң милли рейтингы һөҙөмтәләре иғлан ителә. 2025 йыл йомғаҡтары буйынса Башҡортостан Сахалин өлкәһе һәм Санкт-Петербург менән бергә өсөнсө урынды алды (республикабыҙ үҙенең былтырғы позицияһын һаҡлап ҡалды). Рейтингтың беренсе баҫҡысында - Мәскәү һәм Татарстан, ә икенсе баҫҡысты Түбәнге Новгород һәм Мәскәү өлкәләре бүлеште. "Был рейтингтың ҡиммәте нимәлә? Беҙгә чиновниктар түгел, ә эшҡыуарҙар үҙҙәре беҙҙең менән ни тиклем уңайлы эшләүҙәре тураһында баһа бирә. Һәм беҙгә, тәү сиратта, кешеләрҙән, бизнестың фекере бик мөһим, - тине Радий Хәбиров. - Өсөнсө урын - бик яҡшы. Беҙҙә һөҙөмтәле идара итеү командаһы бар. Шуға күрә икенсе, беренсе урын өсөн дә көрәшәсәкбеҙ әле. Беҙҙең төп бурыс - бизнес менән власть араһында ышанысты нығытыу. Мин эшҡыуарҙарҙың беҙгә ышаныуына ышанам".

# РӘСӘЙ ХАЛЫҠТАРЫ БӘЙГЕҺЕ

**2026 йылдың август-сентябрендә Башҡортостан илдең ете төбәге менән бергә иң көслө спортсылар араһында йәйге спорт төрҙәре буйынса II Бөтә Рәсәй спартакиадаһын ҡабул итәсәк. Ошо йылдан ул "Рәсәй халыҡтары спартакиадаһы" исемен йөрөтә. Был хаҡта Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров үткәргән оператив кәңәшмәлә республика Хөкүмәтенең вице-премьеры - спорт министры Руслан Хәбибов хәбәр итте.**

Сара 2028 йылда Лос-Анджелеста үтәсәк йәйге Олимпия уйындарына Рәсәй йыйылма командаларын туплау өсөн төп милли һайлап алыу этабы буласаҡ. Башҡортостанда спорт көрәше, фехтование, ишкәкле слалом, велосипед спорты, асыҡ һыуҙа йөҙөү һәм триатлон буйынса ярыштар үтәсәк. Унда 1500 самаһы кеше ҡатнашасаҡ. Республиканан 33 спорт төрөндә 120 атлет ҡатнаша. 2022 йылда көслө спортсылар араһында йәйге спорт төрҙәре буйынса I Бөтә Рәсәй спартакиадаһында Башҡортостан илдең 68 төбәге араһында 19-сы урынды биләне. Беҙҙең йыйылма команда ул саҡта өсәр алтын, көмөш һәм бронза миҙал яулағайны.

Башҡортостан Башлығы "Рәсәй халыҡтары спартакиадаһын" үткәреүгә сифатлы әҙерлекте тәьмин итергә ҡушты. "Рәсәй Спорт министрлығының календарь планында был иң юғары ярыштар, - тине Радий Хәбиров. - Беҙҙә бер нисә дисциплина үтәсәк. Был бик ҙур яуаплылыҡ. Объекттарыбыҙ бар. Әле спортсыларыбыҙҙы әҙерләү өсөн йыйылыштар үткәрергә кәрәк".

# ҒАИЛӘЛӘР ИҒТИБАР ҮҘӘГЕНДӘ

**Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров төбәктә ғаиләләргә ярҙам итеү һәм тыуымды арттырыу буйынса яңы саралар тураһында хәбәр итте. Был хаҡта ул үҙенең социаль селтәрҙәрендә һөйләне.**

Уның әйтеүенсә, "Ғаилә" милли проекты ғаиләләргә ярҙам итеү системаһын камиллаштырыуға, традицион ҡиммәттәрҙе һәм күп балалылыҡты популярлаштырыуға йүнәлтелгән. "Бында ябай ҡарарҙар булмауын аңлайбыҙ. Ғаиләгә матур телмәрҙәр түгел, ә медицина, эш, уҡыу, торлаҡ, балалар хаҡында хәстәрлек күреүҙә ярҙам иткән аңлайышлы саралар кәрәк. Беҙ төбәк тарихтарын әүҙем өйрәнәбеҙ. Стратегик инициативалар агентлығы менән берлектәге сессиянан һуң 300-гә яҡын тәҡдим алынды. Төбәк программаһына 27 яңы сара индерелгән дә инде. Улар араһында яңы өйләнешкәндәр өсөн репродуктив һаулыҡ сертификаттары, буласаҡ әсәйҙәргә ярҙам итеү, йәш һәм студент ғаиләләренә ярҙам итеү тураһында мәғлүмәт менән яңыртылған алмашыу картаһы", - тип билдәләне төбәк министрҙар кабинеты башлығы.

Андрей Назаров, бизнесты йәлеп итеүгә айырым иғтибар биреләсәк, тип өҫтәне. Эш биреүселәрҙең ғаиләле хеҙмәткәрҙәр өсөн шарттар булдырыуы мөһим. Премьер-министр шулай уҡ артабан бергә эшләргә мөмкинлек бирған Стратегик инициативалар агенлығы менән киләшеү әҙерләргә ҡушты.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Петербург халыҡ-ара иҡтисади форумы майҙансығында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров һәм Вологда өлкәһе губернаторы Георгий Филимонов сауҙа-иҡтисади, фәнни-техник, социаль, мәҙәни һәм башҡа өлкәләрҙә хеҙмәттәшлек тураһында килешеүгә ҡул ҡуйҙы. Яҡтар бизнес һәм инвестициялар өсөн уңайлы шарттар булдырырға, бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡҡа ярҙам итергә, фәнни производстволарҙы һәм уртаҡ предприятиеларҙы үҫтерергә, үҙ-ара продукция менән тәьмин итеүҙе яйға һалырға һәм импортты алмаштырыу менән шөғөлләнергә планлаштыра.

✓ XXIX Петербург халыҡ-ара иҡтисади форумында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Технониколь" акционерҙар йәмғиәте президенты, идара итеүсе партнеры Сергей Колесников менән осрашты. "Технониколь" корпорацияһы ҡыйыҡ, гидро- һәм йылылыҡ изоляцияһы, юл төҙөлөшө һәм сәнәғәт өсөн материалдар сығарыуға махсуслаша. Башҡортостанда компанияның бер нисә етештереү майҙансығы эшләй. Осрашыуҙа корпорацияның төбәктәге инвестиция проекттары тикшерелде. Шуларҙың береһе - керамик гранулдар эшләү.

✓ Башҡортостанда республика Башлығының "Йыл ҡаҙанышы" гранттары номинациялары раҫланды. Быйыл урындағы үҙидара органдары өсөн "Йыл ҡаҙанышы" грантында биш номинация булдырылған: "Һаулыҡ һәм әүҙем йәшәү рәүеше", "Социаль үҫеш", "Тотороҡло иҡтисади үҫеш", "Хәүефһеҙ һәм уңайлы биләмә", "Мәғлүмәти асыҡлыҡ һәм халыҡ менән кире бәйләнеш". Республика етәксеһе Радий Хәбиров ошо туралағы ҡул ҡуйған. Документа шулай уҡ һәр номинация өсөн критерийҙар билдәләнгән. Бер муниципалитет өсөн грант күләме 5 миллион һум тәшкил итә. Енеүселәр был аҡсаны биләмәләрҙе үҫтереү өсөн тотонорға мөмкин.

✓ Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Рәсәйҙең Оборона министрлығы менән контракт төҙәгән өсөн түләүҙәрҙең ғәмәлдә булыу ваҡытын 2026 йылдың 30 июненә тиклем оҙайтты. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2026 йылдың 1 ғинуарынан республикабыҙҙа контрактҡа ҡул ҡуйған хәрби хеҙмәткәрҙәр өсөн бер тапҡыр бирелә торған түләү 1 миллион һум күләмендә билдәләнде.

✓ Башҡортостанда "Кадрҙар" милли проект сиктәрендә 4 мең кешене яңы һөнәргә уҡытыу планлаштырыла, ти республикаың ғаилә һәм хеҙмәт министры Ольга Кабанова. 2025 йылда дәүләт программаһы сиктәрендә 3 мең кеше уҡыған. "Рәсәй эше" берҙәм цифрлы платформаһы 130-ҙан ашыу белем биреү программаһы тәҡдим итә. Улар 35 йәшкә тиклемгеләр, 50 йәштән өлкәндәр, "декреттағылар" һәм мәктәпкәсә йәштәге балалары булған эшһеҙ ҡатын-ҡыҙҙар, инвалидтар, МХО ветерандары һәм уларҙың ғаилә ағзалары өсөн тәғәйенләнгән.

✓ *"Беҙ Рәсәйҙе йәнле аралашыу аша белергә: урындағы халыҡ менән осрашырға, уларҙың бешергән ризыҡтарынан ауыҙ итергә, йыр-моңдарын тыңларға һәм ҡомартҡылары менән танышырға теләйбеҙ", - тине Йоханнес Баденхорст.*



ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ



# ЯҢЫ ҠУНАҠХАНА БУЛА

**Петербург халыҡ-ара иҡтисади форумында Өфөлә ҙур күләмле инвестиция проектын бойомға ашырыу тураһында килешеүгә ҡул ҡуйылды, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан Хөкүмәтендә.**

Үзбәкстан партнерҙары менән бергә Өфөлә Heavens Garden заманса рекреацион-ҡунаҡхана комплексын төҙөү эштәре башлана. Ул юғары кимәлдәге сервис һәм ял итеү өсөн үҙенсәлекле инфраструктура менән туристарҙы һәм өфөләрҙе йәлеп итеү урыны булырға тейеш. "Беҙ Үзбәкстан менән хеҙмәттәшлекте үҫтереү йәһәтенән планлы эште дауам итәбеҙ. Беҙҙең партнерҙарҙың Ташкентта ошондай объекттар төҙөү буйынса тәжрибәһе ҙур, һәм хәҙер уларҙың береһе Өфөлә барлыҡҡа килергә тейеш. Бөгөнгә ер участкаһы һайлап алынған һәм Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡарары буйынса сауҙалашыуһыҙ ҡуртымға бирелгән", - тине хөкүмәт вице-премьеры - республиканың сәнәғәт, энергетика һәм инновациялар министры Александр Шельдяев. Билдәләнеүенсә, проектты тормошҡа ашырыу ваҡыты - 2026-2035 йылдар.

# ЛЕНИН ПАРКЫНДА

**Башҡортостан Башлығы Өфөнөң Ленин исемендәге паркында реконструкция барышын ҡараны.**

"Был яңы, заманса парк, республикала иң яҡшыларҙың береһе буласаҡ, - тип билдәләне Радий Хәбиров. - Беҙ эштәрҙең байтаҡ өлөшөн финанслаған Сберға Өфөләргә ошондай бүләк эшләгәндәре өсөн бик рәхмәтлебеҙ".

Радий Хәбиров һүҙҙәренсә, Һаҡлыҡ банкы идараһы рәйесе Герман Греф паркта балалар өсөн күп урын булыуын теләне. Шуға күрә бер юлы бер нисә балалар, спорт майҙансыҡтары булдырыу планлаштырыла. Бында юғары уҡыу йорттары студенттары өсөн физкультура дәрестәре үтәсәк. Шулай уҡ ике кафе төҙөлә.

Радий Хәбиров шулай уҡ киләсәктә "фонтан сәнғәтенең ысын шедеврҙары"на әйләнәсәк буласаҡ фонтан проекттарын да күрһәтте. "Паркты Республика көнөндә, 11 октябрҙә, асырға ниәтләйбеҙ", - тине республика Башлығы.

# ИҢ БОРОНҒО УРАМДА

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфөнөң Октябрь революцияһы урамын реконструкциялау тураһында һөйләне.**

Өфөләге иң боронғо урамды реконструкциялау - ҙур проект. Урамда киң тротуарҙар төҙөү планлаштырыла, инженер селтәрҙәре һәм яҡтыртыу мәсьәләһе хәл ителә. "Этаплап хәрәкәт итәбеҙ. Ленин урамынан Цюрупаға тиклемге участка әҙер. Быйыл төҙөкләндереүҙе Яңы күпер урамына тиклем еткерергә планлаштырабыҙ. Артабан Воровский урамына тиклемге, Дуҫлыҡ монументына һәм Ағиҙел йылғаһы ярына сығыу юлы асыла. Һөҙөмтәлә беҙ иҫ киткес ял итеү зонаһы барлыҡҡа килтерәсәкбеҙ", - тип һөйләне Радий Хәбиров.

Урам буйлап етди реконструкция талап иткән 70-кә яҡын бина урынлашҡан. "Бында инвесторҙар килеүен көтәбеҙ, улар был объекттарҙы музейҙарға, кафеларға, Өфө халҡы һәм ҡунаҡтары өсөн башҡа ҡыҙыҡлы урындарға әйләндерәсәк. Был тиҙ генә булмаясаҡ, әлбиттә. Мәҙәни мираҫ объекттарын тәртипкә килтереү өсөн етди инвестициялар талап ителә", - тип яҙҙы республика Башлығы

# АЛДАН ПЛАНЛАШТЫР

**Өфөләрҙән аэропортҡа барыуҙы алдан планлаштырыуҙарын һорайҙар. Был Өфө - Ырымбур трассаһында күперҙе ремонтлауға бәйле.**

Башҡортостандың Транспорт министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, 1 июндән Чесноковка ауылы янындағы Бәрсеүән йылғаһы аша күперҙә ремонт эштәре башланды. Юл хеҙмәттәре ремонт эштәрен 2026 йылдың август уртаһына тиклем тамамларға тейеш. Ремонт ваҡытында ҡоролманың өлөштәре сиратлап ябыла, ә автомобилдәрҙе үткәреү өсөн реверсив хәрәкәт һәм светофор менән көйләү ойоштоорола. "Өфө аэропортынан осорға йәки Башҡортостандың баш ҡалаһына килергә йыйынған пассажирҙарҙы күперҙә төҙөкләндереү эштәрен иҫәпкә алыуҙарын һәм сәфәрҙәрен алдан планлаштырыуҙарын һорайбыҙ", - тип мөрәжәғәт иттеләр ведомствола.

# ЙӘНЛЕ АРАЛАШЫУ АША...

**Өфөгә Voetspore халыҡ-ара экспедицияһы ҡатнашыусылары килде. Көньяҡ Африка сәйәхәтсеһе һәм продюсер Йоханнес Баденхорстың медиапроекты Рәсәйҙең мәҙәниәте, традициялары, аш-һыуы, архитектураһы, тәбиғәте менән таныштырыу өсөн 13 документаль фильм төшөрөүҙе күҙ уңында тота.**

Ижади төркөм Еңеү паркында, "Ләлә-Тюльпан" мәсетендә, Дуҫлыҡ монументында, Ағиҙел буйында, "Торатау" конгресс-холында, археология һәм этнография музейында һәм башҡа объекттарҙа булды. Программа Көньяҡ Африка телевидениеһында күрһәтеләсәк. "Беҙ Рәсәйҙе йәнле аралашыу аша белергә: урындағы халыҡ менән осрашырға, уларҙың бешергән ризыҡтарынан ауыҙ итергә, йыр-моңдарын тыңларға һәм ҡомартҡылары менән танышырға теләйбеҙ. Шул саҡта беҙ рустарҙың ниндәй халыҡ икәнен яҡшыраҡ аңлай алырбыҙ тип уйлайым", - тип билдәләне Йоханнес Баденхорст.

ГЕРОЙҘАР ДӘҮЕРЕ

# КОМАНДА МЕНӘН ЭШЛӘЙҘӘР



**Пилотһыҙ системалар ғәскәрҙәрендә БПЛА операторы һөнәре тураһында хәҙер мәғлүмәт күп. Шулай ҙа, алғы һыҙыкта хеҙмәт итеп, барыһын да үҙ иңендә күтәргән яугирҙарҙың тәжрибәһе баһалап бөткөһөҙ. "Дон" позывнойлы хәрби, дрон осороусы кешенең мотивацияһы көслә, физик һәм мораль яҡтан әҙерлекле, психикаһы тотороҡло булырға тейеш, ти.**

Ул үҙе тәүҙә штурм төркөмөндә МХО зонаһының иң ҡыҙыу нөктәләрендә хеҙмәт үтә. Махсус әҙерләү үҙгәндә уҡып алғас, пилотһыҙ системалар ғәскәрҙәре сафын тулыландыра. "Башта ябай дрондарҙы өйрәндек, һуңынан йәлап уларҙың хәрби төрҙәрен үҙләштерҙек. Алғы һыҙыкта самолет һымаҡ пилотһыҙ осоусы аппараттар, квадрокоптерҙар, төрлө ҙурлыктағы разведкалау, һөжүм итеү аппараттары ҡулланыла", - тип аныҡлыҡ индерә ул.

Яһалма зиһен принциптарында эшләгәндәре лә бар икән. Уларҙы ярымавтоматтар тип атайҙар. Оператор, ҡуйылған бурысҡа ҡарап, уның программаһына тейешле алгоритмдар индерә, һөжүм, йә разведкалау, уға ярашлы, автоматик рәүештә бара.

"Оператор өсөн физик әҙерлек тә бик мөһим. Ҡайһы саҡта позицияға тиклем 10-15 километр ара үтергә тура килә. Бөтә ҡорамалдарҙы үҙ иңеңдә йөрөтәһең. Шул уҡ ваҡытта ҡаршы яҡтың дрондарынан һаҡланырға ла кәрәк.

БПЛА операторҙары бер команда булып эшләй. Ғәҙәттә, ике кешенән тора ул. Тейешле аппаратураны тиҙ генә эш хәленә килтереү үҙенә яңғыҙ ғына мөмкин түгел. Өҫтәүенә, йыш ҡына бер юлы бер нисә дрон осороп ҡына ҡуйылған бурысты үтәп була", - ти "Дон".

Ысынлап та, БПЛА операторы Махсус хәрби операция зонаһында бөгөн - иң кәрәкле һәм юғары түләүле хәрби һөнәрҙәрҙең береһе. Ошо көндәрҙә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Рәсәйҙең Оборона министрлығы менән контракт төҙөгән өсөн түләүҙәрҙең ғәмәлдә булыу ваҡытын 2026 йылдың 30 июненә тиклем оҙайтты. Билдәле булыуынса, республикала контрактҡа ҡул ҡуйған хәрби хеҙмәткәрҙәр өсөн бер тапҡыр бирелә торған түләү 1 миллион һум күләмендә билдәләнгән. Айлыҡ хеҙмәт хаҡы 220 мең һумдан башлана (званиеһына, вазифаһына һәм хеҙмәт стажына ҡарап). БПЛА операторҙарына, һөҙөмтәлелеккә ҡарап, 50 меңдән 500 мең һумға тиклем өҫтәмә түләү ҡаралған. Ул дошмандың техникаһын юҡ итеү йәки башҡа хәрби ҡаҙаныштар өсөн яҙыла.

БПЛА подразделениеларында хеҙмәт итеү тураһында тулы мәғлүмәтте башбат.рф сайтында һәм 122 телефоны буйынса алырға мөмкин.

**Ҡасим ҒӘҘЕЛШИН әҙерләне.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Республика Башлығы Радий Хәбировтың указы менән Учалы районының Урал ауылы биләмәһендә ҡотороу ауырыуы буйынса карантин индерелде. Тейешле документ Башҡортостандың рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт интернет-порталында баҫылған. Сара республика биләмәһендә хайуандарҙың ҡотороу ауырыуын бөтөрөү һәм артабан таратыуҙы иҫкәртеү маҡсатын тота.

✓"Рәсәй Лидерҙары. Команда" Бөтә Рәсәй конкурсының алтынсы миҙгеле финалында илдең иң көслө 280 идара итеү командаһы ярышасаҡ. Улар араһында Башҡортостандан 16 кеше бар, тип хәбәр итә конкурстың матбуғат хеҙмәте. Финалсылар уртаса 35-44 йәштә. Башҡортостандан ҡатнашыусылар араһында Өфө хакимиәте, Федераль һалым хеҙмәтенең республика буйынса идаралығы, шулай уҡ сәнәғәт һәм дәүләт идаралығы өлкәһендәге ойошмалар вәкилдәре бар. Конкурс һөҙөмтәһе 14 июндә билдәле була

✓Июндә Башҡортостанда һәм Рәсәйҙең башҡа төбәктәрендә йәшәүселәргә пенсиялар ваҡытынан алда күсерелә. Был 12 июндә Рәсәй көнө уңайынан байрам көндәренә бәйле. Федераль Социаль фонд мәғлүмәте буйынса, 12-14 июндә банк аша килгән пенсиялар банк иҫәптәренә 11 июндән дә һуңға ҡалмайынса күсерелә. Почта бүлексәләре аша график та үҙгәрҙе: 12 июнь өсөн түләүҙәр ваҡытынан алда килтерелә. 13 һәм 14 июндә пенсиялар почта бүлексәһенең ғәҙәти эш графигы буйынса таратыла. Был страховка, социаль, тупланма, шулай уҡ ҡартлыҡ һәм инвалидлыҡ буйынса пенсияларға ҡағыла.

✓"Башҡортостан" полкының Алексей Сухоруков исемендәге артиллерия батареяһының хәрби машинаһы командиры Динар Миһранов бер үҙе дошман дрондары һөжүмен кире ҡаҡҡан. Хәрби бурысты үтәгәндә сержант Миһрановтың расчетына дошмандың пилотһыҙ осоу аппараттары һөжүм иткән. Хәрби машина командиры ут позицияһында эшләүен туҡтатмаған. Ул яңғыҙы 12 дронды юҡ иткән һәм бер үк ваҡытта расчет менән етәкселек иткән. Дошмандың һөжүме кире ҡағылған. Динар Миһранов батырлығы һәм ҡыйыулығы өсөн генерал Шайморатов миҙалы менән бүләкләнгән һәм дәүләт наградаһына тәҡдим ителгән.

✓Башҡортостанда 2026 йылда мотлаҡ медицина страховка программаһы сиктәрендә экстракорпораль аталандырыуға квоталар һаны 2025 йыл менән сағыштырғанда 14,46 процентҡа артҡан. Республиканың хоҡуҡи мәғлүмәт порталында баҫылған социаль-иҡтисади үҫеш йомғаҡтары тураһында ҡарарға ярашлы, быйыл квоталар һаны 2842-гә еткән. 2025 йылға 2489 квота бүленгән булған. Республиканың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы сайтындағы документҡа ярашлы, 5 июнгә ҡарата исемлектә торған 37 ҡатын-ҡыҙға квота хупланған, 283 ҡатын-ҡыҙ үҙ сиратын көтә. Билдәле булыуынса, өс йыл эсендә Башҡортостанда ЭКО ярҙамында 1335 сабый донъяға килгән.

✓ *Андағы психик көсөргәнешлелекте тамаҡ төбөндә барлыҡҡа килгән өндәр таҙартырға тейеш. Башҡорт телендә улар бишәү: х, ғ, ҡ, һ, ң, шуға күрә башҡорт телен донъялағы иң сәләмәт телдәрҙең береһе тип атарға була...*



*ӘЙҘӘГЕҘ!*



# МИЛЛИ МАТБУҒАТТЫ УҠЫП...

## телебеҙҙе лә, үҙебеҙҙе лә һаҡлайыҡ!

**(Башы 1-се биттә).**

Көнсығыш илдәрендә, кеше ауырыуҙарының 70 проценты аңдың боҙолоуынан башлана, тигән фекер йәшәй. Аң боҙолоуының бер сәбәбе -психик көсөргәнешлек. Көнсығыш илдәрҙә, мәҫәлән, Һиндостанда, Ҡытайҙа, шул психик көсөргәнешлекте бөтөрөү юлдарын уйлап тапҡандар. Ул медитация тип атала (әлбиттә, медитацияның маҡсаты уның менән генә сикләнмәй). Шуларҙың араһында "Тарабара" тигәне башҡаларҙан ябайлығы менән айырылып тора. Методикаһы ошолай: кеше өндәр әйтергә тейеш. Үҙ телендә булғандарын да, шулай уҡ булмағандарын да. Ни тиклем күберәк әйтһәң, шул тиклем яҡшыраҡ. Алфавит ятлаған кеүек һәр өндө ашыҡмай, дөрөҫ итеп әйтеү кәрәк. Шулай уҡ ҡысҡырып, йәки һуҙып, көйләп әйтһәң, бигерәк тә яҡшы. Ҡайһы бер илдәрҙә һуҙынҡы өндәрҙе көлөү формаһында башҡаралар, мәҫәлән, бына ошолайыраҡ: ха-ха-ха, хо-хо-хо, хэ-хэ-хэ, хә-хә-хә...

Бындай медитацияның әһәмиәте нимәлә һуң? Баҡһаң, өндәр аңда барлыҡҡа килгән психик көсөргәнешлекте ҡыуып сығара икән. Иң мөһиме: ниндәйҙер бер өн алып сыға алғанды икенсе өн алып сыға алмай; мәҫәлән, "а" өнө таҙарта алған көсөргәнеште, әйтәйек, "ҙ" өнө таҙарта алмай; ә "ҙ" өнөнөкөнә "ө" хужа түгел, һ.б. Йәғни һәр өндөң үҙ таҙартыу өлкәһе бар. Шуның өсөн өндәрҙе ни тиклем күберәк белһәң, шул тиклем яҡшыраҡ.

Хәҙер башҡорт теленә әйләнеп ҡайтайыҡ. Беҙҙең алфавитыбыҙҙа 42 хәреф бар, татар телендә - 38, урыҫ телендә - 33, инглиз һәм немец телдәрендә 26 хәреф иҫәпләнә. Медитация күҙлегенән ҡарағанда, ҡайһы тел аңды яҡшыраҡ таҙарта? Әлбиттә, башҡорт теле. Беҙҙең телебеҙҙә, әйтергә кәрәк, донъя телдәрендә булған бөтә өндәр ҙә бар тиерлек. Шулай уҡ Урал тәбиғәтендә ишетелгән бөтә тауыштарҙы ла башҡорт алфавитынан табырға була. Ғөмүмән, башҡорт теле - медитатив тел. Был телдә һөйләшкән башҡорттарҙың аңы көн һайын психик көсөргәнештән таҙартыла. Икенсе төрлө әйткәндә, башҡорт теле - ысын мәғәнәһендә аңдың тәбиғи иммунитеты. Бына шуға башҡорттар тыныс холоҡло, ипле һәм донъялары теүәл булыуы менән башҡа халыҡтарҙан айырылып тора. Киң күңелле, ҡунаҡсыл, ваҡ-төйәк өсөн тауыш ҡуптарып йөрөмәйҙәр. Бер ваҡытта ла үҙҙәре һуғыш башламаған, йәғни агрессив түгелдәр. Аңдары сәләмәт булғас, һаулыҡтары ла ныҡ. Әйтәйек, XX быуатҡа тиклем беҙҙең крайҙы өйрәнгән ғалимдарҙың бөтәһе лә башҡорттарҙың сәләмәт халыҡ булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алған.

Андағы психик көсөргәнешлелекте күп кенә өлөшөн тамаҡ төбөндә барлыҡҡа килгән өндәр таҙартырға тейеш. Башҡорт телендә улар бишәү: х, ғ, ҡ, һ, ң, ә урыҫ телендә бер х өнө генә. Урыҫ телендә х өнө тамаҡ төбөндә лә түгел, ә өҫкө аңҡауҙың уртаһында яһала. Күреүебеҙсә, урыҫ теле тамаҡ төбөндә яһалған өндәргә ҡытлыҡ кисерә. Шулай итеп, башҡорт теленең аңды таҙартыу һәләте бик көслө, шуға күрә башҡорт телен донъялағы иң сәләмәт телдәрҙең береһе тип атарға була...

Бына шулай, хөрмәтле гәзит уҡыусылар, телебеҙҙең ни тиклем бай, ҡабатланмаҫ булыуына бер шик тә юҡ. Шуның өсөн дә уны һаҡлау һәм яҡлау беҙҙең мөҡәддәс бурысыбыҙ. Үҙ телебеҙҙә сыҡҡан баҫмаларҙы алдырып уҡып ҡына ла ошо бурысыбыҙҙы үтәй, һаулығыбыҙҙы ла нығыта алабыҙ.

**Наил ЮЛДАШБАЕВ,**
**башҡорт теле уҡытыусыһы.**
**Ейәнсура районы.**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*




### ? 12 июнь - Өфө ҡалаһы көнө. Баш ҡалабыҙ һеҙҙе нимәһе менән арбаны, ни өсөн һеҙ тап ошо ҡалала төпләнергә ҡарар иттегеҙ һәм Өфө йәшәйеш өсөн уңайлымы?

***Сәлимә СӘҒӘҘӘТОВА, журналист:*** Тау башында балҡый бер ҡала, тигән данлыҡлы йыр ҙа бар бит. Өфөбөҙгә ҡайһы яҡтан килһәң дә, ысынлап та, ҡалҡыу урында балҡып ултыра бит. Ырымбур трассаһынан ингәндә Салауат батырыбыҙ һәйкәлен дә, ялтырап ятҡан Ағиҙелебеҙҙе лә, боронғолоҡто һаҡлаған йорттарын да, уларға йәнәш замансаларын да байҡарға тырышам. Шул күркәмлеге күңелгә яҡын баш ҡаланың. Бында төрлө заман, дәүерҙәр осрашыуы ла ҡыҙыҡлы, униһын архитектура һәм тарихи ҡомартҡылар һөйләй. 19-20-се быуат башына ҡараған йорттарҙы иҫкелек ҡалдығы тимәй, ҡалабыҙҙың хәҙерге йөҙөнөң биҙәгенә әүерелдереүгә ынтылыш та бар. Ә шулай ҙа республикабыҙға исем биргән башҡорт халҡының ҡалаһы икәне милли орнамент, биҙәктәр, башҡортса яҙыуҙар, стилләштерелгән урам архитектураһы аша күренеп-беленеп торһон ине, тигән теләк тә бар.

Баш ҡалаға мин бала сағымда уҡ килеп эләктем, интернат-мәктәптә уҡыным. Уҙған быуаттың 60-сы йылдарына тура килгән ул заман менән хәҙергеһе ныҡ айырыла, әлбиттә. Оло юлдан автобус, троллейбустар араһынан арба егелгән аттар йөрөгәне, хәҙер күккә олғашҡан бейек йорттар урынында берәр-икешәр ҡатлы йорттар, бараҡтар теҙелгәне күҙ алдында. Мәктәптән һуң барыбыҙ ҙа тиерлек юғары уҡыу йорттарына индек, күбебеҙ, әлбиттә, Өфө институттарын һайланы. Студент йылдарының романтикаһы, гөрләп торған тормошо, диплом алып, райондарға ҡайтҡас та ҡалдырмағандыр: яйы сыҡҡан һайын Өфөгә барғы килеп тик тора ине. Унда дуҫтар, хыялдарҙы тормошҡа ашырыр өсөн иркен мөмкинлектәр. Өфө йүкәләре, Салауат һәйкәле, Ағиҙел буйы... Бер йәй отпускы мәлендә бер гәзит редакцияһында эш барлығын ишетеп, Өфөгә сыҡтым да киттем. Торлаҡ юҡ, ятаҡтарҙа, кеше фатирҙарында йәшәү барыбер күңелде һүрелдермәне, сөнки эшемде яраттым. Өфөнән сығып китеү уйы башыма ла килмәне, уға күңелем менән тамыр йәйгәйнем. Хәҙер ҡайһы саҡ Өфөнө экскурсияға сыҡҡандай ҡарап йөрөйөм: ул тиҙ үҙгәрә, үҫә, тура мәғәнәһендә өҫкә үрләй. Бер аҙ ғына булмай торған урындары икенсе барыуыңа танымаҫлыҡ булып яңыра.

Йәшәйеш өсөн уңайһыҙ булған мәлдәр тураһында ла әйтеп китәйем. Үҙем Телеүҙәк янында йәшәгәс, ундағы мәҙәни инфраструктураға өйрәнгәнмен. Ләкин Черниковка, Һупайлы, Затон, Дим биҫтәләрендә йәшәүселәр концерт-спектаклдәргә, төрлө күмәк сараларға теләгәнсә йөрөй алмай, сөнки ҡалабыҙ иң оҙон һуҙылған мегаполистарҙың береһе бит. Пик сәғәттәре, тығындар иртәлекисле эшкә барыу-ҡайтыуға уңайһыҙлыҡ тыуҙыра. Өфөләрҙең хыялы - миллионлы ҡалабыҙҙа метро төҙөү. Тик уның аҫтындағы ҡыуышлыҡтар, мәмерйәләр был идеяны тормошҡа ашырыуға ҡамасаулай, тиҙәр. Ә мәсьәләне хәл итеүҙә альтернатив саралар һаман ҡабул ителмәүе йәл. Ер өҫтөнөн һалынған метро, тиҙ йөрөшлө трамвай линиялары буйынса проекттар тураһында ваҡыты-ваҡыты менән һүҙ ҡуҙғатылһа ла, аныҡ эштәргә ашмауы йәл.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Йыл башынан республикала 9,5 меңдән ашыу сабый тыуған. 2026 йылдың биш айында шунса бала табыу сертификаты бирелгән, тип хәбәр итә Социаль фондтың республика буйынса бүлексәһе. Уларға түләүгә 125 миллион һумдан ашыу аҡса йүнәлтелгән. Статистика буйынса, ҡыҙҙарға ҡарағанда малайҙар күберәк тыуған: уларҙың һаны 6 процентҡа күберәк. Сабыйҙарҙың уртаса ауырлығы - 3,3 килограмм, буйы - 52 сантиметр. Ә 738 баланың ауырлығы - 4 килограмдан, өс малайҙыҡы 5 килограмдан ашыуыраҡ тәшкил иткән.

✓Башҡортостандан ауыл советы башлығы Гөлнәфис Ғәфиева гуманитар миссия менән ике улы хеҙмәт иткән МХО биләмәһенә барған. Был хаҡта "Башҡорт батальоны" каналы хәбәр итә. Гөлнәфис Ғәфиеваның улдары, "Гуф" һәм "Уран" позывнойлы кадрлы офицерҙар 2022 йылдан алып фронтта хәрби бурыстарын үтәй. Ошо йылдар буйына әсә алғы һыҙыҡтан хәбәр көтөп йәшәй. Яңыраҡ ҡына яҡташыбыҙ гуманитар ылау туплауҙы ойоштороп, үҙенең геройҙарын күреү өсөн йөктө тәғәйен урынға тиклем оҙатып барған.

✓Донъялағы беренсе "Еңеү поезы" күсмә музейы Стәрлетамаҡта туҡталыш яһаны. 1, 2 июндә ҡала халҡы һәм ҡунаҡтары Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында совет халҡының ҡаһарманлығы тураһында үҙенсәлекле экспозиция менән таныша алды. Поездың һәр вагоны һуғыш осороноң мөһим этаптарына арналған: һуғышҡа тиклемге тыныс ваҡыттан һәм Брест ҡәлғәһен обороналауҙан алып блокадалы Ленинградҡа, хәрби-санитар поезға, штаб вагонына һәм, ниһайәт, 1945 йылда күптән көтөлгән Еңеүгә тиклем. Айырым вагон концлагерҙар фажиғәһе һәм Нюрнберг трибуналы йомғаҡтары тураһында һөйләй.

✓Өфөлә уҙған бизнес-фестивалдә сығыш яһағандан һуң Рәсәй гимнасткаһы һәм телевидение алып барыусыһы Ләйсән Үтәшева Башҡортостандың Әлшәй районында йәшәгән Зөбәржәт өләсәһендә ҡунаҡта булған. "Өфөләге форумдан һуң ҡайҙа юл тотҡанымды аңланығыҙмы? Әлбиттә, нәнәйемә. Ул миненең капиталым", - тип яҙа Үтәшева. Ул интервьюларының береһендә Раевкала йәшәгән олатаһы-өләсәһенә йыш ҡунаҡҡа ҡайтыуы хаҡында әйткәйне инде (олатаһы 2025 йылда донъя ҡуйған). Яҡташыбыҙ уларҙың йортон көс алыу урыны тип атай.

✓Башҡортостан ағымдағы йылдың тәүге дүрт айында сит илдәргә 12,5 мең тонна эшкәртелгән иген продукцияһы оҙатҡан. Күрһәткес үткән йылдың ошо уҡ осоро менән сағыштырғанда 1000 тоннаға, йәки 8 процентҡа күберәк, тип хәбәр иттеләр республиканың Ауыл хужалығы министрлығынан. "Тартылған иген продукцияһы Әзербайжанға, Әрмәнстанға, Грузияға, Ҡаҙағстанға, Ҡырғыҙстанға, Төркмәнстанға, Үзбәкстанға һәм Төркиәгә һатылды. Атап әйткәндә, 11,2 мең тонна он, 198 тонна ярма, 1,052 тонна көрпә, 14 тонна ҡур оҙатылған", - тиелә ведомстоның мәғлүмәттәрендә.

*✓ Бар нимәне заманса итеү теләге һәр саҡта яҡшы тигән һүҙ түгел бит әле. Баш ҡаланың тарихи йөҙөн сағылдырған боронғо йорттарға реставрация эшләү, һаҡлау мәсьәләләренә иғтибарҙы арттырырға кәрәк ине ул.*

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? 12 июнь - Өфө ҡалаһы көнө. Баш ҡалабыҙ һеҙҙе нимәһе менән арбаны, ни өсөн һеҙ тап ошо ҡалала төпләнергә ҡарар иттегеҙ һәм Өфө йәшәйеш өсөн уңайлымы?

***Наил ӘМИНЕВ, 2-се һанлы "Смарт" республика полилингваль күп профилле гимназия директоры:*** Алты йәшлек сағымда атай-әсәйем менән бер-ике көнгә баш ҡалаға килгән инек, шул саҡта поезд тәҙрәһенән милли геройыбыҙ Салауат Юлаев һәйкәлен күреп таң ҡалғаным иҫемдә. Шул пейзаж Өфөгә бәйле аңыма уйылған яҡты бала саҡ хәтирәһе булып һаҡлана. Күптәр өсөн Өфө студент саҡтарын иҫкә төшөрөп тороусы ҡала. Ә мин баш ҡалаға 2009 йылда 23 йәшлек егет булараҡ аспирантураға уҡырға килдем. Быға тиклем Сибайҙа тыуған йорт йылыһында ғына йәшәгән кеше инем мин, шуға күрә Өфөгә килеп урынлашыуым, уҡытыусы булып эш башлауым минең өсөн ҙур аҙым булды. Шулай итеп, Сибай - йәшлек саҡтарымдың хәтирәләрен һаҡлаусы ҡала булһа, Өфө миңә тап артабанғы үҫеш өсөн уңайлы тип һанап, үҙем теләп килгән төйәк ине ул.

Тәүге осор үҙемде Сибай егете тип таныштыра инем, әлбиттә, йылдар үтеү менән нисек Өфөлә ерегеп, өйрәнеп киткәнемде үҙем дә һиҙмәй ҡалдым. Быға тап баш ҡалала һөйгән йәремде осратыуым, ғаиләле булыуым сәбәп булғандыр, моғайын. Һәм Өфөнөң йәшәү өсөн бик уңайлы икәне балаларыбыҙ тыуғас нығыраҡ һиҙелде. Әлеге ваҡытта "Яркий" микрорайонында ғүмер итәбеҙ, бында мәктәп, балалар баҡсаһы, дауахананың яҡын булыуы йәшәйеште, һис шикһеҙ, күпкә еңеләйтә.

Өфө бик динамикалы, тиҙ үҫешә, күҙгә күренеп үҙгәрә торған ҡала. Ял итер өсөн әлеңән-әле яңы урындар булдырылыу, парктарҙы яңыртыу күренештәре бик тә яҡшы. Әммә бар нимәне заманса итеү теләге һәр саҡта яҡшы тигән һүҙ түгел бит әле. Баш ҡаланың тарихи йөҙөн сағылдырған боронғо йорттарға реставрация эшләү, һаҡлау мәсьәләләренә иғтибарҙы арттырырға кәрәк ине ул. 2013 йылда бер уҡыусым менән Аксаков урамында урынлашҡан тарихи йорттар тураһында 90-сы йылдарҙан ҡалған мәғлүмәттәрҙе алып, һәр өйҙөң ул ваҡыттағы хәле менән сағыштырып, ғилми тикшеренеү эше башҡарғайныҡ. Шул саҡта уҡ күп йорттарҙың архив документтарында ғына ҡалғаны, матур өлгөләр һаҡланмағаны борсолдорҙо. Ә бөгөн инде ул урамдағы йорттар тағы ла әҙәйгәндән әҙәйә: ваҡыт менән көрәшкә сыҙай алмай, яйлап ҡына серей, унан тергеҙеү өсөн яраҡһыҙ тип, емерелеп ташланыла, улар урынына ҡатлы-ҡатлы күп фатирлы йорттар үҫеп сыға. Был хәл, әлбиттә, башҡа ҡалаларға ла хас күренеш һәм уның үҙ сәбәптәре лә барҙыр. Ә шулай ҙа... тип кенә әйтергә ҡала инде.



ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

# КИЛЕШЕҮГӘ ӘҘЕР ТҮГЕЛДӘР

**3-6 июндә Санкт-Петербургта булып үткән 29-сы Халыҡ-ара иҡтисад форумы (ПМЭФ) үткән аҙнаның мөһим ваҡиғаһы булды. Дөрөҫ, форум асылған көндө украин дрондары үҙҙәренсә "сәләмләне": Питерҙың Кронштадт, Киров, Красносельский райондары объекттары пилотһыҙ осоусы шартлатҡыс аппараттар һөжүменә дусар ителде.**

Үҙенең был ҡылығы менән Киев режимы Рәсәй сәйәсәтенең артабанғы үҫеш йүнәлешен билдәләргә мәжбүр итәсәк. Рәсәй төпкөлөнә һөжүм маҡсатын Зеленский тактик маҡсат итеп алған булһа ла, стратегик йәһәттән ул үҙ илен хәүеф аҫтына ҡуя: Рәсәйгә бынан ары һәләкәтле әҙемтәләргә килтерәсәк ысын һуғыш юлын һайлауҙан башҡа юл ҡалмаясаҡ, тип билдәләй экспертар. Питер өҫтөндәге ҡара һөрөмгә ҡарамаҫтан, ПМЭФ-2026 эшен уңышлы дауам итте: дүрт көн эсендә төрлө илдәр менән 6,642 трлн һумлыҡ 1 084 килешеү төҙөлдө. Был юлы иҡтисад форумы үҙ майҙанында донъяның 140 иленән 24 меңдән ашыу эре бизнес, банктар, дәүләт структуралары һәм халыҡ-ара ойошмалар вәкилдәрен, шулай уҡ киң мәғлүмәт саралары журналистарын ҡабул итте. Шулар араһынан Сәғүд Ғәрәбстаны делегацияһы менән БРИКС илдәре вәкилдәренә айырым иғтибар бүленде.

Әйткәндәй, форум эшендә ун йыл эсендә тәү тапҡыр АҠШ менән Германия делегацияһы ла ҡатнашты һәм был, уларҙың санкциялар яҡлы илдәр иҫәбендә булыуҙарына ҡарамаҫтан, Рәсәй менән эшлекле диалогты тергеҙеү ихтималлығына асыҡтан-асыҡ ишара булды. Икенсенән, был көнбайыш донъя тарафынан Рәсәйҙе иҡтисади "ҡамауҙа" ҡалдырырға маташыуҙарҙың юҡҡа сыға барыуын күрһәтһә, иҡтисади мәнфәғәттәрҙең сәйәси тыйыуҙарҙан өҫтөн булыуын да раҫлап тора. Нисек кенә булмаһын, ПМЭФ шуны күрһәтә: донъя иҡтисады глобаль күпселек яғына ауыша: БРИКС илдәре донъя тулайым продуктының 40 проценттан ашыуын, йәғни тотош иҡтисад үҫешенең яртыһын тәьмин итә, ә иҡтисад йәһәтенән иң үҫешкән иҫәпләнеүсе АҠШ, Канада, Италия, Британия, Франция, Германия, Япония илдәрен берләштереп тороусы G7 төркөмө өлөшө - ни бары 18 процент тәшкил итә. РФ Президенты кәңәшсеһе Антон Кобяков әйтеүенсә, ошондай шарттарҙа Европа илдәренә Рәсәй энергоресурстары менән ашламалар әһәмиәтен тейешенсә баһаларға ваҡыт етте. Көнбайыш инвесторҙарының Рәсәйҙә эшләү мөмкинлегенә ҡыҙыҡһыныуҙары арта барыуы йәнә лә шуны раҫлап тора: Рәсәй өсөн бер ниндәй "ҡамау-кәртәләр" ҙә юҡ.

Владимир Путин ҡатнашлығында үткән пленар ултырыш һәм унда РФ Президентының сығышы форумдың төп мөһим ваҡиғаһы булды. Киң мәғлүмәт саралары билдәләүенсә, уның сығышын бөтөн донъя күҙәтте. Үҙенең телмәрендә ул иҡтисадты үҫтереүгә һәм инвестиция климатының асыҡлығы, тотороҡлолоғона төп иғтибарҙы йүнәлтте. Уның билдәләүенсә, Рәсәйҙең нефть һәм газ килеменә бәйлелеге 50-нән 20 процентҡаса кәмене, ә санкциялар арҡаһында еврозонаның үҙ-үҙен күрәләтә зыянға дусар итеүе 1,5- 2,4 трлн евроға барып баҫты. Европаның фәҡирләнә барыуына шул факт та асыҡ дәлил: былтыр уларҙың дәүләт бурыстары 81,7 процентҡа тиклем артты. Иң насар күрһәткестәр Греция буйынса - 146 процент, Италияның - 137, Францияның - 115 процент һ.б., ә Рәсәйҙең дәүләт бурысы кимәле ни бары 16,4 процент. Белгестәр билдәләүенсә, Владимир Путиндың пленар ултырыштағы сығышы эске иҡтисади көн тәртибенә һәм халыҡ-ара хеҙмәттәшлеккә анығ йүнәлеш бирҙе. Был йүнәлеш - донъяның өс иң эре иҡтисад ҡеүәте иҫәбенә инеү. Президент киләсәктең өс төп технологияһын айырып күрһәтте: яһалма интеллект, автоном системалар һәм цифрлы платформалар. Рәсәйҙә иҡтисад үҫеше инфляцияның түбәнәйә барыуы менән үрелеп барырға тейеш һәм ул ысынлап та әкренәйә бара, ә йыл ахырына 5,2 процентҡа яҡынлашасаҡ.

Махсус хәрби операция темаһына ҡағылышлы, Рәсәй Президенты Зеленскийҙың Владимир Путинға асыҡ хаты буйынса аңлатма бирҙе һәм уның йөкмәткеһендә хаяһыҙлыҡ (хамство) билдәләре булыуын билдәләне, Киев яғының шәхси осрашыуға ынтылышына икеләнеү менән ҡарауын белдерҙе. Шул уҡ ваҡытта бындай осрашыуҙың украин яғы өсөн Рәсәй ғәскәрҙәре һөжүмен туҡтатырға маташыу икәнен билдәләне. Ә Мәскәүгә оҙайлы ваҡытҡа иҫәпләнгән ышаныслы килешеү кәрәк. Ҡыҫҡаһы, Путин Украина конфликтын тамамлауға теләге барлығын, ләкин Киевтың әлегә тыныс килешеүҙәргә әҙер түгеллеген белдерҙе һәм Зеленский менән шәхси осрашыуҙың мәғәнәһен күрмәүен әйтте.

Британияның хәрби аналитигы Александр Меркурис фекеренсә, Көнбайышта Украина армияһының (ВСУ) уңышһыҙлыҡтарын танымаҫҡа башҡаса әмәлдәре юҡ, сөнки ВСУ-ның бер-бер артлы биләмәләр юғалтыуының төп сәбәбе - һәләкәт кимәлендә ғәскәр составы һанының етешмәүе. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, Европа элитаһы һуғыш темаһына ҡотҡо таратыуҙан туҡтамай. Донъя мәғлүмәт сығанаҡтары хәбәр итеүенсә, 8 июндән Рәсәйҙең көнбайыш сигендә НАТО киң ҡоласлы 12 көнлөк хәрби-һауа көстәре күнекмәләре башларға йыйына, унда Төньяҡ Атлантика альянсының 20-гә яҡын союздаш илдәре ҡатнашасаҡ. Күнекмәләрҙең төп этаптары Дания, Финляндия, Норвегия, Швеция, Испания территорияларында үткәреләсәк. НАТО-ның Хәрби-һауа көстәре командалығы мәғлүмәттәре буйынса, күнекмәләрҙә 150-200-ләгән хәрби самолет көнөнә 150 осош яһаясаҡ, тип күҙаллана. Был күнекмәләрҙең маҡсаты - коллектив оборона бурыстарын башҡарыуға әҙерлекте нығытыу, тип иғлан ителә.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓ Каспий диңгеҙе циклоны Башҡортостанға ямғырҙар алып килә. Был турала Башгидрометүҙәктән хәбәр иттеләр. Айырыуса республиканың көньяҡ-көнсығышында, йәғни Урал аръяғында көслө яуым-төшөм көтөлә. Бәләкәй тау йылғаларында һыу кимәленең күтәрелеүе, быуалар һәм һыуһаҡлағыстарҙың тулыуы ихтимал, тип иҫкәртә синоптиктар. Температураға килгәндә, төндә +5, +12, көндөҙ +15, +21 градус. Ял көндәренә күктә дым запасы кәмей башлай.

✓ Өфөлә иң матур сәскә түтәлдәре һәм йорт яны биләмәләрен биҙәү буйынса конкурста ҡатнашыу өсөн ғаризалар ҡабул ителә. Был үҙенден ижади һәләтенде күрһәтеү һәм ҡаланы биҙәүгә өлөш индереү өсөн бик яҡшы мөмкинлек, тип хәбәр итәләр Өфө хакимиәтенән. Конкурс ике номинацияла үтә: йорт яны территорияһын иң яҡшы йәшелләндереү һәм иң яҡшы ихата сәскәлеге йәки баҡсаһы.

✓ Затон биҫтәһендәге 46-сы лицейҙа ремонт эштәре дауам итә. Бинаның тәҙрә рамдары, ишектәр алмаштырыла, аҫылмалы түшәмдәр, яҡтыртҡыстар һәм сантехника яңынан монтажлана. Биләмә ҡоймаһы ла алмаштырыласаҡ. Капиталь ремонт өсөн 88,5 миллион һум аҡса бүленгән. Планға ярашлы, мәктәп яңы уҡыу йылына ишектәрен асырға тейеш.

✓ Шишмә районында Дим йылғаһы аша күпер ремонтлана. Ул Өфө - Шишмә юлында Ҡара Яҡуп ауылынан алыҫ түгел ерҙә урынлашҡан. Ремонт эштәрен 2027 йылда тамамлау күҙаллана. "Күперҙе яңыртыу 50 меңгә яҡын кеше йәшәгән Шишмә районы халҡы өсөн бик мөһим. Ошо юлдан улар район үҙәгенә һәм Өфөгә йөрөй, баш ҡала менән тоташтырған автобустар маршруты үтә", - ти Башҡортостандың транспорт һәм юл хужалығы министры Любовь Минакова.

✓ "Башстат" мәғлүмәттәре буйынса, үткән аҙнала тауыҡ йомортҡаһы, банан, алма, макарон, тары ярмаһы, һыйыр ите, сусҡа ите, балалар өсөн йәшелсә һәм ит консервалары, ярымыҫланған һәм бешереп ыҫланған колбаса, яңы помидор, кефир, он һәм башҡа аҙыҡ-түлек 0,01 - 2,36 процентҡа арзанайған. Шул уҡ ваҡытта ҡыяр, кишер, һуған, сөгөлдөр, кәбеҫтә, эремсек, тауыҡ, печенье, көнбағыш һәм аҡ май, тоҙ, ҡара сәй, бешерелгән колбаса, туңдырылған балыҡ, дөгө, сыр һәм башҡа аҙыҡ-түлек 0,08-6,84 процентҡа ҡиммәтләнгән.

✓ 1 июндән Utair авиакомпанияһы Өфөнән Краснодарға осоштар программаһын асты. Был хаҡта "Өфө" халыҡ-ара аэропортының матбуғат хеҙмәте хәбәр итте. Рейстар дүшәмбе көндәрендә Boeing-737 самолеттарында башҡарыла. Юлдағы ваҡыт - 3 сәғәт 45 минут. Бынан тыш, "Аэрофлот" авиакомпанияһы рейстары менән аҙнаһына өс тапҡыр Өфөнән Краснодарға осорға мөмкин.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ТЕЛ ХИКМӘТТӘРЕ

Ә

# АУЫҘЫҢА БАЛ ДА МАЙ

**Элегерәк беҙҙең халыҡта берәй кешенән яҡшы хәбәр ишеткәндә, хуплап, рәхмәт йөҙөнән яуап итеп, "Һай, ауыҙыңа - бал да май" тиерҙәр ине. Бындай ҡыуаныслы хуплау, рәхмәт һүҙен әле лә һирәкләп ишетергә тура килгеләй.**

Был "Ауыҙыңа - бал да май" тигәндең мәғәнәһе асыҡ, аңлауға ҡыйынлыҡ тыуҙырмай кеүек. Башҡорт халҡы Урал тауҙарында һәм уның тирә-йүнендәге ерҙәрҙә бик боронғо замандарҙа формалашып, ул ерҙәрҙән бер ҡайҙа ла китмәйенсә, шунда көн иткән. Малсылыҡ менән шөғөлләнгән боронғо төрки халыҡтар, шул иҫәптән башҡорттар буйынса ла оло белгес, совет, Рәсәй археологы С.А.Плетнева әле совет заманында уҡ ошоно раҫлап яҙа: "Башҡорттарҙың тотороҡло үрсеп, үҫешеп, тормошта тыуып торған төрлө тарихи катаклизмдарға бирешмәйенсә, һаҡланып ҡалыуын уларҙың Уралда бик боронғо дәүерҙәрҙә формалашып, аҙаҡ был ерҙәрҙән бер ҡайҙа китмәйенсә, шунда нығынып көн итеп, шундағы тәбиғәт шарттарына яраҡлашып хужалыҡ итеүҙәре менән генә аңлатырға булалыр", - тип яҙып сыҡҡайны уҙған быуаттың 80-се йылдарында.

Ысынлап та, башҡорт донъяһы Уралдың ҡырыҫ тәбиғәт шарттарына ныҡлап яраҡлашҡан комплекслы хужалыҡ булған. Төп йәшәү сығанағы малсылыҡ булһа ла, башҡорт шулай уҡ игенселек, балыҡсылыҡ, ҡортсолоҡ менән дә ныҡлап шөғөлләнгән. Ҡортсолоҡтоң иң боронғо ысулы булған солоҡсолоҡ кәсебенең тик башҡортта ғына һаҡланып ҡалыуы үҙе уҡ күп нәмә тураһында һөйләй. Башҡорт иленә килгән урыҫ һәм башҡа милләт кешеләре башҡорттоң көнитмешен ҡарап, уның тураһында "башҡорт иң төп ҡортсо", тип буштан ғына әйтмәгәндер.

Хужалыҡ итеү ысулдарын Уралдың ҡырыҫ тәбиғәт шарттарына яраҡлаштырып хужалыҡ алып барған башҡорт өсөн бал һәм май иң туҡлыҡлы һәм төп ризыҡтарҙан һаналған. Шуға күрә лә ул, яҡшы хәбәр килтергән кешенең үҙенә лә изгелек, донъяһының гел теүәл, ризыҡның һәр саҡ мул булыуын теләп, уға "Ауыҙыңа - бал да май" тип яуаплаған, күрәһең.

Был матур теләк бик тә оҙон ғүмерлелер. Ул башҡорттоң ата-бабаларының береһе һаналған боронғо һинд-арийҙар дәүеренә барлыҡҡа килгән, тиергә була. Бал һәм май тултырылған көршәктәр тураһында "Ригведа", "Атхарваведа" тигән боронғо әҫәрҙәрҙә телгә алына. Баҡыйлыҡҡа күскән кешеләр теге донъяла ла туҡ һәм ҡәнәғәт булһындар, тип, әхирәткә оҙатҡанда уларҙың баш осона һиндарийҙар бал һәм май тултырылған көршәктәр ҡуйыр булған. Боронғо ҡурғандарҙан табылған бындай көршәктәр ғалимдар тарафынан ярайһы уҡ ныҡлап тикшерелгән.

Шулай итеп, үҙебеҙҙең ваймыһыҙлығыбыҙ, битарафлығыбыҙ арҡаһында хәҙер һирәк ҡулланылған, телебеҙҙән төшөп ҡалып барған һәм онотолоуға дусар ителгән "Ауыҙыңа - бал да май" тигән бик тә матур боронғо теләк-һүҙбәйләнештең бер нисә мең йыллыҡ тарихы бар икәнен күрәбеҙ. Ундай боронғолоҡ һәр халыҡҡа ла бирелмәгән, шулай булғас, уларҙы көндәлек тормошта ҡулланып, киләсәк быуынға тапшырып, артабан да йәшәтергә кәрәк. Киләсәк быуын ғалимдары ла халҡыбыҙҙың үткәндәрен тикшерер һәм әлеге боронғо һүҙҙәр уларҙың да ғилми тикшеренеүҙәрендә бик тә кәрәк буласаҡ, тип өмөтләнәйек.

**Зәкирйән ӘМИНЕВ, этнограф.**

ТАНЫШ ХӘЛМЕ?

# ҺӘР БЕЛГЕС...

## үҙ эшенең "табибы" булһын!

**Бөгөнгө көндә автомобиле булмаған кеше юҡ тиерлек. Шуға күрә гәзит уҡыусылар был мәҡәләмдә әйтергә теләгәнемде бик яҡшы аңлар, тип ышанам.**



Элегерәк өр-яңы "Калина" автомобиле һатып алғайным. Нисәләр йыл йөрөгәс, бер мәл машинамды ҡабыҙа алмай, бер килке интектем, таныштарымдың автомобиленә тағып, автоэлектрикка алып барҙым. Был һөнәрмән бик белемле, етеҙ егет булып сыҡты. Тиҙ генә сәбәбен таба һалып, үҙенең бер запчасын ҡуйғайны, машинам шунда уҡ гөрләп эшләй ҙә башланы. Әлеге кәрәк деталде магазиндан һатып алып килеп, йүнәтеүсе егеткә тапшырҙым. Әммә, мин килеүгә... әлеге электрик бөтөнләй башҡа урында тағы бер "боҙоҡ" тапҡан икән. Шул нәмәһен дә мотлаҡ алыштырырға кәрәк булып сыҡты. Шунһыҙ машина эшләмәйәсәк, йәнәһе. "Улай булғас, был запчасты мин юҡҡа алғанмынмы?" тип уйланауйлана, елкәмде ҡашый-ҡашый, магазинға барып, тағын бер деталь һатып алырға мәжбүр булдым. Был егеткә, әлбиттә, бер ни ҙә өндәшеп торманым, ике эш өсөн һораған суммаһын бирҙем. Үҙем табип булараҡ, автомобилде әҙәм организмы менән сағыштырып фекерләп, "эстән генә көлөп" сығып киттем. Ысынлап та, кеше, әйтәйек, бер юлы ике сәбәп арҡаһында - йөрәк инфарктынан һәм, шул уҡ ваҡытта мейе инсультынан үлмәй бит! Башҡаса был электрикка бармаҫҡа ҡарар иттем...

Үкенескә, автомобилдә һәм башҡа техникаларҙа бер ни ҙә аңламаған кешеләрҙе ана шулайтып, "төп башына" ултыртыусы "зирәктәр", һирәкләп булһа ла осрағылай. Стоматолог берәй пациенттың һыҙлаған тешенән тыш, бөтөнләйгә һау булған тағы бер тешен һурып алып, һуңына, уның урынына протез ҡуйып, шуның өсөн аҡса алған һымағыраҡ килеп сыға түгелме был? Нәҡ шулай ҙа баһа!

Шул уҡ "калинам" менән булған икенсе бер осраҡ та ныҡ ҡына хәтеремдә уйылып ҡалған. Прибор щитында двигатель һүрәте төшөрөлгән һары төҫтәге сигнал лампаһы янып, күнелдә "әйкәй" башланы бер мәл. Машинаның инструкцияһына ярашлы, бигүк ашығыс булмаһа ла, тиҙ арала СТО-ға барып, машинаның двигателен тикшертеп, йүнәттереп алырға кәрәклеген беләм. Алып барҙым. Егеттәр автомобилдең бер ерен асып, үҙҙәренең "компьютерная диагностика" тигән нәмәләренә тоташтырҙылар. "Эй, афариндар, - тип уйлап торам, - хәҙерге заманда нимә генә уйлап сығармайҙар!" Экранда "проверьте исправность двигателя" тигән һымағыраҡ яҙыу сыҡты. Мастерҙарҙың береһе миңә: "У вас что-то с двигателем", - ти. "Уныһын мин былай ҙа беләм, егеттәр", - тием тегеләргә. "Свечаларын алыштырырға кәрәк..."- тиҙәр. "Алыштырығыҙ һуң..." Яҡындағы автомагазинға инеп, яңы свечалар һатып алып килдем. Алыштырҙылар. Әммә... Прибор һаман әлеге "двигателде" күрһәтә. "Проводтарын алыштырырға кәрәк", - ти икенсеһе. Әлеге магазиндан уларын да алып килдем. Проводтарҙы ла алыштырып ҡуйҙылар, әммә машинамдың хәле үҙгәрмәне. Ни эшләргә? "Һеҙгә фәлән СТО-ға барырға кәрәк", - тинеләр. Минән ярайһы ғына һиҙелерлек сумма аҡса ла һоранылар. Минең һорауым тәбиғи: "Ни өсөн?" "Беҙҙең эш өсөн. Компьютер диагностикаһы - шунса, свечалар, проводтар алыштырыу фәләнсә тора..." Стенала әлеүле торған прейскурантты күрһәткәстәре, кеҫәмдән сығарып, һораған хаҡты бирҙем.

Икенсе СТО-ға барғас та, машинаһын йәнәт кенә йүнәттерет алған икән был тип уйлаһағыҙ - хаталанды ғыҙ. Унда ла әлеге комьютер менән тикшереп ҡаранылар. Бензин фильтры һатып алырға ҡуштылар. Яңы фильтрҙың файҙаһы булмағас, арҡты ултырғысын күтәреп, уның аҫтында торған бензин бағын аса башланылар. Уларҙан ни эшләргә йыйыныуҙарын һораным. "Бак эсендә торған бензонасосты алыштырып ҡарарға кәрәк", - тиҙәр. Ул насостың күпме тороуы хаҡында һораштым. Хаҡы ҡиммәт. Был егеттәрҙән артабанғы "ярҙамынан" ҡырҡа баш тарттым. "Һеҙ егеттәр, һуҡыр көйөнсә һәрмәнеп, ҡараңғыла ниҙер эшләгән кешене хәтерләтәһегеҙ. Бензабакты кире ябығыҙ!" - тинем. Яптылар. Ярҙам итә алмағандары өсөн минән ғәфү үтенеп, оҙатып ҡалғандар икән тип уйлаһағыҙ, тағы ла хаталандығыҙ. Баштағы мастерҙар һымаҡ уҡ, һәр бер борған шөрөбө өсөн тип әйтерлек, хатта әлеге артҡы ултырғыс аҫтындағы бензобакты асып, ҡабат япҡандары өсөн дә, прейскурантҡа ярашлы сумманы, урыҫтар әйтмешләй, "добросовестно" алып ҡалдылар...

Аптырағас, карбюраторҙар йүнәтеү менән шөғөлләнгән шәхси СТО-ға киттем. Унда эшләгән Рөстәм исемле бер егетте беләм. "Һинең һөнәрең буйынса булмаһа ла, Рөстәм ҡустым, ҡарап ҡына ебәрсе..." Үҙемдең ҡайҙарға барып, ниҙәр алыштырғыларағанымды хаҡында һөйләп бирҙем. Рөстәм шунда уҡ двигателдең цилиндрҙарын тикшерә башланы... Ун-ун биш минуттан: "Ағай, машинағыҙҙың двигателенең дүртенсе цилиндры эшләмәй тора бит. Компрессияһы етеш булмау сәбәпле. Һеҙгә уның клапандарын алыштыртырға кәрәк. Баҙар янындағы СТО-ла Фәләнов Миша исемле моторист бар. Ана шул кеше һеҙгә йүнәтеп бирер..." "Рәхмәт, ҡустым, мин һиңә күпме аҡса тейешмен?" "Мин бер нәмә лә эшләмәнем бит, ағай, тик ҡәнәш кенә бирҙем. Бер тин дә кәрәкмәй..." Моторист Миша тиҙ арала машинамды йүнәтеп тә бирҙе. Яҡшы белгестәрҙән арабыҙҙа булыуына һөйөнөп, ҡайтып киттем.

Рөстәм тигәндән, шул хәлдән һуңғараҡ, был егеттең атаһы менән Көрьән уҡыу мәжлесендә күрешергә тура килде. Уның атаһы - Наил Әхмәт улына әлеге хәлде һөйләп ҡыуандырҙым. Ә ул миңә Өфө ҡалаһына барғанында үҙе менән булған бер хәлде һөйләп көлдөрҙө. Баш ҡалаға барғанында машинаһы ниндәйҙер сәбәп менән насар эшләй башлаған икән. Яҡындағы СТО-ға мөрәжәғәт иткән. Шундағы бер мастер Наил ағайҙың ҡайһы яҡтан булыуын һорашып алғас, уға: "Һеҙҙең ҡалала Рөстәм исемле бер бик шәп белгес бар. Ҡайтыу менән шуға мөрәжәғәт итегеҙ, ағай. Машинаның ошо өлкәне буйынса унан да яҡшы мастерҙы тапмаҫһығыҙ..." - тип әйткән икән...

Баштараҡ телгә алған мастер "что-то с двигателем..." тигәс, әрмелә хәрби госпиталдә табип булып бергә эшләгән хеҙмәттәшем - юғары категориялы хирург Владимир Иванович Быков атлы бер шаян, мәрәкәсел майор иҫемә төшөп китте. Бер һалдаттың эсе ауыртып, госпиталгә килгәне хәтеремдә. Уның "эсем ауырта" тиеүенән башҡа берәй аныҡ сиргә ишаралаусы объектив симптомдары (билдәләре) булмауы табиптарға, әлбиттә, ҡатмарлы ғына мәсьәлә булып торҙо (Хатта симулянттың һүҙенә лә табип башта ышанырға, сир булмауы асыҡланғанға тиклем уны һәр яҡлап тикшерергә бурыслы). Һәр төрлө һөнәрмәндәр (хатта невролог, психиатр ҙа) ҡарап та аныҡ һығымтаға килә алмаған шундай осраҡтар медицинала булыу ихтималлығын табиптар яҡшы белә (ул саҡта компьютер томографияны тигән нәмә лә юҡ ине). Шул уҡ ваҡытта, эште оҙаҡҡа һуҙыуҙың да насар һөҙөмтәгә килтереү ҡурҡынысы бар. Йәнәтләп, һәр төрлө өҫтәмә диагностик саралар үткәргәндән һуң, госпиталь начальнигы ҡарары буйынса табип консилиумына йыйылдыҡ. Әлеге һалдатты ҡараған һәр һөнәрмән үҙенең фекерен әйтә. Гастрит, сей яра, панкреатит, аппендицит, энтероколит һәм башҡа төр эс ауырыуҙары, хатта яман шештәр хаҡында берәм-һәрәм фекер алышып, уларҙы (аныҡ ошо һалдатҡа ҡарата) бер-бер артлы инҡар итеү процесы бара. Госпиталь начальнигы әлеге хирург Быковҡа һүҙ бирә: "Владимир Иванович, как вы думаете? Что у этого бойца?" Доктор Быков ашыҡмай ғына торҙо ла, хәйләле йылмайып, былай тине: "Виктор Васильевич, я думаю, что у данного солдата что-то с животом..." Артабан бер аҙ ғына пауза. Беҙ, ошоғаса баш мейеләребеҙҙе "көсәндереп" ултырған табиптар, барыбыҙ ҙа кинәт кенә көлөп ебәрҙек. Пациентта, әлбиттә, һис кенә лә көлкө ҡайғыһы юҡ, әммә ул да йылмайып ҡуйҙы. Әлеге доктор Быков (мин уның ифрат та белемле, оҫта хирург икәнлеген яҡшы беләм) артабан етди төҫ алды, һүҙен дауам итеп, һәр төрлө дәлилдәр килтереп, бик һирәк осрай торған бер сир хаҡында үҙенең фекерен әйтте. Башҡаларыбыҙ ҙа уның менән ризалашып, һалдатҡа операция кәрәклеге тураһында ҡарар сығарҙыҡ. Операция уңышлы тамамланды, күпмелер ваҡыттан һалдатыбыҙ йүнәлеп, казармаға ҡайтып та китте...

Ошо миҫалды килтереүем тигенгә түгел, ҡәҙерле дуҫтар. Тормошобоҙҙағы башҡа һәр өлкәлә лә, нәҡ ана шул табиптар һымаҡ, үҙ эшенә яуаплы ҡараусылар күберәк булһа ине, тимәксемен. Әлбиттә, кеше ғүмере менән бәйле булмаған теге йәки был һөнәрмәндең эшенең нескәлектәрен бөтәндәр, хатта начальнигы ла белмәүе мөмкин. Әммә, берәү ҙә күрмәй тип, башта бәйән ителгән һымаҡ, һәр төрлө "мутлыҡ" уйлап сығарыуҙар бер кемде лә матурламай. Һәр кешенең ҡылығын уның намыҫы контролдә тоторға тейеш, тип һанайым. Һәммәбеҙ ҙә үҙ эшебеҙгә Гиппократ анты биргән табип һымаҡ намыҫ менән ҡараһаҡ, тормошобоҙ тағы ла гүзәлерәк булыр ине...

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ, отставкалағы хәрби табип.**

✓ *Даль башҡорттарҙың ауыр иҡтисади хәле, уларҙың властар тарафынан йәберләнеүе хаҡында ла яҙа. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Далдең башҡорт кантондарына сәйәхәте ваҡытында яҙылған мәғлүмәттәре әлегә тиклем табылмаған.*

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# БАШҠОРТТАРҘЫҢ ТЕЛЕН...

## һәм мәҙәни мираҫын белгән ғалим

**Рәсәй Президенты В.В. Путиндың указына ярашлы, быйыл бар донъяға "Толковый словарь живого великорусского языка" иseме аҫтында билдәле булған бик ҙур һүҙлек авторы, яҙыусы, этнограф, хәрби хирург Владимир Иванович Далдең тыуыуына 225 йыл тулыуы киң билдәләнеп үтәсәк.**



Әйткәндәй, ошо һүҙлек өҫтөндә В. И. Даль ярты быуаттан ашыу эшләй: тәүге һүҙ-ҙәргә аңлатма 1819 йылда бирелһә, 1872 йылда һуңғы һүҙҙәре индерелә. 4 томлы хеҙмәт 200 меңдән ашыу һүҙҙән тора, аңлатмалар сифатында 30 мең мәҡәл, әйтем һәм йомаҡ килтерелә. Йәнә шуныһы ҡыҙыҡ: Далдең атаһы сығышы буйынса Дания кешеһе була, һуңынан Рәсәй подданные булып китә. Әсәһе - француз ҡатыш немка. Был ғаилә заманы өсөн бик уҡымышлы заттар иҫәбенә инә. Далдең атаһы Иоган Кристиан 6 телдә иркен һөйләшһә, әсәһе Мария Фрейтаг рус һәм донъя әҙәбиәтен бик яҡшы белә, байтаҡ ҡына сит ил яҙыусылары әҫәрҙәрен рус теленә тәржемә итә. В.И. Даль Луганск заводы тип аталған ҡасабала тыуа (хәҙерге Луганск ҡалаһы), ҡайһы бер әҫәрҙәрен "Казак Луганский" тигән әҙәби псевдоним аҫтында баҫтыра.

Кадет корпусын тамамлаған Владимир Даль 6 йыл рус флоты мичманы булып хеҙмәт итә, унан һуң Дерпт университетының медицина факультетын тамамлай, рус-төрөк һуғышында хәрби хирург вазифаһында яралыларҙы дауалай. Билдәле рус табибы Николай Пирогов Далдең һәләттәренә юғары баһа бирә. Атаһы кеүек, ул да полиглот була, 12 телде, шул иҫәптән латин, инглиз, немец, француз, поляк, башҡорт һәм ҡаҙаҡ телдәрен яҡшы белә.

В.И. Даль 1832 йылда рус халыҡ әкиәттәре ерлегендә үҙенсә эшкәртелгән 5 рус әкиәте китабын баҫтыра, яҙыусы булараҡ, замандаштары араһында билдәлелек таба. Әммә, ошо китапта властарға ярамаған фекерҙәр бар, тип, уны ҡулға алалар. Күренекле рус шағиры В.А. Жуковский уны яҡлап сыға, Далде хөкөм итмәйҙәр. В.А. Жуковский Далгә ваҡытлыса алыҫҡараҡ китеп йәшәргә тәҡдим итә һәм 1833 йылда Ырымбур хәрби губернаторы итеп тәғәйенләнгән генерал В.А. Перовский менән таныштыра. Абруйлы генерал Далде үҙенә хеҙмәткә саҡыра, һәм ул 1833 йылдың июленән Ырымбурҙа махсус поручениелар буйынса чиновник вазифаһында эшләй башлай. В.И. Даль Ырымбур губернаһын арҡырынан буйға йөрөп сыға, барса башҡорт кантондарында булып, халыҡ тормошон, уның мәҙәниәтен өйрәнә. Тап шул ваҡытта Ырымбурға А.С. Пушкин килә, Даль уны төбәктең Емельян Пугачев менән бәйле урындарына оҙатып йөрөй. В.И. Даль Пушкинға үҙенең яман даны сыҡҡан әкиәттәр китабын да бүләк итә, китап шағир күңеленә хуш килә. Бөйөк рус шағиры аҙаҡтан "Сказка о рыбаке и рыбке" тип исемләнгән шиғри әкиәт китабын Далгә бүләк итеп, ошондай автограф ҡуя: "Твоя от твоих! Сказочнику Казаку Луганскому, сказочник Александр Пушкин". Пушкин дуэлдә үлемесле яра алғас, Даль шағирҙың һуңғы сәғәттәренә тиклем уның янында була.

Ырымбурҙа хеҙмәт иткән сағында В.И. Даль ошо төбәктә йәшәгән рус, башҡорт, ҡаҙаҡ халыҡтарының этнографияһын ентекләп өйрәнә, уларҙың мәҙәни мираҫы нигеҙендә байтаҡ ҡына әҫәрҙәр ижад итә. Әйтергә кәрәк, рус этнографы башҡорт фольклоры өлгөләрен дә йыя, башҡорт халыҡ йырҙарын яратып тыңлай. Мәҫәлән, уның "Обмиранье" хикәйәһендә ошондай эпизод теркәлгән: "Смеркалось вовсе, и мы катились по дороге, что по полотну, молча. Наконец возница мой соскучился и, оглянувшись, спросил: "Юрлайме?" (Запеть, что ли?). "Юрлай, - отвечал я, будто проснувшись в раздумьи, - пой..." - Башкир, будто мехом потянул в себя дыханье, задержал его и залился плачевным, высоким голосом, словно издали по ветру донесся звучный стон, под конец замиравший; затем последовал однообразный напев, на слова местного народного сочинения: "Сакмар быстра, бреуна тулста, икмяк да йок, капрал да сок!"

Далде әкиәт иле кеүек тойолған Башҡорт ерҙәре, уның тылсымлы мәмерйәләре, риүәйәт-легендаларҙа бәйән ителгән Аслыкүле һәм Ҡандракүле нык һоҡландыра. Уның байтаҡ ҡына әҫәрҙәре башҡорт мотивтары менән биҙәлгән, улар иҫәбенә мауыҡтырғыс итеп яҙылған "Майна", "Охота на волков" хикәйәләре, башҡорт һәм ҡаҙаҡ тормошон сағылдырған "Бикей и Маляуна" повесы, башҡа бер әҫәрҙәрен индереп була. Владимир Далгә башҡорт халҡының фольклор гәүһәрҙәренән "Заятүләк менән Һыуһылыу" мифологик эпосы шул тиклем оҡшай, һәм ул ошо эпостың "Башкирская русалка" тип исемләнгән русса вариантын 1843 йылда "Москвитянин" журналдында баҫтырып сығара. Әлбиттә, рус уҡыусылары өсөн махсус әҙерләнгән баҫма ошо эпостың башҡа варианттарынан үҙенең художество формаһы менән айырылып тора. В. Даль яҙмаһы тулыһынса прозаик әҫәр, ә уның башҡорт телендәге версияларында һөйләү телмәре йыр-шиғри, йәғни поэтик тел менән сиратлашып килә. Шулай ҙа халҡыбыҙҙың мәҙәни мираҫын Рәсәй кимәленә сығарған этнограф әлегә тиклем оло хөрмәткә эйә. "Башкирская русалка" әҫәренең инеш өлөшөндә В.И. Даль башҡорттарҙың ауыр иҡтисади хәле, уларҙың властар тарафынан йәберләнеүе хаҡында ла асыҡтан-асыҡ яҙа. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Далдең башҡорт кантондарына сәйәхәте ваҡытында яҙылған мәғлүмәттәре әлегә тиклем табылмаған.

В.И. Далдең башҡорт тормошо менән бәйле яҙмаларында халҡыбыҙҙың килеп сығышы хаҡында башҡорттарҙың үҙ ҡараштары ла урын алған, уларҙың йолалары, боронғо риүәйәттәре, инаныстары сағылдырыла. Ул ошо хаҡта бына нисек яҙа: "Башҡорттарҙа әлегә тиклем боронғо инаныстар, риүәйәттәр һаҡланып ҡалған: яман дейеү пәрейе кеше, бесәй, эт һәм бигерәк тә барс һәм юлбарыҫ булып күренә ала, ҡайһы саҡта уның ялы алтындан була; күренекле башҡорт батырҙары, ошо имәнес зат төрлө ҡиәфәткә инеп, һөжүм иткәндә, бигерәк тә ҡыҙҙарҙы урлап алып киткәндә, уның менән көрәшеп дан яулай; дейеү пәрейе кеше, йә батыр образына ингән саҡта, уны, Ахилл кеүек, тик үксәһенән генә яралап була".

**Бәҙри ӘХМӘТОВ тәржемәһе.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



**Сергей РУДЕНКО**

# БАШҠОРТТАР

## Йорт производствоһы

Урманһыҙ ерҙә көн күреүсе башҡорттар көнкүрештә ағасты бик һирәк осраҡта ҡулланған. Торлаҡ эшләү өсөн уларға ҙур булмаған ағастар ҙа еткән, һауыт-һаба башҡа материалдарҙан яһалған, ә яғыу өсөн ваҡ ҡыуаҡлыҡтар һәм хайуан тиҙәге ҡулланылған. Ағастан нимәлер яһау өсөн яҡшы бысаҡ, бик һирәк осраҡтарҙа балта ла еткән. Ағас эшкәртеү менән башлыса урманлы ерҙә йәшәүсе башҡорттар шөғөлләнгән.

Ағасты ябай тимер балта менән йыҡҡандар, бары тик Урал тауҙарында ҙурыраҡ балталар булған, мәҫәлән, бөрйәндәр уны һарпаҡ тип йөрөткән. Ағасты бер яҡтан уртаһына тиклем сапҡас, ҡаршы яҡтан саҡ ҡына өҫтәнерәк тағы ла 20-30 см (ағастың йыуанлығына ҡарап) сабылған. Ботаҡтарынан таҙартылған ағасты тотошлай йәки бер нисә өлөшкә бүлеп, йорт һалына торған ергә ҡышын алып ҡайтҡандар. Әгәр ҙә ағас утын өсөн тәғәйенләнһә, уны махсус ҡоролма менән дүрт өлөшкә бүлгәндәр, һуңынан тураҡлағандар. Кипкән ағастарҙан таҡта яһағандар, улар ваҡытлыса торлаҡ яһау, өй башын ябыу өсөн ҡулланылған. Таҡта балта, кәрәк икән, үҙенсәлекле йышҡылар менән шымартылған. Башҡорттарҙа йышҡы ике төрлө булған. Уларҙың ҡубаға тип йөрөтөлгәне һайғау һәм ҡолғалар, ә икенсеһе бүрәнә йышыу өсөн тотонолған. Ҡубаға - ағас пластинанан яһала, аҫтына бысаҡ ҡуйыу өсөн махсус уйымдары бар (**һүрәт**). Ул диаметры ҙур булмаған ҡолғалар йышыу өсөн ҡулланыла. Икенсеһе, бүрәнә йышыу өсөн тәғәйенләнгәне, тимер пластинанан, уның остары бер аҙ өҫкә ҡарай бөгөлгән, ағастан яһалған тотҡаһы бар.



Ағасты соҡоу өсөн аталғы, сапҡы, йышҡы тип аталған махсус ҡоралдар ҙа бар (**һүрәт, *а* - сапҡы, *б* - йышҡы, *в* - аталғы**). Ҡалаҡ кеүек нескә эш талап ителгән әйберҙәрҙе төрлө ҙурлыҡтағы бысаҡ-юнғыстар менән эшләгәндәр (**һүрәт юнғыс**).





Ағастан яһалған һауыт-һаба ике төркөмгә бүленә - тотош, бер киҫәктән торған һәм махсус ҡуйылған өлөштәре булған һауыттар. Иң ҙур һәм яһалышы буйынса ябай һауыттар булып сара һәм табаҡ иҫәпләнә (**һүрәт сара һәм табаҡ**). Сара - киң һәм һай һауыт, бары тик Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышында ғына осрай. Табаҡ тип ҙур ағас һауытҡа әйтәләр, уның диаметры 50 см, ситендә элеп ҡуйыу өсөн ҡолағы бар. Туҫтаҡ һәм тәгәс тип аталған ағас һауыттар башҡорттарҙа киң таралған, уларҙан бәләкәсерәк һауытты сүгәтә тип йөрөтәләр. Ҙур булмаған тотҡаһы булған ағас һауыт - алдыр тип атала (**һүрәт, *а* - бал һауыты, *б* - алдыр**). Был һауыттар сифатлы ағастың ороһонан, һирәгерәк ҡарағай һәм ҡайын тамырынан яһала. Туҫтаҡ һәм тәгәстәр бик юғары баһаланған, уларҙы ҡымыҙ йәки әсе бал әсетеү өсөн ҡулланғандар. Алдыр, ижау кеүек үк, ҡымыҙ һәм әсе балды ҡойоу өсөн файҙаланылған.





**(Дауамы бар).**

*✓ Дәүләт стандарттарына ярашлы, балаларҙың туған телен үҫтереү мәктәп эшмәкәрлегенең бер йүнәлеше булып тора. Ошо йәһәттән дәүләт иғтибары булыуы туған телдәрҙе уҡытыуға ыңғай йоғонто яһай.*

# МИЛЛИ

## Башҡортостан мәғарифының

**Бөгөнгө әңгәмәселәребеҙ - Өфө ҡалаһының 48-се Башҡорт лицейы директоры Мәрзиә Уралбәк ҡыҙы АБДРАХМАНОВА, З. Биишева исемендәге 140-сы Башҡорт гимназияһы директоры Фәнил Нил улы БҮЛӘКОВ, Р.Т. Бикбаев исемендәге 102-се Башҡорт гимназияһы директоры Шайморат Азамат улы ТИМЕРБУЛАТОВ.**

**Әңгәмәбеҙ башында үҙегеҙ һәм һеҙ етәкләгән уҡыу йорто менән таныштырып китһәгеҙ, урынлы булыр.**

**Мәрзиә Абдрахманова:** Мин Көйөргәҙе районының Яҡуп ауылында тыуып үҫкәнмен, әлеге көндә 48-се башҡорт лицейының яңы етәксеһемен. Белеүегеҙсә, лицейыбыҙ Черниковка биҫтәһенең бер яҡ ситендә урынлашҡан, шуға күрә иң беренсе проблемаларҙың береһе - йыл һайын мәктәп контингентын тулыландырып тороу. Быйылғы уҡыу йылында 515 уҡыусыбыҙ бар, педагогик коллектив 31 уҡытыусынан тора. Уҡытыу-тәрбиә процесын өҫтәмә белем биреү учреждениелары менән тығыҙ бәйләнештә алып барабыҙ, Өфө фән һәм технологиялар университеты, Башҡорт дәүләт аграр университеты менән хеҙмәттәшлек итәбеҙ. Төп бурысыбыҙ - лицейҙа белем һәм тәрбиә биреү сифатын юғарыраҡ кимәлгә сығарыу, башҡа мәктәптәр араһында уның ыңғай имиджын булдырыу.

**Фәнил Бүләков:** Тыумышым менән Учалы районының Иманғол ауылынанмын, ата-бабаларым - барын-табын ырыуы башҡорттары. Һуңғы 5 йылда Зәйнәп Биишева исемендәге 140-сы Башҡорт гимназияһында директор вазифаһын башҡарам. Гимназияла 864 бала уҡый, башҡорт кластары менән бер рәттән, рус кластары ла бар. Шуға күрә барса тәрбиә эштәрен башҡорт һәм рус телдәрендә алып барырға тура килә. Уҡытыу-тәрбиә процесында барса уҡыусыларыбыҙҙы башҡорт мәҙәниәте менән яҡындан таныштырырға тырышабыҙ, гимназияла башҡорт мөхитен сағылдырған күп саралар ойоштороla. Шул уҡ ваҡытта төрлө милләт балаларын милләт-ара татыулыҡ рухында тәрбиәләүҙе лә үҙебеҙҙең төп бурыстарыбыҙҙың береһе, тип иҫәпләйбеҙ. Уҡыусыларыбыҙҙы вузға әҙерләү маҡсатында ӨФТУ, ӨДНТУ, М. Аҡмулла исемендәге БДПУ менән хеҙмәттәшлек итәбеҙ. Шулай уҡ Өфө машиналар эшләү техникумы һәм Өфө моторҙар эшләү производство берекмәһе менән бәйләнештәр булдырылған, сөнки баш ҡалабыҙҙың Инорс биҫтәһендә башлыса эшсе халыҡ йәшәй, улар балаларына техник өлкәләргә йүнәлеш биреүҙе хуплай.

**Шайморат Тимербулатов:** Баймаҡ районының бәләкәй генә Янғаҙы ауылында тыуғанмын, ата-бабаларыбыҙ түңгәүер ырыуына ҡарай. Рауил Бикбаев исемендәге 102-се башҡорт гимназияһы директорымын. Гимназиябыҙ Дим биҫтәһендә урынлашҡан, быйылғы уҡыу йылында беҙҙә 1454 уҡыусы белем ала. 5-әр параллель класс булдырылған, башҡорт балалары "А" кластарында уҡый. Дим районында башҡа башҡорт мәктәбе юҡ, шуға күрә башҡорт мөхитен сағылдырған барса саралар беҙҙең гимназия базаһында уҙғарыла. Башҡорт кластарында белем кимәле яҡшы, Өфө ҡалаһында уҙғарылған конкурстарҙа еңеүҙәр яулайбыҙ.

**Милли мәктәптәребеҙ Башҡортостан мәғарифының йөҙөк ҡашы кеүек ҡабул ителә һәм баһалана. Башҡорт мәктәптәре республика мәғариф системаһының авангардында барырға, башҡа бер мәктәптәрҙән алдымыраҡ, өҫтөнлөклөрәк позициялар биләргә тейеш, тигән фекер менән килешәһегеҙме?**

**Мәрзиә Абдрахманова:** Әлбиттә, был фекер менән ризалашмайынса булмай. Өфөләге башҡорт гимназияларында, лицейҙарында, Башҡортостандың башҡа милли мәктәптәрендәге кеүек, халҡыбыҙҙың киләсәк интеллегенцияһы тәрбиәләнә. Иң мөһиме - уҡыусыларыбыҙҙың белем кимәле хәҙерге заман талаптарына яуап бирерлек булырға тейеш. Белем сифатын күтәреү менән бәйле проблемалар бар ул, әммә беҙ, мәктәп етәкселәре һәм педагогик коллективтар, уларҙы системалы рәүештә хәл итеү юлдарын табырға тейешбеҙ.

**Уныһы шулай, әммә уҡыусыларҙың белем сифаты буйынса проблемалары булмаған мәктәптәр юҡтыр ул?**

**Мәрзиә Абдрахманова:** Бар, ни эшләп булмаһын ти. Бына, республикабыҙҙа байтаҡ йылдар буйына эшләп килгән башҡорт интернат-мәктәптәрен генә алып ҡарайыҡ. Интернаттарҙа тәрбиәләнеүселәр тәүлек әйләнәһенә башҡорт мөхитендә йәшәй, уларға дәрестәрҙән һуң үҙаллы шөғөлләнеү, төрлө түңәрәктәрҙә һәм сараларҙа һәләттәрен үҫтереү, кәрәк булғанда, педагог ярҙамын алыу өсөн барса мөмкинлектәр булдырылған.

**Шайморат Тимербулатов:** Республика гимназия-интернаттарында махсус рәүештә һайлап алынған һәләтле балалар уҡыуын да иҫәпкә алырға кәрәк.

**Мәрзиә Абдрахманова:** Эйе, уларҙы халҡыбыҙҙың һөт өҫтө, ҡаймағы тиһәк тә һис яңылышмабыҙ. Ундай балалар менән эшләүе күпкә еңеләрәк, әммә яуаплылыҡ та ҙур.

**Республика статусындағы интернат-мәктәптәрҙе ябай милли мәктәптәр өсөн маяҡ итеп ҡарарға кәрәктер?**

**Мәрзиә Абдрахманова:** Ундай мәктәптәрҙең авангардта барыуын бер кем дә инҡар итмәй. Шул уҡ ваҡытта ҡәҙимге, ҡала-район гимназияларының үҙ өҫтөнлөгө бар. Беҙҙең типтағы белем усаҡтарында даими көсөргәнеш, баҫым аҫтында эшләү талап ителмәй, был психологик яҡтан уңайлыраҡ. Республика гимназия-интернаттары педагогтарына ҡуйылған талаптар күпкә юғарыраҡ, улар һәләтле балаларҙы юғарыраҡ кимәлгә күтәрергә тейеш, шуға күрә уларҙың эш һөҙөмтәләренә юғары талаптар ҡуйыла.

**Фәнил Бүләков:** Бөгөнгө шарттарҙа ҡала башҡорт мәктәптәренә уҡырға килеүсе һәр бала ҡәҙерле беҙгә. Әлбиттә, үҙебеҙҙең башҡорт балаларын бер урынға туплап, уларға туған телебеҙҙе ныҡлап өйрәтергә тырышабыҙ. Әлеге ваҡытта ата-әсәләр уҙған быуаттың 90-сы йылдарындағы ата-әсәләрҙән айырылыбыраҡ тора, йәғни, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, тел мәсьәләһе уларҙы артыҡ борсомай. Балаларының белем сифаты яҡшы булһын, дәүләт имтихандарында алған балдары бюджет нигеҙендә вуздарҙа уҡый алыу мөмкинлеген бирһен - уларҙың төп теләктәре шул. Шул уҡ ваҡытта барса ата-әсәләр милли мәктәптә уҡыусылар тәртибенең һәйбәт булыуын белә, ә был беҙҙең өҫтөнлөктәребеҙҙең береһе. Башҡорт балалары менән бер рәттән, башҡа милләт балалары ла беҙҙә үҙҙәрен ипле, әхлаҡҡа ярашлы тоторға өйрәнә.

**Ҡәҙимге мәктәптәр янынан үткәндә йыш ҡына үҫмерҙәрҙең яман итеп һүгенгәнен ишетергә тура килә...**

**Фәнил Бүләков:** Юҡ, беҙҙең уҡыусыларыбыҙ ундай түгел. Ошондай айырманы үҙебеҙ ҙә беләбеҙ: 10-сы класҡа өҫтәп алынған башҡа мәктәп балалары тәртиптәре яғынан беҙҙекеләргә ҡарағанда ҡайтышыраҡ. Йәнә бына нимә: ата-әсәләр мәктәптең ыңғай имиджы булыуына бик иғтибарлылар. Ә ул ТДИ һәм БДИ күрһәткестәренең кимәлен, уҡыусыларыбыҙҙың төрлө конкурстарҙа, олимпиадаларҙа күрһәтә алған ҡаҙаныштары менән бермә-бер бәйле. Баш ҡалабыҙҙың милли мәктәптәре ҡала хакимиәте ҡарамағына күсерелгәс, алға китеш, үҫеш һиҙелә башланы, быға үҙебеҙ шаһитбыҙ. Беҙгә уҡыусыларыбыҙҙың ата-әсәләренең гимназия хаҡында ниҙәр һөйләгәндәре, ниндәй баһа биреүҙәре бик мөһим, уларҙың тәкдимдәрен, һорауҙарын иҫәпкә алып эшләргә тырышабыҙ. Хәҙерге осорҙа ҡала мәктәптәре өсөн күҙ яуын алып торған биналар һалына, улар заманса йыһаздар менән тәьмин ителә, әммә мәктәптең ысын йөҙө уның формаһынан түгел, ә йөкмәткеһенең ниндәй булыуынан тора.

**Мәктәп тормошо - ағын йылға кеүек: балалар беренсе класҡа килә тора, 9-сы йә иһә 11-се кластарҙы тамамлағандары китә тора. Шулай булғас, тотош мәктәп тә яңырып, үҙгәрә барып, үҫеш кисерергә тейештер ул...**

**Фәнил Бүләков:** Уҡыусыларға белем биреү, уларҙы тәрбиәләү - бик оҙайлы процесс, ул байтаҡ йылдар дауамында ғәмәлгә ашырыла. Уҡытыу-тәрбиә динамикаһын, үҫеш барышын тиҙ арала ғына, бер-ике йыл эсендә билдәләү мөмкин түгел, шуға күрә педагогик эшмәкәрлектең һөҙөмтәлелеген уҡытыуҙың башланғыс осоронан алып һуңғы этаптарына тиклем ниндәй ыңғай үҙгәрештәр, ҡаҙаныштар булыуына ҡарап баһалайҙар.

**Мәрзиә Абдрахманова:** Мәктәп үҙе бер үҙенсәлекле система булып тора, шуға күрә педагогик эшмәкәрлектең билдәле бер системаға һалыныуы фарыз. Һәр уҡыусы ошо педагогик системаның айырылғыһыҙ бер элементы, уҡыусыларҙың 1-се кластан 11-се класҡа тиклемге үҫеше тотош мәктәптең үҫеш динимикаһын билдәләй.

**Шайморат Тимербулатов:** Башҡорт мәктәптәренең милли мәғариф системаһының авангардында барыуы уларҙы булдырыуға юл асҡан 90-сы йылдарҙа уҡ күҙаллана. Ваҡытында Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы инициативаһы менән баш ҡалабыҙҙың һәр районында башҡорт мәктәбен асыу мәсьәләһен республика етәкселеге, Беренсе Президентыбыҙ М.Ғ. Рәхимов ыңғай хәл итте, һәм был башҡорт мәғарифының үҫеше өсөн уңайлы шарттар тыуҙырҙы. Башҡорт гимназиялары һәм лицейҙары инновацион мәктәптәр иҫәбенә инә, һәм ошо юғары статусты раҫлар өсөн күп эшләргә тура килә. Әйтергә кәрәк, ҡала хакимиәте беҙгә юғарыраҡ талаптар ҡуя, һәр саҡта ла яуаплылыҡ тойоп эшләйбеҙ. Башҡорт мәктәбе булғас, башҡорт мөхите менән бәйле төрлө мәҙәни сараларҙы беҙгә ойошторорға тура килә. Мәҫәлән, "Урал батыр" эпосы буйынса уҙғарылған конкурстарҙа, "Һаумы, һаумы әкиәт", "Шаяниум" кеүек сараларҙа мотлаҡ ҡатнашабыҙ.

Шулай ҙа ата-әсәләр алдындағы төп бурысыбыҙ - гимназиябыҙҙы тамамлаусыларҙың белем сифаты юғары булыуына өлгәшеү. Бына яңыраҡ Республика инженер лицей-интернатының директоры урынбаҫарҙары һеҙҙең гәзитегеҙ ойошторған әңгәмә барышында лицейҙы тамамлаусыларҙың барыһының да вуздарға инеүе хаҡында әйткәйнеләр. Ошоға яуап итеп, һуңғы ике йылда гимназиябыҙҙы тамамлаусылар шулай уҡ тулыһынса төрлө вуздарҙа уҡыуын дауам итә, тип ғорурлана ла алабыҙ. Сығарылыш уҡыусыларының 30 проценты самаһы Мәскәү, Санкт-Петербург, башҡа ҡалаларҙың вуздарын һайлай. 9-сы класты тамамлағандарҙың 30-40 проценты урта һөнәри уҡыу йорттарына инһә, ҡалғандары гимназияла уҡыуын дауам итә. Әлбиттә, педагогик коллективтың тырышлығы, уҡытыусыларҙың белем биреү оҫталығы яҡшы һөҙөмтәләр бирә. Беҙ, етәкселек талабына ярашлы, үҙебеҙгә беркетелгән микрорайон балаларын да уҡырға алабыҙ, шулай ҙа әлеге ваҡытта Дим биҫтәһенең төрлө урамдарында йәшәүсе башҡорттар гимназиябыҙға балаларын күберәк килтерә башланы.

**Совет мәғарифы билдәле бер тотороҡло хәләттә үҫешә барҙы, уның уңышлы эшләүе бар донъяла танылыу тапты.**

**Беҙ реформалар, үҙгәрештәр заманында йәшәйбеҙ, әммә совет мәғарифының ниндәйҙер бер яҡшы яҡтарын кире ҡайтарып булырмы икән?**

**Фәнил Бүләков:** Элекке осорҙарҙа эшләгән мәктәптәрҙең төп айырмаһы шунда: һәр бер мәктәп үҙенең үҫеш юлын уның етәкселеге һәм уҡытыусылар коллективы күҙаллағанса, үҙҙәре һайлап алған программаларға, уҡытыу методикаларына, уҡыу әсбаптарына ярашлы билдәләй ала ине. Хәҙерге мәктәп эшмәкәрлеге федераль стандарттарға ярашлы башҡарыла, ҡәҙимге мәктәпме ул, гимназия йә иһә лицеймы - бер үк стандарт талаптар, программалар һәм һөҙөмтәләр. Шулай ҙа совет мәғариф системаһының үҙ стандарттары булыуын инҡар итеп булмай - бер үк уҡыу пландары, предметтар буйынса программалар, барса илдә бер үк дәреслектәр ҡулланыла. Хәҙерге стандарттарҙы ла совет осороноң уҡытыу принциптарына яңы кимәлдә кире ҡайтыуға тиңләргә мөмкин.

Әлбиттә, мәғариф системаһында приоритеттар үҙгәреп тора - бер заман башлыса уҡытыу сифатына төп иғтибар йүнәлтелһә, хәҙер тәрбиә мәсьәләләрен алғы планға сығарыу өҫтөнлөклө маҡсат итеп ҡуйыла. Хәҙерге заман мәктәбенең өс тағаны бар: сифатлы белем биреү, яҡшы тәрбиә һәм шәхес үҫешенә йүнәлтелгән педагогик эшмәкәрлек. Йәнә шуныһы мөһим: дәүләт стандарттарына ярашлы, балаларҙың туған телен үҫтереү мәктәп эшмәкәрлегенең бер йүнәлеше булып тора. Ошо йәһәттән дәүләт иғтибары булыуы ла, тотош йәмғиәттә элегерәк кисерелгән ҡапма-ҡаршылыҡтарҙың юҡҡа сыға барыуы ла туған телдәрҙе уҡытыуға ыңғай йоғонто яһай.

**Мәрзиә Абдрахманова:** МХО-ла ҡатнашҡан яугиҙарыбыҙ ҙа иң ҡатмарлы шарттарҙа туған телende белеүҙең ни тиклем файҙалы булыуына инанды. Белеүебеҙсә, унда милли республикаларыбыҙҙан байтаҡ ҡына егеттәр хәрби бурыстарын үтәй. Үҙемдең ҡустыларым да МХО-ла, бына улар ни тип һөйләй: "Йыш ҡына рация аша башҡорт телендә һөйләшәбеҙ, беҙҙең ниндәй мәғлүмәт биргәнде тыңлай алған дошман радистары бер ни ҙә аңламай ҡала".

**Шайморат Тимербулатов:** Һәр яңылыҡ онотола биргән элекке күренеш тигәндәй, мәғариф системаһына, ысынлап та, совет осорона хас байтаҡ ҡына нәмәләр кире ҡайтарыла. Шул уҡ хеҙмәт тәрбиәһе совет мәғарифының йөҙөк ҡашы ине бит. Ә уны юҡҡа сығара яҙҙылар: ата-әсәләрҙең ризалығынан тыш, уҡыусыларҙы хатта иң ябай

***✓ Башҡорт теле уҡытыусыһы тел менән ныҡлап ҡыҙыҡһындыра алһын, уйнатып, йырлатып уҡытһын, сөнки уҡыусыларының аңына, күңеленә туған тел моңон һеңдерә алған саҡта ғына уға ҡарата һөйөү тойғоһо уянасаҡ.***

эштәргә лә йәлеп итеп булманы. Хәҙер хәл үҙгәрә, ниндәйҙер кәрәкһеҙ тыйыуҙар бөтөрөлдө. Йәнә уҡытыусыларҙың закон тарафынан яҡланған булыуына өлгәшеү фарыз беҙгә. Шулай килеп сыҡты, ҡайһы бер ата-әсәләр уҡытыусыға йә иһә мәктәп етәкселегенә бер ниндәй нигеҙһеҙ ғәйептәр тағып, төрлө органдарға ялыу менән мөрәжәғәт итә башланы. Әлбиттә, бындай хәлдәр мәктәп эшенә зыян килтермәй ҡалмай.

**Мәрзиә Абдрахманова:** Был бик тә сетерекле, әммә ғәҙел хәл ителергә тейешле мәсьәлә. Ата-әсәләрҙең хоҡуҡтарын бер кем дә инҡар итмәй, әммә улар араһында үҙ бурыстарын теүәл үтәмәй, яуаплылыҡты тик уҡытыусыға, мәктәпкә генә ҡайтарып ҡалыусылар ҙа бар. "Ата-әсә ни әйтһә лә, хоҡуғы бар", тип иҫәпләгәндәрҙең балаларының балалары мәктәптәргә килде, ә әлеге тенденция һаман дауам итә. Ярай әле, Рәсәйҙең "Мәғариф тураһындағы законы"на педагогтарға ҡарата физик һәм психик көс ҡулланыуҙы, уларҙың шәхесен кәмһетеүҙе тыйған яңы статья индерелде. Шәхсән үҙемә бер нисә осраҡта ата-әсәләрҙе ошондай норматив акт булыуы хаҡында иҫкәртергә тура килде.

**Фәнил Бүләков:** Совет осоронда уҡыусы-

ты дөрөç аңлауҙарынан һәм әүҙемлегенән тора.

**Шайморат Тимербулатов:** Совет осорон иҫкә алғас, мәктәптәрҙә башланғыс хәрби әҙерлек дәрестәре (НВП) тигән предмет булыуы иҫкә төшә. Унан һуң тормош хәүефһеҙлеген ойоштороу (ОБЖ) индерелгәйне, әлеге көндә был предмет хәүефһеҙлек һәм Ватанды һаҡлау нигеҙҙәре тип атала. Минеңсә, уҡыусыларыбыҙҙы хәрби хеҙмәткә әҙерләү предметын ҡайтарһаҡ, уңайлыраҡ һәм файҙалыраҡ булыр ине. Был предметты запастағы офицерҙар алып бара ала.

**Яңыраҡ Дәүләт Думаһына бер тәҡдим индерелде, һүҙ мәктәп штатында класс етәксеһе тигән айырым вазифа**

**Фәнил Бүләков:** Класс етәксеһе башҡара торған эштәр аҙ түгел. Мәктәптә һәр бер класстың үҙенә тәғәйенләнгән айырым бүлмәһе бар. Класс етәксеһенә ошо бүлмәне зауыҡлы итеп ойоштороп, һәйбәт итеп тотоу бурысы ла йөкмәтелгән. Был эштә уға ата-әсәләр комитеты ярҙам итә, йыл һайын косметик ремонт эшләүҙе лә улар үҙ өçтөнә ала. Әлбиттә, беҙ ата-әсәләргә баçым яһай алмайбыҙ, барса мәсьәләр ҙә килешеү юлы менән хәл ителә.

**Шайморат Тимербулатов:** Дим биçтәһе - баш ҡалабыҙҙың ҙур төҙөлөштәр алып барылған районы. Бында башҡа райондарҙан күсеп килеп йәшәгән педагогтар ҙа байтаҡ. Шөкөр, мәк-

уҡытыу эшендә педагогҡа йөкмәтелгән бурыстарҙың байтаҡҡа күберәк һәм ҡатмарлыраҡ булыуын да иҫәпкә алырға кәрәк.

**Уҡыусылар бер юлы өс телде үҙләштерергә тейеш, проблемалар ҙа юҡ түгелдер?**

**Шайморат Тимербулатов:** Инглиз теле буйынса республика кимәлендәге олимпиадаларҙа призлы урындар алыусылар бар, рус теле буйынса ла һөҙөмтәләр насар түгел. Башҡорт кластарына килгәндә, ҡыйынлыҡтар бар. Ғаиләләрендә туған телендә һәйбәт кенә аралашырға өйрәнә алғандар менән бер рәттән, бөтөнләйгә һөйләшә белмәгәндәре лә бар. Башҡорт теле

Ғөмүмән, улар өсөн айырым дәреслектәр булһа, уҡытыусыларға лә эшләүе еңелерәк булыр ине. Шәхсән үҙем уҡытыусыларыбыҙҙан уҡыусыларҙың телмәрен үçтереүгә күберәк ваҡыт бүлеүҙәрен талап итәм. Әлбиттә, һәр уҡытыусы үҙенә оҡшаған методиканы ҡуллана ала, тик ул һөҙөмтәле булырға тейеш. Башҡорт теле уҡытыусыһының универсаль педагог булыуын теләргә ҡала: тел менән ныҡлап ҡыҙыҡһындыра алһын, уйнатып, йырлатып уҡытһын, сөнки уҡыусыларының аңына, күңеленә туған тел моңон һеңдерә алған саҡта ғына уға ҡарата һөйөү тойғоһо уянасаҡ.

**Баш ҡалабыҙҙың Дим, Калинин һәм Орджоникидзе райондарында урынлашҡан башҡорт мәктәптәренең киләсәге өмөтлөмө?**

**Шайморат Тимербулатов:** Һәр мәктәптең киләсәге уның эшмәкәрлегенең һөҙөмтәле булыуы менән бәйле. Р. Бикбаев исемен йөрөткән 102-се Башҡорт гимназияһының киләсәге өсөн беҙ бөгөн эшләйбеҙ, рухлы уҡытыусыларыбыҙ Дим районында башҡорт телен һәм мәҙәниәтен һаҡлау бурысын намыç менән үтәр, тип ышанайыҡ.

**Мәрзиә Абдрахманова:** Уҡыусы-



# МӘКТӘПТӘРЕБЕҘ...

## йөҙөк ҡашы кеүек

ларҙа илһөйәрлек тәрбиәләү айырым бер ҙур маҡсат итеп ҡуйылғайны. Бына ошо юçыҡта ла һәйбәт башланғыстар бар. Һәр мәктәптә яңы аҙна Рәсәй һәм Башҡортостан гимны, ил флагын күтәреү менән башлана икән, был балаларға ошо төшөнсәләрҙең ни тиклем мөһим булыуын күрһәтеп тора. Шул уҡ "Беренселәр хәрәкәте" кеүек уҡыусыларҙың йәмәғәт ойошмалары төрлө тәрбиәүи сараларҙы һөҙөмтәлерәк башҡарыу мөмкинлеген бирә, хәҙер директор кәңәшсеһе һәм тәрбиә эштәре буйынса директор урынбаçары ватансылыҡ тәрбиәләүгә ҙур иғтибар бирә. Әүәл мәктәптәрҙә идеологик тәрбиәгә баçым яһалған, хәҙер ҙә тыуып үçкән ергә, Ватанға һөйөү тәрбиәләү бик мөһим. Уҡыусыларыбыҙ йыш ҡына төрлө кимәлдә уҙғарылған патриотик сараларҙа әүҙем ҡатнаша.

**Мәрзиә Абдрахманова:** Әлбиттә, уҡыусылар менән уларҙың йәшенә ярашлы сәйәси аңлатыу һәм тәрбиә эштәре алып барырға кәрәк. Был йәһәттән совет осоронда алып барылған тәрбиә системаһының яҡшы өлгөләренә таянып була. Былар барыһы ла башланғыс класс уҡытыусылары һәм класс етәкселәренең үҙҙәре алдына ҡуйылған бурыс-

**булдырыу хаҡында бара. Был осраҡта класс етәксеһе дәрестәр алып бармай, тик тәрбиә эштәре менән генә шөғөлләнергә тейеш. Һеҙ ошо тәҡдимгә нисек ҡарайһығыҙ?**

**Фәнил Бүләков:** Класс етәкселеге - мәктәп эшмәкәрлегенең айырылғыһыҙ бер өлөшө ул. Бик әүҙем эшләгән класс етәкселәре менән бер рәттән, һүлпәнерәктәре лә бар. Ә ундай ҡатмарлы эш өсөн матди стимул етерлек кимәлдә түгел: ауыл мәктәптәрендә 10 мең һум булһа, ҡалала 30-лаған уҡыусы менән эшләгән өсөн 5 мең һум ғына түләнә.

**Мәрзиә Абдрахманова:** Әлеге ваҡытта уҡытыусылар класс етәкселеген алып барырға бик теләп бармай. Ҙур яуаплылыҡ йөкмәтелә, ата-әсәләрҙең дә төрлөһө бар. Унан һуң, һәр класс етәксеһенең, предмет уҡытыусыһы булараҡ, байтаҡ ҡына дәрестәр алып барыуын иçәпкә алырға кәрәк. Йәштәр мәктәптә оҙаҡ эшләмәй, быны үҙ сәбәптәре бар. Юғары педагогик вузға күберәк ауыл мәктәптәрен тамамлаусылар уҡырға инә. Эшкә ҡала мәктәбенә урынлашһа, фатир өсөн байтаҡ түләргә, ыçпай кейенеп йөрөү, башҡа төрлө сығымдар өсөн дә аҡса кәрәк, ә эш хаҡы әллә ни ҙурҙан түгел.

тәп уҡытыусыһыҙ ҡалмаç, тим. Бөгөн мәктәптә башлыса педагог һөнәрен, балаларҙы яратҡан шәхестәр эшләй. Ә класс етәксеһе вазифаһы буйынса шуны әйтер инем: уҡытыусы барса балаларының мөмкинлектәрен, холҡон, үҙенең тотошон дәрестәр барышында күреп-белеп тора. Ә предмет уҡытыусыһы булмаған класс етәксеһе ни рәүешле балаларҙы яҡындан тороп белергә тейеш? Ә ҡәҙимге класс етәксеһенә килгәндә, уға ярты ставка дәрестәрҙән тыш, етәкселек өсөн юғарыраҡ кимәлдә түләү ҡаралһа, бик шәп булыр ине. Шулай булһа, уҡытыусылар класс етәкселеген бик теләп алыр ине.

**Мәрзиә Абдрахманова:** Әүәлерәк уҡытыусы бер ставкалыҡ эшкә лә бик риза булған. Ни өсөн? Педагогтың эшен еңел тип әйтеп булмай, ул күп физик һәм психологик көсөргәнеш талап итә. Баш ҡалабыҙҙың 105-се гимназияһында 16 йыл эшләнем. Директорыбыҙ Ю.В. Казаков бик талапсан етәксе ине, уҡытыусыларҙың нагрузкаһын 25 сәғәттән арттырманы. Тәүге йылда минең нагрузкам 18 сәғәт булды. Ул бик дөрөç эшләгән, сөнки иң элгәре тәжрибә туплау фарыз. Һуңынан аҙнаһына 25, хатта 36 сәғәт уҡытырға тура килде. Үҙемдең тәжрибәмдән сығып әйтәм, ошолай эшләү еңелдәрҙән түгел, бындай эш графигы уҡытыусыны бик ныҡ арыта, ә был уҡытыу сифатына кире йоғонто яһай. Ә хәҙерге

уҡытыусыһына ошондай төрлө кимәлдәге балалар менән эшләргә тура килә, был билдәле бер ҡыйынлыҡтар тыуҙыра. Уҡытыусы дәрестә ваҡытын башҡортса белмәгән уҡыусылар менән эшләүгә сарыф итергә мәжбүр, был үҙе үк тел өйрәнеүҙә алға китеште тотҡарлай. Ярай әле класты төркөмдәргә бүлеп уҡытыу ҡаралған, был уҡытыусының эшен бер аҙ еңеләйтә.

**Күренекле башҡорт ғалимы, телсе-методист Вәкил Хажиндың бер фекере иғтибарға лайыҡтыр тим: башҡорт телен уҡытыу методикаһын тамырынан үҙгәртеп ҡорорға кәрәк, сөнки бөгөнгө уҡытыу, башлыса, грамматика өйрәтеүгә ҡайтып ҡала, ә бындай шарттарҙа уҡыусыларҙың телмәре үçешмәй.**

**Фәнил Бүләков:** Бына бөгөн уҡыусыларыбыҙ башҡорт теле буйынса диктант яҙҙылар. Һәйбәт кенә яҙа беләләр, грамматика ҡағиҙәләрен дә үтәйҙәр. Әммә, быны раçлау нисек кенә ҡыйын булмаһын, улар туған телебеҙҙә иркенләп һөйләшә, аралаша белмәй. Был проблема башҡа мәктәптәргә лә хас, шуның өсөн артабан нисек уҡытыу тураһында уйланырға ерлек бар.

**Шайморат Тимербулатов:** В.И. Хажиндың ошо фекере менән килешеп була. Ҡала башҡорттары балаларына башҡорт теленең грамматикаһын өйрәтеүҙән әллә ниндәй фәтеүә юҡ.

ларыбыҙ үҙ мәктәбенә теләп, яратып йөрөһә, яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшһә, һәләттәрен үçтерһә, ата-әсәләр уға ыңғай мөнәсәбәттә ҡаласаҡ. Улар мәктәп тормошо хаҡында мәғлүмәтле булһындар өсөн социаль селтәрҙәрҙә, лицей сайтында һәр даим яңылыҡтарыбыҙҙы сағылдырып торабыҙ. Хәҙергесә әйткәндә, лицейыбыҙҙың ыңғай имиджы уның киләсәге өсөн бик мөһим.

**Фәнил Бүләков:** Зәйнәп Биишева исемендәге гимназиябыҙҙың 30 йыллыҡ тарихы бар, ошо ваҡыт дауамында үҙебеҙгә генә хас эш йүнәлештәре хасил булған, элекке традицияларыбыҙҙы дауам итәбеҙ, яңылыҡтар индерәбеҙ. Гимназиябыҙҙы тамамлаусылар араһынан үçеп сыҡҡан байтаҡ ҡына күренекле шәхестәр менән даими бәйләнеш булдырғанбыҙ, уларҙың ярҙамын тойоп торабыҙ, хәҙерге уҡыусыларыбыҙға өлгө итеп ҡуябыҙ. Башҡортостан етәкселегенең телебеҙ тураһында хәстәрлеге бар сағында киләсәгебеҙгә өмөт менән ҡарайбыҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әңгәмәбеҙҙе йомғаҡлап, хөрмәтле директорҙарыбыҙ алдағы йылдарҙа үҙҙәре етәкләгән мәктәптәрҙә уҡыусы башҡорт балаларының һанын арттырырға һүҙ бирҙе. Беҙгә уларға уңыштар теләргә генә ҡала.**

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әңгәмә ҡорҙо.**

***✓ Кешеләр инде һуғыштың оҙаҡҡа һуҙылырын белә. Шулай ҙа Левитан тауышын доға шикелле ҡабул итәләр, ниндәйҙер тыныслыҡ алалар ине. Өмөт йәшәтә бит кешене.***




Күктә сағыу ҡояш йылмая. Тирә-йүн һутлы йәшеллек менән ҡапланған. Миңә күҙ һал, һоҡлан, тигәндәй, сәскәләр ҙә татлы елгә бәүелеп-бәүелеп һала. Эйе, йәйҙең иң матур мәле. Ошо хозурлыҡҡа таң ҡалып, эргә-тирәлә ҡоштар ҙа туҡтауһыҙ һайраша. Тик кешеләрҙең генә иғтибары ситтә. Улар бөгөн тирә-яҡҡа ҡыуаныслы йөҙ менән баҡмай. Татлы елгә бәүелгән сәскәләрҙе лә күрмәйҙәр. Бына бер аҙна инде йәнде өшөткөс хәбәр ауылды иңләп-буйлай: "Неместәр һуғыш асҡан! Сикте баҫып ингәндәр! Бомба яуҙыралар, әле ҡаты алыш бара..." Насар хәбәр килеп ишетелгәндең иртәгәһенә үк ауыл ирҙәрен фронтҡа алыу башланды. Партия саҡырыуы, тип, иң элек коммунистарҙы, комсомолдарҙы йыйҙылар. Ылауҙар теҙелгән, бына-бына район үҙәгенә юлға сығырға тейештәр. Кемдең генә үҙ ғәзизен ғәрәсәт эсенә ебәргеһе килһен? Әлепбикә ире Мөхәмәҙиәнең ҡулынан тотоп алды.

- Атаһы...

Йәш ярымлыҡ ҡыҙы Бибинурҙы күтәргән Мөхәмәҙиә ныҡ булырға тырыша. Уға ысынлап та ныҡ булырға кәрәк, сөнки эргәһендә ун бер йәшлек Әхмәҙиә улы, яулыҡ сите менән ауыҙын ҡаплаған әсәһе баҫып тора. Ситтәрәк - ике ҡустыһы.

- Бисәкәй, һин яңғыҙ түгел. Әхмәҙиә улыбыҙ терәк. Ҡустыларыма ла әйтелгән, - тине ул үҙенсә йыуатып.

Мөхәмәҙиәнең ҡустыларына повестка юҡ әлегә, шулай ҙа өлкән ҡустыһы Ғиниәтулланы иҫкәрткәндәр, бөгөнлө-иртәле һуғышҡа алыныр, шәйт... Ярай, кинйәләре Абдрафиҡ ҡала бит әле, әсәһен ҡарар, ағаһының ғаиләһенә лә күҙ-ҡолаҡ булыр. Шулай әйтелгән-һөйләшелгән, был яҡтан күңел тыныс һымаҡ. Тик оҙаҡҡа һуҙылып китмәҫме икән был ҡәһәрле һуғышы? "Ярты йылдан Советтар илендә уларҙың эҙе-еҫе ҡалмаясаҡ", тигән булды сығыш яһаған хәрби комиссариат кешеһе. Белмәй һүҙ ҡатмаҫ, ярты йылдан, иң күп тигәндә бер йылдан, Мөхәмәҙиә лә ғаиләһенә ҡайтып төшөр. Тик борсолмай ҙа булмай шул, Әлепбикәһе өсөнсө балаға етешкән. Бына-бына сабыйҙары донъяға киләсәк. Шул бәләкәсте күрмәй китеүе бигерәк үкенесле.

- Бисәкәй, малай тыуһа, Иштуған, тип ҡушырһың, ҡыҙ тыуһа, Ишбикә, тип. Миңә иш булырҙар...

- Ҡайт, берүк, иҫән-һау әйләнеп ҡайт, - тип ҡабатлай ҡатыны.

Әхмәҙиәнең күҙе йәшләнгәнен күргән ата улын ныҡ итеп ҡосто.

- Улым, хәҙер туғандарың өсөн һин яуаплы. Мин ҡайтҡансы, бирешмә. Ныҡ бул, - ти улына Мөхәмәҙиә. - Ир һүҙе, тиген, йә!

Әхмәҙиә йәшен йота-йота баш ҡаҡты.

- Ир һүҙе...

- Ә ҡыҙым атаһы ҡайтҡансы, ҙурайып торор.

Атаһының көслө ҡулдарында бәүелгән ҡыҙыҡай иркәләнеп көлдө. Мөхәмәҙиә әсәһе Ғәйниямалға боролдо.

- Әсәй, көймә, һуғыш оҙаҡҡа бармаҫ. Күп тигәндә, бер ярты йылдан...

- Ағай, әйҙә. Ылауҙар ҡуҙғалды бит, - тине оҙата барыусы ҡустылары.

- Ғиниәтулла, Абдрафиҡ, һеҙ бында ҡала торған кешеләр, ауылға терәк булығыҙ, - тине хушлашҡанда өлкән ағай ҡустыларына алмаш-тилмәш ҡарап. Әсә доғаһын уҡыны.

- Беҙ ҙә һинең арттан ҡуҙғалырбыҙ кеүек ул, ағай, - тип тамағын ҡырҙы Ғиниәтулла.

Ысынлап та, ҡырҡ беренсе йылдың сентябрь аҙағында ҡустыһы Ғиниәтулланы ла фронтҡа алдылар.

- Ағайымды тап итһәм, ҡалай шәп булыр ине. Кинйә улың Иштуғандан сәләм алып килдем, тиер инем, - тигән булды шуҡ Ғиниәтулла.

Эйе, сентябрҙә Мөхәмәҙиәнең икенсе улы донъяға ауаз һалды шул.

Ата кешенең: "Неместе ҡыйратабыҙ, оҙаҡламаҫбыҙ, ҡайтырбыҙ", - тигән һүҙҙәрен хәтерләргә генә ҡалды. Дошман илде һаман баҫып ала килә, беҙҙекеләр иһә әлегә сигенәләр ҙә, сигенәләр... Силсәүит эргәһендәге бағанала элеүле торған ҡара тәрилкә генә һаман дошмандың тиҙҙән ҡыйратыласағын, беҙҙекеләрҙең ныҡ тороуын тәкрарлай. Кешеләр инде һуғыштың оҙаҡҡа һуҙылырын белә. Шулай ҙа Левитан тауышын доға шикелле ҡабул итәләр, ниндәйҙер тыныслыҡ алалар ине. Өмөт йәшәтә бит кешене. Мөхәмәҙиәнән хаттар килеүҙән туҡтаны. Башҡа ғаиләләрҙә лә ут йотҡандар етерлек, оҙаҡ көттөрмәй ҡара хәбәрҙәр килә башланы. Был ауырлыҡтар, афәт тураһында өсөнсө йәше менән барған Бибинур бер нәмә лә аңламай. Әсәһенең имсәген ҡабып, Иштуған да ғәмһеҙ генә йоҡлай. Әсә булғанда бер ниндәй ҙә ҡурҡыныс янамай. Әсәй уға тотош донъя, тотош йыһан. Сабый имсәктән ауыҙын ала ла, көлә. Был саҡта етди ҡарашлы әсәһе лә һаран ғына йылмая.

Ирҙәр фронтҡа алынып бөттө, тиергә була, уларҙы үҫмерҙәр алмаштырҙы. Әхмәҙиә шулар иҫәбендә. Әлепбикә апайға ла эшкә сығырға ҡушылды. Бәләкәстәр өйҙә тороп ҡала, уларҙы Ғәйниямал әбей килеп ҡараштырып китә. Бала күңеле - далала, тиһәләр ҙә, бәләкәстәр күңеле - һәр саҡ әсәлә шул. Ҡәҙерлеләре эштән ҡайтып инһә, тормош йәнләнә: Әхмәҙиә кесе туғандары менән шаярып алырға ла ваҡыт таба, әсәй мейес төтәтә, нимәлер бешерә. Әлепбикә көнө-төнө фермала булғас, бәләкәй Иштуғаны әсәһенең һирәк ҡайтыуына күнде шикелле. Илай-илай ҙа йоҡлап китә. Уны әүрәтеү өс йәшлек Бибинур иңенә төштө.

Тәүге ҡар яуҙы. Ике аҙнанан тирә-йүнгә ныҡлап ҡырпаҡ ҡар ятты. Ҡышҡа инеү менән өйҙә ашар нәмә лә ҡалманы тиерлек. "Бөтәһе лә фронт өсөн!" - был саҡырыу халыҡтың билен биштән быуырға мәжбүр итте. Ауыр һалымдар түләү, түләй алмағандарҙы язаға тарттырыу башланды... Артабан - наҡыҫлыҡ, аслыҡ, яланғаслыҡ. Ҡыш ҡыш инде, асыҡһалар ҙа, бергә булғас, тамаҡ туйырлыҡ тәғәм табыла. Һиҙҙермәй генә яҙ етте.

Асығып илап ятҡан Иштуғаны күҙ алдына килһә, Әлепбикә нишләргә белмәй китә. Колхозда тәртип ҡаты, әсә кеше көнө-төнө ҡырҙа, эш-өй араһы тип өҙгөләнә. Балам ауырып тора, бөгөн һыйырҙарҙы нисек тә иртәрәк һауып бөтөп, тиҙерәк ҡайтып, баланы имеҙергә кәрәк, тип уйланы ҡатын. Унан кире фермаға йүгерер. Эш кәмемәне. Мал һуғарыр мәл етте. Әлипбикә хәҙер колхоз башмаҡтарын йылғаға алып китте. Боҙҙоң йоҡарған сағы, һыу инде өҫкә ҡалҡҡан, бөгөн мәке уйып ыҙаламаҫ. Башмаҡтар кемуҙарҙан һыу һемерә, уларға ҡарап торған ҡатын ҡолонсағын күҙ алдына килтерҙе. Иштуған балаҡайы өйҙә тилмереп көтә, әсәнең имсәгенә һөт тирткән. Баланың сеңләп илағаны ҡолағына ишетелгәндәй булды, хатта һиҫкәнеп китте. "Сабыр ит, балаҡайым! Бибинур апайың эргәңдә бит. Өләсәйең дә килеп етер, мейес яға торор, туңырға ирек бирмәҫ..." Кинәт уйы ошо урында өҙөлдө. Уйнаҡлап йөрөгән бер башмаҡ, боҙо ишелеп, йылғаға төштө лә китте. Әлепбикәнең йөрәге өҙөлдөмө ни! Аһ, тигән бер генә ауаз сыҡты ауыҙынан. Башмаҡҡа бер-бер хәл булһа, уның үҙен төрмәгә алып барып тығасаҡтар! Нисек тә ҡотҡарырға кәрәк малҡайҙы.

Ҡатын үҙен-үҙе белештермәйенсә, һыуға һикерҙе. Тегеләй итте, былай итте, үҙе әллә нисә тапҡыр һыуға сумып сәсәне, барыбер теге башмаҡты ярға этеп сығара алды. Әммә үҙенең тамсы ла хәле ҡалмағайны инде. Ниндәйҙер төмзөккә барып йәбешә алды. Ярҙам һорап, асырғанып ҡысҡырып та ҡараны, тик кем генә ишетһен, был тирәлә әҙәм заты юҡ ине...

Әлепбикәне сабыйына ҡайтып киткән, тип уйлаған ҡарауылсы башмаҡтарҙы бикләне лә, ары ферма буйлап китте.

Ҡараңғы төштө. Һаман әсәһе ҡайтмағас, Бибинур өләсәләренә йүгерҙе.

- Өләсәй, бәпәй илай!

Килененең ҡайтмағанын белгән Ғәйниямал әбей ултыра төштө, шунан иҫенә килеп, бригадир Шәрифулла ҡартты эҙләп йүгерҙе.

- Ҡайҙа килен? Бәпәйе астан үлә бит! Нишләп һаман юҡ?

- Нисек юҡ?

- Юҡ, тием бит! Бәпәйе зар илап ята!

Шәрифулла ҡарт башындағы кәпәсен сисеп, битен һыпырҙы.

- Тигенгә түгел, Йә Хоҙа.

Бригадир бер нисә ҡатынды алып ферма яғына ашыҡты. Унда берәүҙе лә тапманылар. Абдрафиҡ еңгәһен туҡтамай эҙләне, ниһайәт, уның ҡатҡан кәүҙәһен таңға табан йылғанан һөйрәп сығарҙы.

- Йәне бар!

Өйгә күтәреп алып ҡайтты.

Урындыҡта ятҡан әсәһе эргәһенә Иштуған имгәкләп килде, түшенә үрелде, Әлепбикә шул саҡ иҫенә килеп күҙҙәрен асты, бите буйлап йәше тәгәрләне, тик ҡулын күтәрерлек тә хәле юҡ ине. Ошо ятыуҙан тора алманы әсә.

Әсәләренең уларҙы ҡалдырып киткәнен ярты йәшлек Иштуған түгел, өс йәшлек Бибинур ҙа аңламаны. Башта Бибинур әсәһен һағынып, телдән төшөрмәй һөйләне, көттө, шунан һирәгерәк иҫкә төшөрә башланы. Әсә тураһында өләсәһе лә лә, ағаһы ла һөйләмәҫкә тырышты. Әсәй әкренләп кенә онотоласаҡ, бөтөнләй иҫтән сығасаҡ.

Сәләмәтлеге булған ирҙәрҙе берәм-берәм фронтҡа алып бөттөләр. Алдынғы механизатор Абдрафиҡҡа бронь бирелгән булһа ла, фронтҡа китергә теләк белдерҙе. Китте.

Ғәйниямал әбей өлкән улының өйөнә күсенде. Быға айырыуса Әхмәҙиә ҡыуанды, сөнки уның өләсәһе торған өйгә барғыһы килмәй ине. Әхмәҙиә - төп йортта берҙән-бер ир заты, төп нигеҙҙе һаҡларға тейеш, ул атаһы әйткән һүҙгә тоғро булырға тырышты.

* * *

Колхозда аттар ҡалманы, тиерлек. Иң шәптәрен һуғышҡа алып китеп бөттөләр. Хәҙер ферма тирәһендә ҡарт аттар, хәлһеҙҙәре генә ҡалды. Уларға эш артты, көс еткеһеҙ эш йөкмәтелде. Ыҙалайҙар, ауырыйҙар, ҡолап яталар, тора алмайҙар. Бибинур аттарҙы сикһеҙ ҡыҙғана. Уларҙың яфа сиккәнен бәләкәстәр ҙә аңлай. Аттарға бәйле булыуынын тағы ла бер сәбәбе бар. Өләсәһен "мал духтыры" тип йөрөтәләр. Ул зыянлаған, имгәнгән аттарҙы баға, һауыҡтыра, фронтҡа ебәрергә әҙерләй. Ауыр эштән эшлектән сыҡҡан аттарҙы аяҡҡа баҫтырыу серен бары өләсәй генә белә. Күрше ауылдарҙан да уға сирле аттарҙы алып киләләр. Йөрөй алмағандарын үҙе барып ҡарай. Һауыҡтырғансы шунда була. Дүрт йәшлек Бибинур инде күп нәмәне аңлай, ундай саҡта Иштуған ҡустыһы өсөн апай ғына түгел, әсәй ҙә. Хәйер, улар көнө-төнө бергә, ҡайҙа барһа ла, етәкләп йөрөтә. Берәй ерен ауырттырып илаһа, йыуата, алдаштыра белә. Бигерәк ҡулсыр шул ҡустыһы, апаһы тыйғанды аңламай. Әхмәҙиәне тыңлай ул, тик ағай бит гел эштә.

Бары асыҡҡан саҡта ғына ҡыйын... Йылдың-йылы тормош ауырлаша ғына барҙы. Әсәһенән биш айҙа тороп ҡалған Иштуғанға хәҙер ике йәш тулды. Теле иртә асылды уның. Балалар атайҙы ла, әсәйҙе лә алмаштырған Ғәйниямал әбейҙән ҡалмаҫҡа тырышалар. Аттар янында уларға ла күңелле. Өләсәй йылҡы малын кеше шикелле күрә, улар менән һөйләшә, шелтәләй, кәңәш бирә.

Ғәйниямал әбей иртәнсәк ҡараңғылы-яҡтылы мәлдә тәһәрәткә торҙо. Тирә-йүндә тынлыҡ, әле ауыл йоҡлай. Ҡапыл эргәлә генә бер ат кешнәгәнгә Ғәйниямал әбей ныҡ итеп тертләне, ялп итеп шул яҡҡа боролдо һәм үҙ күҙҙәренә үҙе ышанмай, ҡатып ҡалды. Иҫенә килгәс:

- Урлик! - тип бер үк ваҡытта аптырап та, шатланып та ҡысҡырып ебәрҙе.

Улы Абдрахман йөрөткән Орликты ла яңы ғына фронтҡа тип алып киткәйнеләр ҙә баһа! Йөрәге һыҙлай-һыҙлай оҙатҡайны уны Ғәйниямал әбей, сөнки был атты балаһының ҡәҙерле бер йәдкәре һымаҡ күрә ине. Тыуған еренә нисек ҡайтып етә алды икән аҙаплы малҡай?

- Әхмәҙиә улым, тор йәһәтерәк! Бар, Шәрифулла олатайыңды алып килә һал! Урлик ҡайтҡан бит!

Был һүҙҙе ишетеү менән Әхмәҙиәнең тамам йоҡоһо осто, һикереп торғанын һиҙмәй ҙә ҡалды. Ул арала Бибинур ҙа уянды. "Урлик" тигән һүҙ уны ла йоҡонан айнытты.

**(Дауамы бар).**

✓ ***Коллективтың татыулығы, берҙәмлеге башлыса етәксенән тора. Ипле холҡло, ғәҙел, һәр осраҡта ла тыныс ҡала белгән Ғәлимйән Ситдыҡ улына уның ҡулы аша үткән бөгөнгө район гәзиттәре хеҙмәткәрҙәре оло рәхмәтлелер, тим.***



*ХӘТЕРЛӘП...*

# ЖУРНАЛИСТИКАҒА ЮЛ АСҠАЙНЫ




**Район-ҡалаларҙа донъя күргән гәзиттәрҙең әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ. Бигерәк тә интернетҡа тиклемге заманда улар - урындарҙа төп мәғлүмәт сығанағы булып торҙо. Тарихҡа күҙ һалһаҡ, халыҡҡа иң яҡын был баҫмаларҙың тәүге һандары башлыса үткән быуаттың 30-сы йылдарында сыҡҡан. Баймаҡ районында "Ҡыҙыл Баймаҡ" гәзите 1931 йылда нәшер итеlә башлай. Атамаһы үҙгәрә килеп, 2000 йылдан алып бөгөнгәсә үҙ уҡыусыларына ул башҡорт телендә - "Һаҡмар", русса "Баймакский вестник" исемдәре аҫтында тарала. Быйыл баймаҡтар үҙ баҫмаларына нигеҙ һалыныуҙың 85 йыллығын билдәләй.**

Кеше хыялһыҙ булмай. Яҙышыу теләге миндә электән ҙур ине. Үткән быуаттың 90-сы йылдарында, һүҙ иреклеге, фекер төрлөлөгө осоронда, матбуғат, цензуранан арынып, иркен ҡанат киргән заманда, "Йәшлек" гәзитендә тәүге мәҡәләләрем сыға башланы. Ә профессиональ журналистикаға 1996 йылдың сентябрендә аяҡ баҫтым һәм, нәҡ шул мәлдән артабанғы тормош юлым, һөнәри шөғөлөм икенсе юҫыҡҡа күсте.

Баймаҡта сыҡҡан "Октябрь байрағы" район гәзите редакцияһы ишеген шаҡығанда өс һөнәр (эш урыны түгел, ә һөнәр төрө) алмаштырып өлгөргәйнем. Йәшермәйем, икеләнеү тойғоһон көскә еңеп, бик баҙнатһыҙ ҡаҡтым мөхәррир ишеген. Ул заманда гәзит-журналдарҙың, унда эшләгән кешеләрҙең абруйы ғәйәт ҙур ине әле. Журналистар, үҙҙәре бер каста, ҡатлам булып, башҡаларҙан айырылып торҙо.

Мөхәррир Ғәлимйән Ситдыҡ улы Баймурзин эш белешеп йөрөүем хаҡында хәбәремде иғтибар менән тыңланы. Кем булыуым, яҙышыу тәжрибәм тураһында һорашты, баҫылып сыҡҡан мәҡәләләремде ҡарап сығыу теләген белдерҙе. Донъя күргән эштәрем тупламаһын тотоп, иртәгәһенә редакцияға кире килдем. Уны бүлектәр буйлап ҡарап сыҡҡас, ыңғай баһа биргәндәр. Шулай итеп, "Октябрь байрағы" ("Октябрьское знамя") гәзитенең махсус хәбәрсеһе булып киттем. Төп гәзит русса сыға, ә башҡортсаһы уның дубляжы ине. Мәҡәләләр рус телендә яҙылды, тәржемә бүлеге уларҙы башҡортсаға ауҙарҙы.

Гәзиттең ул ваҡыттағы йөҙөн үткән быуаттың 60-сы йылдары уртаһында һәм аҙағында, хатта унан да алдараҡ килгән хәбәрселәр билдәләй ине. Рәшит Зиннәт улы Үтәев, Гүзәл Исхаҡ ҡыҙы Ниғәмәтова, Әсхәт Әхмәт улы Байназаров, Мөнир Ғәле улы Маннапов, Тәфтизән Сабирйән улы Ушанов совет журналистикаһы мәктәбен үткән төплө белемле, эшкә яуаплы ҡараған юғары грамоталы ихлас кешеләр булараҡ хәтерҙә ҡалған. Кейенеү, сәс ҡырҡтырыу стилендә лә ниндәйҙер миҡтарҙа үҙ заманы шауҡымын һаҡлағайны улар. 57-се йәше менән барған Рәшит Зиннәт улын күҙ алдына килтереү өсөн шағир Назар Нәжми портретына күҙ һалыу ҙа етә - бер яҡҡараҡ һалып таралған оҙон ап-аҡ сәстәр, мул күлдәк, галстук... Редакция ирҙәре берет, плащ кейергә ярата ине.

Һөнәргә мине редакцияның ауыл хужалығы бүлеге мөдире Рәшит Үтәев өйрәтте. Аграр тармаҡ район иҡтисады нигеҙе булғанға күрә, уға ҡағылышлы тема башлыса гәзиттең беренсе битендә яҡтыртылды. Ауыл хужалығы идаралығы белгестәре менән тығыҙ бәйләнештә булдыҡ. Ул осорҙа идаралыҡ менән Петр Максимович Божеховский, Фаил Рафаэль улы Сәйетов, Флорит Фәрит улы Сәлимйәнов, бер-береһен алмаштырып, етәкселек итте. Дөйөм хужалыҡтар ҙа әле көс-ҡеүәтен юғалтмағайны: баҫыуҙар һөрөп-сәселде, фермалар мал менән тулы булды, техника паркы ярайһы бай ине. Ҙур ауыл хужалығы кампанияларына (сәсеүгә, бесәнгә, ураҡҡа, малды йәйләүгә күсереүгә, мал ҡышлатыуға) әҙерлек буйынса район семинарҙары, был эштәрҙә үҙ-ара тәжрибә утаҡлашыу буйынса колхоз-совхоздар белгестәренең осрашыуҙары, йылға йомғаҡ яһау отчет йыйылыштары даими үтте. Уларҙың барыһында ла беҙ ҡатнаштыҡ һәм гәзиттә мәҡәләләр, репортаждар баҫтырҙыҡ. Аҙна һайын тигәндәй ауыл хужалығы белгестәре менән районға материал тупларға сыға инек. Ай һайын фермалар буйынса һауым күрһәткестәрен, ураҡ осоронда гектар ҡеүәтен, һуғып алынған тулайым ашлыҡ иҫәбен, мал аҙығы әҙерләү барышын таблицаларҙа биреп барҙыҡ.

Совет заманынан килгән практикаға ярашлы, ауыл хужалығы тармағының төрлө хеҙмәте йыш ҡына гәзиткә үҙ эш йүнәлеше буйынса мәҡәләләр тәҡдим итә торғайны. Ветеринария өлкәһенә ҡағылышлы шундай бер материалды Баймаҡ төбәк-ара тоҡомсолоҡ предприятиеһы етәксеһе Рәшит Тәхәү улы Яҡшыбаев алып килде. Уны гәзиткә мин әҙерләнем. Яҙма донъя күргәс, автор беҙҙең кабинетҡа тағы инеп сыҡты. Уның менән ошондайыраҡ һөйләшеү булды.

- Ҡустым, һин ветеринарға уҡығанһыңдыр ул? Мәҡәләне бик белдекле мөхәррирләгәнһең, - тине миңә Рәшит Тәхәү улы, рәхмәтен еткереп.

- Юҡ, - тинем яуап итеп.

- Зоотехникһыңмы әллә?

- Юҡсы...

- Агрономмы, әтеү?

- Уҡыған һөнәрем геология буйынса, - тип асыҡлыҡ индереп ҡуйҙым, ағай ныҡ ныҡышҡас.

Был диалогты килтереп, шуны билдәләмәксемен: һөнәри белемем ауыл хужалығынан алыҫ булып та, башҡа тармаҡҡа ҡағылышлы материалды еренә еткереп килештерә алғанмын икән, уның өсөн иң элек Рәшит Зиннәт улына бурыслымын. Уның кеүек һәр мәҡәлә өҫтөндә үтә ентекле эшләгән журналисты башҡаса осратманым. Икеләндергән, шик тыуҙырған мәғлүмәтте аҙағына еткәнсе асыҡламайынса, ҡағыҙға баҫтырмай ине ул. Белешмәләрҙе, һүҙлектәрҙе, китаптарҙы күтәрә, телефон аша кәрәкле кешеләргә сыға - барыбер төбөнә төшөп ҡуя. Уның ҡулы аша үткәндәр шул дәресте ғүмерлеккә үҙенә һеңдерҙе.

Коллективтың татыулығы, берҙәмлеге башлыса етәксенән тора. Ипле холҡло, ғәҙел, һәр осраҡта ла тыныс ҡала белгән Ғәлимйән Ситдыҡ улына уның ҡулы аша үткән бөгөнгө район гәзиттәре хеҙмәткәрҙәре оло рәхмәтлелер, тим. Үҙемде генә алғанда ла, әгәр ул, тәжрибәң юҡ, тип ишектән кире бороп сығарһа, моғайын, яҙмышым, үрҙә әйтелгәнсә, бөтөнләй башҡаса яҙылыр ине.

Ғәлимйән Ситдыҡ улы һәр материалды ентекле ҡарап сыҡмайынса, гәзит битенә ҡуйҙыртманы. Район кимәлендә, етәкселәр алдында ла уның абруйы юғары булды.

Яуаплы секретарь Мөнир Ғәле улы Маннаповты, Гүзәл Исхаҡ ҡыҙы Ниғәмәтованы, Әсхәт Әхмәт улы Байназаровты, Тәфтизән Сабирйән улы Ушановты ихласлыҡтары, ябайлыҡтары, гәзит эшен төплө белгәндәре өсөн ихтирам иттек. Үкенескә, уларҙың байтағы арабыҙҙа юҡ инде. Йәндәре ожмахта булһын!

Районда дубляж урынына айырым башҡорт баҫмаһы була, тигән ҡыуанıслы хәбәр 1999 йылдың аҙағында таралды. Ул ысынға сыҡты. "Һаҡмар" гәзите мөхәррире вазифаһына тәғәйенләнгән Илһам Миңлеғәле улы Йәндәүләтов команда йыя башланы. Мине баҫманың ауыл хужалығы бүлеге мөдире итеп тәғәйенләне. Яңы гәзитте аяҡҡа баҫтырыуҙа мөхәррир урынбаҫары вазифаһына тәғәйенләнгән Тәфтизән ағай Ушановтың, яуаплы секретарь эшенә егелгән Хәйризаман Зиннәт улы Үтәевтың матбуғат өлкәһендәге бай тәжрибәһе баһалап бөткөһөҙ роль уйнаны. Сөнки, быға тиклем рус редакцияһында эшләгәнгә күрә, беребеҙ ҙә ныҡлап башҡортса яҙа алмай инек. Тәүге һанды декабрь айында уҡ әҙерләй башланыҡ. Мин районда "Һаҡмар" исеме йөрөткән объекттар тураһында мәҡәлә әҙерләнем. Мәғлүмәт иң элек, әлбиттә, Һаҡмар йылғаһына ҡағыла ине. Шул атама менән ҡунаҡхана, колхоз булды ул ваҡытта. Ыҙалап яҙыуым, аҙаҡтан Тәфтизән Сабирйән улының тексҡа күп төҙәтмәләр индереүе хәтерҙә ҡалған.

Социаль мәсьәләләр бүлеген - Гүзәл Салауат ҡыҙы Салихова (Иҫәнгилдина), иҡтисад һәм сәнәғәт бүлеген Азамат Салауат улы Мөхәмәтшин уңышлы етәкләп алып китте. Беренсе йылдан уҡ гәзиттең тиражы юғары булды - 7 мең дананан ашты

Илһам Миңлеғәле улы, яңы быуын етәксеһе булараҡ, демократик ҡарашлы, яңылыҡҡа ынтылыусан яғы менән айырылып торҙо. Киҫкен, сетерекле темаларҙы ла урап үтмәнек. Ундай саҡта: "Кәрәк булғас, баҫабыҙ инде", - тиеп, ҡурҡмай яуаплылыҡты үҙ өҫтөнә алды ул. Мин ауыл хужалығындағы эштәрҙе яҡтыртыуҙан тыш, аҙналыҡ сәйәси күҙәтеүҙәр колонкаһын алып барҙым. Район гәзитендә 2002 йылға тиклем, Сибайға күсеп киткәнсе, хеҙмәт иттем.

Бөгөн "Һаҡмар" гәзитен Гүзәл Салихова етәкләй. Азамат Мөхәмәтшин, Лилиә Таҡаева, Лилиә Күсәбаева (Салихова) ла инде сирек быуат баҫмаға тоғро. Редакция уңышлы эшләй икән, тимәк, коллективта тәүге көндән һалынған матур традициялар үҙ емешен бирә.

**Рәсүл БАЙГИЛДИН.**

*АФАРИН!*

## БЕҘҘЕКЕЛӘР ХАЙРАН ИТТЕ!




**Башҡортостан Республикаһының халыҡ ҡоралдары милли оркестры, (художество етәксеһе һәм баш дирижеры Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Ринат Мөхәмәтйәнов) Татарстандың Әлмәт ҡалаһында үткән "Музыка әйҙәүе" Халыҡ-ара фестивалендә сығыш яһаны.**

Ойоштороусылар быйыл алтынсы тапҡыр үткәрелгән мәртәбәле форумды тантаналы ябыуҙы тағы Башҡортостан коллективына ышанып тапшырҙы. Башҡортостандың визит карточкаһы булған Милли оркестр фестиваль ҡунаҡтарына һәм музыка һөйөүселәргә "Көнсығыш моңдары" программаһы премьераһын тәҡдим итте. Унда Башҡортостан, Татарстан, Үзбәкстан, Ҡырғыҙстан, Ҡазахстан композиторҙарының һәм билдәле төрөк сериалдары музыкаһы яңғыраны. Тамашасылар, фестивалдә ҡатнашыусылар башҡорт коллективының юғары башҡарыу кимәлен билдәләне.

***Рәмил Саҙриев, "Нефтсе" мәҙәниәт һарайы директоры, "Музыка әйҙәүе" Халыҡ-ара фестиваленең креатив продюсеры:*** Былтыр беҙҙең фестивалде Башҡортостан Республикаһының Халыҡ ҡоралдары милли оркестры сағыу программа менән япҡайны. Тамашасылар һәм беҙ, ойоштороусылар, бик ҡәнәғәт ҡалдыҡ. Әлбиттә, шундай уңышлы сығышты тағы ла күреү теләге тыуҙы. Шуға күрә йәнә Башҡортостандың Милли оркестрын фестивалде ябыу тантанаһына саҡырҙыҡ. Оркестр көслө, ғәйрәтле яңғырай: барабансылар иҫ киткес, дирижер бик шәп. Һәр әҫәр өсөн видеояҙмалар, уйланып, урынлы һайланған.

***БР Халыҡ ҡоралдары милли оркестрының баш дирижеры Ринат Мөхәмәтйәнов:*** Әһәмиәтле "Музыка әйҙәүе" Халыҡ - ара фестивалендә Башҡортостан Республикаһы исеменән сығыш яһау беҙҙең өсөн ҙур мәртәбә булды. Фестиваль тәжрибә уртаҡлашыу өсөн уникаль майҙансыҡ та. Ә иң мөһиме: бында беҙ тамашасыларҙы республикабыҙҙың милли сәнғәте менән таныштырабыҙ һәм башҡа халыҡтарҙың йолаларын күрәбеҙ. Музыка кешеләрҙе берләштерә, күңелдәрҙе сафландыра, йәшәүгә илһам бирә, хисләндерә.

***Ленар Шакиров, С. Сәйет-Ғәлиев исемендәге мәҙәниәт һарайы директоры (Ҡаҙан):*** Дөрөҫөн әйткәндә, бөгөн мин ниндәйҙер мәҙәни тетрәнеү кисерҙем. Һеҙҙең оркестрҙы беренсе тапҡыр тыңланым. Башҡорт милли музыка ҡоралдарында иҫ киткес яңғыраған урынлы һәм оло һөйөү менән тәмле итеп һайланған әҫәрҙәр! Башҡа халыҡтарҙың мәҙәниәте менән тап һеҙҙең оркестр кеүек коллективтарҙың сәнғәте аша танышырға кәрәк.

***Зөлфиә Нури, тыңлаусы:*** Башҡортостан оркестрын ҡарау, ишетеү һәм тыңлау - ғәжәйеп тамаша! Көнсығыш музыкаһының көсө илһамландыра һәм ҡанатландыра. Оркестранттарҙың милли стилдә тегелгән сәхнә кейемдәре, дирижерҙың фрагы айырым һоҡланыуға лайыҡ, дизайнерҙар һәм тегеү оҫталары ҙур өлөш индергәне күҙгә ташлана. Һуңғы рәттә ултырһам да, орнамент һәм ҡулдан сигеү нескәлектәрен күрҙем, ҡара бәрхәт өҫтөндәге таштар төрлө гәүһәр йондоҙҙар булып балҡый! Бер һүҙ менән әйткәндә, концертта башҡорт сәнғәтенең халыҡсанлығына, байлығына, матурлығына тағы бер тапҡыр шаһит булдыҡ! Был тойғо миндә оҙаҡ йәшәйәсәк.

✓ *Беҙгә кешелек тарихы йылъяҙмаһын еткергән Хәмит сәсән һәм Ғәбит сәсән, Мөхәмәтша Буранғолов кеүек, "Урал батыр" эпосын яттан һөйләүсе балаларыбыҙ ҙа Уралдың үлемһеҙ рухи юлын дауам итеүселәр бит.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ТЕЛЕВИЗОР МЕНӘН МАУЫҠМА!

Телевизорҙы күп ҡарау үлемесле сирҙәргә илтеүе бар. Телевизор алдында оҙаҡ ултырыусылар йыш ҡына үпкә эмболияһына, йәғни, үпкәнең ҡан тамырына эмбол тығылыуы дусар була, был турала Лондонда, кардиологтарҙың Европа йәмғиәте конференцияһында белдерҙеләр. Үпкә эмболияһы йөрәктән үпкәгә ҡан йөрөтөүсе артерияға эмбол тығылыу сире, унан Бөйөк Британияла ғына йыл һайын 60 мең кеше үлә. Көнөнә 5 сәғәт тәрлө телешоуҙар ҡарау менән мауыҡҡан кешеләргә мотлаҡ профилактика менән шөғөлләнергә кәрәк, ти белгестәр.

■ Төнгөлөккә ашарға ярамай, тип раҫлай бөтөн табиптар ҙа. Тик әгәр ҙә ваҡытында ашап өлгөрмәгәндәргә нимә эшләргә һуң? Төнгә ҡарай ашауҙы зыянһыҙ итергә тырышыуһыҙ, тип көнәш бирә диетологтар. Иҫегеҙҙә тотоғоҙ: ас көйөнсә йоҡларға ятыуҙың шулай уҡ кире яҡтары бар. Ғалимдар күптәр раҫлаған, тамағы туҡ кеше яҡшырай йоҡлай. Йоҡлар алдынан нимәләр ҡапҡылап алыу ҡандағы шәкәр кимәлен нормаға килтерә. Шулай итеп, һуңға ҡалған киске аш майһыҙландырылған йогурттан тора ала. Унда диетик протеин бар, ул асығыу тойғоһон оҙаҡҡа баҫасаҡ, иң яҡшыһы - йогурт артыҡ татлы булмаһын. Эремсек тә сәләмәт туҡланыу рационынан. Йәшелсәләр шулай уҡ ярайһы ғына туҡлыҡлы ризыҡ, калориялары ла аҙ. Аҡ ит организмдың углевод менән майҙарҙы энергияға әйләндереүен йайлата.

■ Анар ҡан тамырҙарына яҡшы йоғонто яһай, ул майҙарҙы яндырып, тамырҙарҙың стенаһын һығылмалыраҡ итә. Анар емеше файҙалы матдәләргә, шул иҫәптән антиоксиданттарға һәм полифенолға бай. Улар йөрәк-ҡан тамырҙары системаһын һаҡлай, шуға ла ҡан тамырҙары яҡшыраҡ тарая һәм киңәйә, был иһә ҡан әйләнешен нормаға тота. Әселәндереүгә ҡаршы матдәләр атеросклероҙы булдырмай, был ҡан тамырҙарына оҙаҡ ваҡыт һығылмалылығын һаҡларға булышлыҡ итә. Ғалимдар раҫлауынса, был емеш һөт биҙҙәре яман шеше ихтималлығын кәмета. Бынан тыш, продукт насар холестерин сығанағы булған түбән тығыҙлыҡтағы майҙарҙы яндыра, ә файҙалы майҙарҙы, киреһенсә, күбәйтә.

■ Психология белгестәре раҫлауынса, компьютер уйындарының ауыңыҙ төрҙәре кешелә агрессия уята. Ауыңыҙ уйындар менән кешенең үҙен агрессив тотоуы араһында ысынлап та бәйләнеш бар, ти улар. Ҡан түгелгән, көс ҡулланыу сәхнәләре асыуҙы нығ көсәйтә. Ошо рәүешле күңел асыуҙы хуп күреүселәрҙең йәлап холҡо ла, үҙен тотошо ла үҙгәрә. Ғалимдар бындай уйындарҙы уйлап табыусыларға уйындарҙа көс ҡулланыуҙы кәметергә, ә ата-әсәләргә балаларына атыш уйындарын тыйырға кәңәш итә.

■ Антибактериаль һабынды йыш ҡулланырға ярамай, ти ғалимдар. Ул тире өсөн үҙенсәлекле антибиотик булып тора, шуға ла бындай һабын микробтар менән файҙалы микрофлораны ла юҡҡа сығара, етмәһә тирене киптерә. Бындай һабын менән ҡулды баҡсала эшләгәндән һуң йә юлда йөрөгәндә йыуыу ҡулайлыраҡ. Шулай уҡ шыйыҡ һабындар ҙа тирегә яҡшы тәьҫир итә, тире дымға туйынып ҡала, сөнки уларҙа йышыраҡ һелте булмай. Шулай ҙа бындай һабындың составындағы матдәләр ҡуҙгә төшөп, уны әсеттереүе ихтимал, шуға уның менән бит йыумағыҙ. Йыуынғанда тирегә зыян иктермәҫ өсөн йыуғыс ҡулланмағыҙ, һабын молекулалары йыуғысһыҙ ҙа бысраҡты таҙарта.

КӨН ТЕМАҺЫ

# "УРАЛ БАТЫР" ТАНТАНАҺЫ



**Был аҙнала республикала икенсе тапҡыр "Урал батыр" башҡорт халыҡ эпосы көнө билдәләнде. Байрам былтыр Башҡортостан Башлығы указы менән булдырылды һәм беҙҙең мәҙәни традицияларҙың мөһим бер сағылышына әйләнде. Был юлы ла 8 июндә бөтөн республика төбәктәрендә тантаналы саралар үтте.**

## Баймаҡ районында...

**Яҡшылыҡ булһын атығыҙ,**
**Кеше булһын затығыҙ;**
**Яманға юл ҡуймағыҙ,**
**Яҡшынан баш тартмағыҙ!**
**Бар кешелек тарихын сағылдырған данлыҡлы "Урал батыр" эпосының был юлдары һәр заман, һәр милләт, һәр кем өсөн тормош ҡануны булырға тейештер.**



Мәшһүр эпосыбыҙға арнап, Баймаҡ районының Икенсе Этҡол ауылы янындағы Хәмит сәсән утарында "Сәсән уҙған ерҙә һүҙ ҡала" сараһы уҙҙы. 1910 йылда тап ошо урында башҡорт халыҡ ижады байлығын йыйыу менән шөғөлләнгән фольклорсы һәм сәсән Мөхәмәтша Буранғолов "Урал батыр" эпосын Баймаҡ районының мәшһүр сәсәндәре Ғәбит Арғынбаевтан һәм Хәмит Әлмөхәмәтовтан яҙып ала. Мәшһүр әҫәр өс өлөштән, туғыҙ бүлектән тора. Ул үҙенең боронғолоғо, күләме, йөкмәткеһе һәм әһәмиәте яғынан донъяла киң билдәле ошо жанр әҫәрҙәре менән бер баҫҡыста тора. Эпоста халҡыбыҙ асылы, тарихы, мәҙәниәте, гөрөф-ғәҙәттәре, йәшәү мәғәнәһе, изгелек һәм яуызлыҡ, яҡшы һәм яман, үлем һәм үлемһеҙлек кеүек мәңгелек төшөнсәләр сағылдырылған.

"Урал батыр" эпосы яҙып алынған урынға бынан егерме йыл элек ауылдың рухлы ир-уҙамандары Мораҙым Хәлилов, Илдар Рахманғолов һәм Айбулат Ғүмәровтың тырышлығы менән стела ҡуйыла, урын кәртәләп алына, өс сәсән иҫтәлегенә өс ҡарағай ултыртыла. Былтыр арҙаҡлы яҡташыбыҙ, дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе урынбаҫары Илшат Азамат улы Тажетдиновтың ярҙамы, Баймаҡ районы башҡорттары ҡоролтайы һәм Ниғмәт ауыл биләмәһе тырышлығы менән мәшһүр әҫәр яҙып алынған урын яңынан кәртәләп алынды. 8 июндә ошо урында үткәрелде лә инде "Сәсән уҙған ерҙә һүҙ ҡала" сараһы.

Тәүҙә сараға йыйылыусыларҙы билдәле тарихсы, тыуған яҡты өйрәнеүсе Мораҙым Хәлилов эпос яҙып алынған урын һәм Хәмит утары менән таныштырҙы. Йола буйынса, Илнур Аслаев етәкселегендәге район ҡурайсылар ансамбленең һәм Өфөнән директоры Рәмзин Әбсәләмов етәкселегендәге Әҙеһәм Исҡужин исемендәге Балалар сәнғәт мәктәбе уҡыусыларының ҡурайҙа "Урал" көйөн уйнауы аяғөҫтә баҫып тыңланды. Сараға йыйылыусыларҙы район хакимиәте башлығы урынбаҫары Илнур Дәүләтбаев тәбрикләне һәм тарихын белмәгән халыҡтың киләсәге лә юҡлығын билдәләп, был сараның мөһимлеген һыҙыҡ өҫтөнә алды. Артабан байрам ҡунағы Илшат Тажетдинов һүҙ алды һәм: "Һис шикһеҙ, "Урал батыр" эпосы ул халҡыбыҙҙың бөйөк рухи хазинаһы. Унда изгелек, ғәҙеллек, атай-әсәй васыятына тоғролоҡ, тыуған ергә һөйөү, халыҡҡа хеҙмәт итеү кеүек рухи ҡиммәттәр сағыла. Был сифаттар һәр заманда ла мөһим", - тине. Хәмит сәсәндең вариҫы булған Рәил Әлмөхәмәтов сараға әҙерлек нисек башланыуы тураһында һөйләп үтте. "Ата-бабаларыбыҙҙың данлыҡлы эшен беҙ ҙә дауам итергә тейеш. Шуға күрә бөгөнгә сараны ойоштороуҙы Әлмөхәмәтовтар дәррәү күтәреп алдыҡ һәм эшкә тотондоҡ. Балалар, ейәндәр беҙҙең өлгөлә милләтен, тарихын ҡәҙерләп үҫергә тейеш", - тине Рәил Оморҙаҡ улы.

Жюри рәйесе "Сәсән уҙған ерҙә һүҙ ҡала" конкурсының шарттары менән таныштырғандан һуң, сараның иң ҡыҙыҡлы өлөшө башланды. Конкурста Урал арьяғы райондарынан һәм Өфө ҡалаһынан балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүселәре һәм мәктәп уҡыусылары көс һынашты. "Урал батыр" эпосы образдарын һынландырған кейемдәге ҡыҙҙар һәм малайҙарҙың бәйгегә бик етди әҙерләнеүе ҡыуандырҙы, күпселегенең халҡыбыҙҙың төрлө музыка ҡоралдарында уйнай белеүе лә һоҡландырҙы.

Хәмит сәсән вариҫтарының көсө һәм тырышлығы менән сара барышында балаларға ғына түгел,ололар өсөн дә төрлө уйындар үткәрелде. Уҡ атыу, гер күтәреү, һөңгө ташлау ярышында ир-егеттәр ҙур теләк менән ҡатнашты. Әлмөхәмәтовтар ойоштороу эштәренән тыш, ҡатнашыусыларҙы бүләкләү, ҡайнар аш-һыу, тәмле сәй менән һыйлауҙы ла ҙур ихласлыҡ менән башҡарҙы. Шулай уҡ Икенсе Этҡол, Ниғмәт ауылы агинәйҙәренең тирмә ҡороп, милли ризыҡ, кейем-һалым, биҙәүестәрҙән күргәҙмә ойоштороуы ла баһаланды. Баһалама комиссияһы бәйгелә еңеүселәрҙе билдәләүе еңелдән булмауын белдерҙе һәм: "Һәр бала сығышына иң китмәле тырышлыҡ һалды, уларҙың һәләте, осҡон сәсеп тороуҙары һоҡландырҙы. Шулай ҙа һәр сығышҡа ҡуйып барылған балл ярҙамында еңеүселәрҙе билдәләнек", - тигән фекер еткерҙе. Эйе, Хәмит утары был көндә тарихҡа боролош яһап, атаҡлы сәсәндәрҙе яңыбыҙға ғына килтереп баҫтырғандай тойолдо. Беҙгә кешелек тарихы йылъяҙмаһын еткергән Хәмит сәсән һәм Ғәбит сәсән, Мөхәмәтша Буранғолов кеүек, "Урал батыр" эпосын яттан һөйләүсе балаларыбыҙ ҙа Уралдың үлемһеҙ рухи юлын дауам итеүселәр бит. Тимәк, рухи ҡиммәттәребеҙ ҙә, телебеҙ ҙә, тарихыбыҙ ҙа һаҡлана, башҡорт халҡының данлыҡлы юлы киләсәккә эҙ һала...

**Гүзәл ИҪӘНГИЛДИНА.**

## Бөрйән районында

**Был көндә "Шүлгәнташ" музей-ҡурсаулығы амфитеатрында "Урал батыр: Быуаттар ауазы" тигән тантаналы сара уҙҙы.**

Башҡортостандың мәҙәниәт министры вазифаһын башҡарыусы Фәнүр Шәйхисламов "Урал батыр" эпосы көнөнөң киң билдәләнеүе тураһында һөйләне. "Тап Бөрйән районында боронғо эпоста данланған изге урындарҙы күрергә мөмкин, - тип уртаҡлашты Фәнүр Шәйхисламов. - Музейҙа "Урал батыр" эпосын өйрәнеү өсөн яңы тематик класс асҡандар. Түңәрәк ҡорҙа ғалимдар, рәссамдар һәм фольклорсылар ошо баһалап бөткөһөҙ мираҫты киләсәк быуындар өсөн һаҡлап ҡалыу тураһында фекер алышты. Байрам ҙур концерт һәм эпос буйынса театрлаштырылған композиция менән тамамланды".

Проекттың авторы һәм режиссеры - Сулпан Асҡарова. Солистар һәм коллективтарҙың, шул иҫәптән Дәүләт ҡурайсылар ансамбленең, Зәйнетдиндең сағыу сығыштары кисәгә айырым бер атмосфера бүләк итте. Бөйөк эпос менән илһамланып эшләнгән "Урал батыр" кейеҙ костюмдар коллекцияһын күрһәтеү программаның ысын биҙәгенә әүерелде. Коллекция менән "Башҡортостандың этно һылыуҡайы - 2026" республика матурлыҡ һәм талант конкурсы финалсылары, моделдәр таныштырҙы.

## Белорет районында

**Белорет районында, Үрге Әүжән менән Исмаҡай ауылдары араһында, тәүге тапҡыр "Урал батыр" эпосы көнөнә арналған күләмле сара уҙҙы. Был урын осраҡлы һайланмаған - бында башҡорт эпосының төп геройына мемориал ҡуйылған.**

- Ҙур сараны ойоштороуға тотонор алдынан "Халыҡ килерме, лайыҡлы кимәлдә үтерме?" тигән уйҙар тыуҙы, - тип һөйләне Белорет районы хакимиәте башлығы Азат Хәкимов. - Әммә ҡунаҡтарыбыҙҙың, артистарыбыҙҙың, балаларыбыҙҙың күҙҙәренә ҡарап, барыһы ла дөрөҫ икәнен аңланым. "Урал батыр" - ул боронғо эпос ҡына түгел, ә намыҫыбыҙ, әхлағыбыҙ, аҡылыбыҙ. Уны үҫеп килгән быуынға тапшырырға бурыслыбыҙ. Байрамды ойоштороу буйынса ла, ҡунаҡтарға уңайлыраҡ итеү өсөн тағы ла нимәләр өҫтөндә эшләргә кәрәклеген билдәләнек. Әгәр барыһы ла килеп сыҡһа, йыл һайын ошондай сара ойошторасаҡбыҙ. "Урал батыр" эпосы көнөн билдәләү изге йолаға әүерелеүен теләйбеҙ".

Байрамға республиканың төрлө төбәктәренән халыҡ күп йыйылды. Мәртәбәле ҡунаҡтар ҙа килгәйне. Ә инде унда даны бөтә донъяға таралған AY YOLA төркөмө ҡатнашыуы оло ваҡиға булараҡ ҡабул ителде. Шулай уҡ байрамда Дәүләт ҡурайсылар ансамбле, Зәйнетдин, BABY TI, Башҡортостандың Дәүләт ҡурайсылар ансамбле, Салауат Әйүпов, Зилә Лира, Флорида Иркина-Хәмзина кеүек билдәле артистар, урындағы һәүәҫкәр йырсылар, төркөмдәр, уҡыусылар сығыш яһаны. Милли уйындар конкурсы, уҡ атыу буйынса оҫталыҡ дәрестәре үткәрелде. Башҡортостан Республикаһы Адвокаттар палатаһы "Урал батыр" байрамы хөрмәтенә автоуҙыш ойошторҙо. Шулай итеп, "Урал батыр" эпосы көнө төрлө милләт вәкилдәрен матур йырмоң, рух һәм халыҡтар дуҫлығы байрамына тупланы.

## Әбйәлил районында

**Әбйәлил тарих һәм тыуған яҡты өйрәнеү музейы һәм Әбйәлил районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы тарафынан ойошторолған "Урал батыр" эпосына арналған сараға Баймаҡ районы Темәс ауылы ағинәйҙәре лә саҡырылғайны.**

Байрам дилбегәһен музей етәксеһе Шәүрә Ильяс ҡыҙы Әхмәтҡужина баштан уҡ үҙ ҡулына алып, тарих һөйләп башлап ебәрҙе: "Мөхәмәтша Буранғоловтың "Урал батыр" эпосын сәсәндәр Ғәбит Арғынбаев менән Хәмит Әлмөхәмәтовтан яҙып алыуы тураһында мәғлүмәт бөгөн һәр кемдең телендә. Бөгөн уларҙың уҡытыусыһы - халҡына үлемһеҙ ҡобайырҙы еткереүсе күренекле сәсән- импровизатор Мырҙаҡай (Ишмөхәмәт) Мырҙаҡаев - Балапановты хәтергә алмау яҙыҡ булыр. Халыҡ уны Ишмөхәмәт сәсән тип белә. Заманына күрә бик уҡымышлы, алдынғы ҡарашлы, зыялы, рус телен бик яҡшы белеүе тураһында раҫлаусы тарихи документтар һаҡланған. Ишмөхәмәт сәсән Мырҙаҡаев үҙенән алда йәшәгән сәсәндәрҙең ижади мираҫын һаҡлап ҡалыуҙан тыш, боронғо ҡулъяҙмалар, шәжәрәләр туплау эше менән дан тотҡан. "Урал батыр", "Абуҙат", "Алпамыша" кеүек ҡобайырҙарҙы яттан һөйләүсе, "Сандыүҙәк", "Томан", "Малбай", "Бүҙекәй кантон" йырҙары, " Перовский" маршы авторы булған күренекле сәсән-импровизатор ул. Ишмөхәмәт сәсән тураһында мәғлүмәттәрҙең беҙҙең көнгә килеп етеүенә Хәмит сәсән һәм Мөхәмәтша сәсәндәргә бурыслыбыҙ".

Шәүрә Ильяс ҡыҙының ошо "Урал батыр" эпосына бәйле тарихты тулы иткән мәғлүмәтле сығышынан һуң сара 6 йәшлек Әбйәлил ҡыҙы Лия Бикйәнова менән Баймаҡ ағинәйе Нәзилә Яхинаның "Урал батыр" эпосын яттан һөйләү ярышы менән башланып китте. Ҡыҙ бала ағинәйҙән ҡалышманы, күҙ ҙә йоммай, тасуири итеп, эпостың 150 юлын һөйләп ишеттереп һоҡландырҙы. Уларҙан һуң Асҡар ауылының "Тирмәкәй" балалар баҡсаһынан 6-7 йәшлек балалар эпостың "Урал батыр васыяты" өлөшөн сәхнәләштереп, тағы бер хайран итте **(һүрәттә).** Был балалар әле генә булып үткән "Урал батыр" эпосын яттан һөйләүселәр республика конкурсында беренсе урын яулап ҡайтҡан икән. Уларҙы республика кимәлендә лайыҡлы баһа алырлыҡ итеп әҙерләгән тәрбиәселәргә - Әлиә Сәйетғалина менән Гөлназ Ғүмәроваға рәхмәтле булды йыйылыусылар.

Артабан музей хеҙмәткәрҙәре "Урал батыр эпосы - хазиналар һандығы" тип аталған квиз уйын ойоштороп, ике район ағинәйҙәренең эпос буйынса мәғлүмәтлелеген тикшерҙе. Был йәһәттән ағинәйҙәрҙең белеменә шик юҡ ине, әлбиттә. Сөнки улар бит тап "Урал батыр" эпосы аша халҡыбыҙға васыят итеп тапшырылған аҫыл асылыбыҙҙы, булмышыбыҙҙы, традицияларыбыҙҙы, үҙлегебеҙҙе һаҡлау маҡсатын алға алып берләште. Бөгөн улар атҡарғандарҙың барыһы ла - милли кейем һәм аш-һыуҙарыбыҙҙы, милли кәсептәрҙе тергеҙеү, тәбиғәтебеҙҙе имен килеш һаҡлау, ярҙамға мохтаждарға ярҙам ҡулы һуҙыу, айыҡлыҡҡа, илһөйәрлеккә, ерһөйәрлеккә, тәрбиәәхлаҡ ҡағиҙәләрен таныуға саҡырыу - улар барыһы ла ағинәйҙәр иңенә йөкмәтелгән бурыстар. Шуға ла "Урал батыр" эпосы көнөн билдәләү идеяһын иң тәүҙә улар хуплап, күтәреп алды һәм был хазинабыҙҙы ентекләп өйрәнергә тотондо.

Сара һуңынан Баймаҡ ағинәйҙәре делегацияһы менән килгән Темәс тарихи - мәҙәни үҙәге директоры Марат Әминев һүҙ алып, былай тине: "Ағинәйҙәребеҙ "Урал батыр" эпосындағы аҡылды йөрәге аша үткәреп, киләсәктә йәш быуынды тәрбиәләгәндә ошо аҡылға таянырға кәрәк икәнен бик яҡшы аңлай. Бына бөгөн дә улар бөйөк эпосты өйрәнергә лә өйрәнергә тип һүҙ ҡуйыша. Шулай итеп, үҙебеҙҙең данлы эпосыбыҙҙы бөтә донъяға танытып, бөйөк ғалимдарыбыҙ ярған эҙҙәрҙән үтеп, Уралдың исемен Ер шарына яңғыратырға яҙһын. Эпостың эстәлегенә батырҙар рухы һалынған һәм шундай рухтағы егеттәребеҙ әле лә бит ил һағында тора, уларҙы беҙ бар яҡлап күтәрмәләргә, ярҙамыбыҙҙан ташламаҫҡа бурыслы. Бөгөн бында йыйылған балалар ҙа күңелдәренә "Урал батыр" эпосындағы рухты һеңдерә, афарин уларға ла!"



## Учалы районында

**Былтыр "Комфорт ҡала мөхите формалаштырыу" федераль программаһы буйынса Учалы районы үҙәгендә арыҫлан атланған Урал батыр һәйкәле ҡоролдо. "Урал батыр" эпосына арналған тантана ла нәҡ төбәгебеҙҙең яңы рухи үҙәге янында үтте.**

Тантанаға балаларҙың күп килеүе, күҙҙәре баҙлап тамашаны күҙәтеүе күңелгә өмөт һәм шатлыҡ бирҙе, артабан яҙмыштары ҡайҙа ғына алып китмәһен, ҡолаҡтарында гел генә "Яҡшылыҡ булһын атығыҙ, кеше булһын затығыҙ" юлдары яңғырап торасаҡ. МХО яугирҙары менән аралашҡанда ла: "Ниндәй генә шартар булмаһын, иң мөһиме - кеше булып ҡалырға", - тигән һүҙҙәрҙе йыш ишетәбеҙ. Иң башта, милли йыйындар өсөн хәҙер йолаға әйләнгән ғәҙәт буйынса ҡурайсылар "Урал" моңон башҡарҙы. Ҡала хакимиәте башлығы Вадим Садиҡов ҡыҫҡаса телмәр тотто, ҡотланы һәм эпостың рухи ҡиммәттәре заман тормошонда ла көнүҙәк икәнлеген һыҙыҡ өҫтөнә алды.

Байрам артабан филармонияла дауам итте. Йәнһүрәт һәм эпос буйынса сәхнәләштерелгән тамаша күрһәтелде. Марсель Нажметдинов (сәсән), Наҙгөл Юнысова (ейәнсәр), Арыҫлан Шаимов (Урал батыр), Айгиз Ғайсин (Шүлгән), Вилиә Усманова (Һомай), Ринат Хәлимов (Аҡбуҙат) сағыу һәм мәғәнәле образдар булдыра алдылар. Ни әйтәһең инде - афарин, афарин һәм тағын да бер тапҡыр афарин ойоштороусыларға һәм артистарға!

Тамашаны ҡуйыусы мәҙәниәт колледжы уҡытыусыһы, "Урал батыр" эпосын пропагандалауға нисәмә йылдар көсөн дә, ваҡытын да, һәләтен дә йәлләмәгән Гөлназ Ғайсарованан бер кәлимә һүҙ: "Урал батыр хәтере барыбыҙға ла асыҡ дәлил - бер кеше лә мәңгелек түгел, ә бына ҡылған изге эштәре - мәңгелек. Батырыбыҙ минең өсөн эпос, әкиәт персонажы ғына түгел. Төптән ҡарағанда, башҡорттарға яҡшыны ямандан айырып күрһәткән, артабанғы рухи үҫешебеҙҙе бер ҡалыпҡа һалған бөйөк шәхес бит ул. Эйе, был инаныуымды дәлилләп тә, кире ҡағып та булмай, әммә иманым камил - башҡорттарға ебәрелгән тәүге бәйғәмбәр бит ул! Ҡөрьәндә әйтелә бит - Аллаһы Тәғәлә Мөхәммәт бәйғәмбәргә (с.ғ.с) тиклем дә һәр халыҡҡа айырым бәйғәмбәрҙәрҙе ебәргән була. Ҡалған халыҡтарҙың күбеһе был хаҡта онотһа йә үҙҙәре лә тарих төпкөлөндә ғәйеп булһа, беҙ хәтерләйбеҙ, рухи маяҡ итеп тотабыҙ, был үҙе генә лә оло ғорурлыҡ!"

Гөлназ Рәис ҡыҙының һүҙҙәре менән тулыһынса килешәбеҙ. Ислам дине Урал батыр тарафынан һалынған нигеҙгә һуңынан ныҡлы урынлаша. Шуға ла хаҡ мосолманлыҡ ҡанундары менән борондан килгән башҡорт менталитеты һис тә бер-береһенә ҡаршы килмәй. Әйткәндәй, быйыл июль айында был юҫыҡта ҙур мәҙәни ваҡиға көтә - "Урал батыр эҙҙәре буйлап" фестивале үткәреләсәк, тереһыу һирпелгәндәй, төбәгебеҙгә ҡот һәм йәм өҫтәлер. Эйе, яманға юл ҡуймайыҡ, яҡшынан баш тартмайыҡ, батыр әрсегән ерҙәрҙә кешегә байман табайыҡ, кешегә ил ҡорайыҡ!

**Ильфат ЯНБАЕВ.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

### Таштурғай

**(Обыкновенная каменка)**



Таштурғайҙар төркөмөн башлайбыҙ. Был ҡоштар турғай ҙурлығында, ҡойроҡтары аҡ һәм унда "Т" хәрефе баштүбән әйләндереп "төшөрөлөп" ҡуйылғанына иғтибар итегеҙ. Баҫып торған саҡта таштурғай гел генә аяҡтары бөгөп, баш эйә һәм был саҡта ҡойроғон өҫкә-аҫҡа елпеп өлгөрә. Йыры - башҡа ҡоштарҙың йырынан йыйылған, "чек-чек" тип ҡырҡыу ғына итеп ҡысҡыра. Өңдәрҙә, ҡая ярыҡтарында, таш аҫтарында оя ҡора. 4-6 йомортҡа һала.

Бөгөн беҙ һөйләйәсәк таштурғайҙың атаһы яҙын һәм йәйен көлһыу-һоро төҫтә була, ҡанаттары ҡара, күҙҙәре аша ҡара һыҙат үтә, ҡорһағы - аҡ. Инә ҡоштар, йәш ҡоштар һәм ата ҡош көҙөн ҡыҙғылт-көрән, тамағы, түше ерәнерәк, ҡойроғоноң аҫҡы яғы, ҡорһағы - аҡ.

Ҡала һәм ауылдарҙың ситендә оя ҡороп йәшәй, шулай уҡ ҡала-ауыл эсендә лә йөрөй, ташландыҡ ерҙәрҙе лә үҙ итә. Сүп үләне ҡуйы итеп баҫып киткән ташландыҡ йорттар тирәһендә мотлаҡ таштурғай буласаҡ. Ояһы - таштар, кирбестәр, утын ағастары өйөмө араһында, йомрандарҙың ташландыҡ өңдәрен дә үҙләштерә.

Таштурғай - ошондай урындарҙа иң ғәҙәти ҡош. Уны таныуы еңел - осҡан саҡта "бейеп" китеп бара, "чек-чек-чек" тигән ҡысҡырыуы ла таныулы. Таулы урманлы райондарҙа һирәк осрай.

### Таҙ таштурғай

**(Каменка-плешанка)**



Ата ҡоштоң баш түбәһе, ҡорһағы, ҡабырғалары, ҡойроғоноң өҫкө яғы ап-аҡ, башының ҡалған өлөшө, муйыны, арҡаһы, ҡанаттары - ҡара. Инә ҡош, йәш ҡоштар ябай таштурғайға оҡшаған, бары тик түштәре генә көлһыуыраҡ.

С.В. Кириков (1952) таҙ таштурғайҙы урманлы дала, дала ландшафтарында оя ҡороусы ҡош тип яҙған. В.Д. Ильичев, В.Е. Фомин (1988) мәғлүмәттәренә ярашлы, таҙ таштурғай Иҫәнғол ауылы тирәһендәге тауҙарҙа йыш осрай. Улар бында өйрәнеү өсөн инә ҡошто тота. Шулай уҡ Таналыҡ йылғаһының ҡаялы ярҙарында (Аҡъярҙан түбәнге ағымында), Ирәндектең төньяғында теркәлгән.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**



## 15 ИЮНЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.30, 0.45, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.50, 17.30, 22.40 "Большая игра". [16+]
13.00, 16.00, 17.15 "Время покажет". [16+]
14.15 Давай поженимся! [16+]
15.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.30 Д/с Премьера. "Вторжение". [12+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Аллигатор". [16+]
23.40 "Время героев". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.06, 5.36, 6.06, 6.36, 7.06, 7.36, 8.06, 8.36 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.40, 6.10, 6.40, 7.10, 7.40, 8.10, 8.40 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!". [12+]
9.55 "О самом главном". [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.15, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Загляни ему в голову". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.22 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Профилактика на канале с 7.00 до 14.00.**
**14.00 Новости недели (на рус.яз).**
**14.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 Асыш. Дети. [6+]**
**16.00 Башҡорттар. [6+]**
**16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**16.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**17.00 Формула здоровья. [12+]**
**17.15 Специальный репортаж ГИБДД. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Защитники Отечества. [12+]**
**18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Д/с "Саперы СВО". [16+]**
**21.00 Специальный репортаж. [16+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**0.00 Х/ф "Старшая жена". [16+]**
**1.30 Спектакль "Отчаянная". [12+]**
**3.15 Ап-асык. [12+]**
**4.00 Бәхет иле. [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**5.30 Территория счастья. [12+]**

## 16 ИЮНЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.00, 16.00, 17.15 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.50, 17.30, 22.45 "Большая игра". [16+]
14.15 Давай поженимся! [16+]
15.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.30 Д/с Премьера. "Вторжение". [12+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Аллигатор". [16+]
23.45, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.06, 5.36, 6.06, 6.36, 7.06, 7.36, 8.06, 8.36 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.40, 6.10, 6.40, 7.10, 7.40, 8.10, 8.40 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!". [12+]
9.55 "О самом главном". [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.15, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Загляни ему в голову". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.22 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Спутники". [12+]**
**11.00 "Дорога к храму". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30 Территория счастья.**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости**
**14.00 Бәхет иле.**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**16.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**16.45 Республика LIVE. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Формула здоровья. [12+]**
**18.15 Материнство и детство. [12+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 Д/ф "О чем говорят Памятники". [12+]**
**21.00 Креативный код. [12+]**
**22.00 Подкаст. Интонации. [12+]**
**23.00 Х/ф "Салават Юлаев". [12+]**
**0.15 На своей земле. [12+]**
**0.30 Спектакль "Заблудшая". [12+]**
**3.00 Колесо времени. [12+]**
**4.00 Бәхет иле. [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**5.30 Территория счастья. [12+]**

## 17 ИЮНЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.00, 16.00, 17.15 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.50, 17.30, 22.45 "Большая игра". 16+
14.15 Давай поженимся! [16+]
15.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.30 Д/с Премьера. "Вторжение". [12+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Аллигатор". [16+]
23.45 Премьера. "Шоу Вована и Лексуса". [16+]
0.50, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.06, 5.36, 6.06, 6.36, 7.06, 7.36, 8.06, 8.36 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.40, 6.10, 6.40, 7.10, 7.40, 8.10, 8.40 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!". [12+]
9.55 "О самом главном". [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.15, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Загляни ему в голову". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.22 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Спутники". [12+]**
**11.00 Специальный репортаж. [16+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Формула здоровья. [12+]**
**12.15 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.30 Территория счастья.**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости.**
**14.00 Бәхет иле.**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 "Экологично". [6+]**
**16.00 Автограф. [12+]**
**16.45, 21.00 Материнство и детство. [12+]**
**17.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Дуҫтар. [16+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Защитники Отечества. [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байыҡ-2026". [12+]**
**0.00 Х/ф "Ярослав. Тысячу лет назад". [16+]**
**1.45 Спектакль "Живая Земля". [12+]**
**3.15 Башкирские каникулы. [12+]**
**4.00 Бәхет иле. [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**5.30 Территория счастья. [12+]**

## 18 ИЮНЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.00, 16.00, 17.15 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.00, 17.30, 22.45 "Большая игра". [16+]
14.15 Давай поженимся! [16+]
15.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.30 Д/с Премьера. "Вторжение". [12+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Аллигатор". [16+]
23.45, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.06, 5.36, 6.06, 6.36, 7.06, 7.36, 8.06, 8.36 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.40, 6.10, 6.40, 7.10, 7.40, 8.10, 8.40 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!". [12+]
9.55 "О самом главном". [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.15, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Загляни ему в голову". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.22 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Спутники". [12+]**
**11.00 Моя планета - Башҡортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на рус. яз). [12+]**
**12.15 Дознание. [16+]**
**12.30 Территория счастья.**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00 Бәхет иле.**
**15.00 Сулпылар. [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00, 20.30 Формула здоровья. [12+]**
**16.15 Уралым. [12+]**
**16.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**17.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**18.00 "Йома". [6+]**
**19.00 Телецентр.**
**19.45 "Мама". [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Материнство и детство. [12+]**
**20.45 Башкирские каникулы. [12+]**
**22.00, 3.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Валерий Харламов. Дополнительное время". [16+]**
**1.30 Спектакль "Заноза". [12+]**
**3.15 Навигатор истории. [12+]**
**4.00 Бәхет иле. [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**5.30 Территория счастья. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 19 ИЮНЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.00, 14.15 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
11.50, 17.00 "Большая игра". [16+]
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 Д/с Премьера. "Вторжение". 12+
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Что? Где? Когда?" Экспериментальная серия. [16+]
22.55 Х/ф Премьера. "Ненормальный". [12+]
0.50 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.06, 5.36, 6.06, 6.36, 7.06, 7.36, 8.06, 8.36 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.40, 6.10, 6.40, 7.10, 7.40, 8.10, 8.40 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 20.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!". [12+]
9.55 "О самом главном". [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
21.30 "Поймай меня, если сможешь". [12+]
23.30 Х/ф "Училка". [12+]
3.05 Х/ф "Обет молчания". [16+]
4.39 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Спутники". [12+]**
**11.00 "Йома". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на баш. яз). [12+]**
**12.15 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 Тирмәкәй. [6+]**
**16.00 "Аль-Фатиха". [12+]**
**16.45 Дознание. [16+]**
**17.00 Республика LIVE. [12+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**19.45, 3.45 На своей земле. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 "Башҡорт йыры-2026". [12+]**
**22.00 СВОих не бросаем. [12+]**
**22.15 Письма солдатам. [12+]**
**23.00 Дуҫтар. [16+]**
**23.30 "Ҡурай-шоу". [12+]**
**0.00 Х/ф "Возвращение мушкетеров, или Сокровища кардинала Мазарини". [16+]**
**2.00 Спектакль "Лекарство от смерти". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 20 ИЮНЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
8.35 "Умницы и умники". Финал. [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф Премьера. "Я не артист, я - явление природы...". К 90-летию со дня рождения Михаила Державина. [12+]
11.10 Д/ф "Роль без права переписки". К 85-летию со дня рождения Валентины Малявиной". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Поехали! [12+]
13.05 Т/с "Шифр". [16+]
17.05 "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20, 21.35 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 "Время".
23.30 Д/ф "Цой - "Кино". [16+]
0.25 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 Большие перемены.
14.30, 20.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Мимо тёщиного дома". [16+]
0.40 Х/ф "Куклы". [12+]
4.15 Х/ф "Не в парнях счастье". [12+]
5.59 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**8.15 Материнство и детство. [12+]**
**8.30 На своей земле. [12+]**
**8.45 "Аль-Фатиха". [12+]**
**9.15 Сәләм представляет... [12+]**
**9.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**9.45 СВОих не бросаем. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 МузКәрәҙ. [6+]**
**11.00 Гора новостей.**
**11.15 "Ҡурсаҡ". [6+]**
**11.30 Экологично. [6+]**
**11.45 "Зерно". [6+]**
**12.00 "Елкән". [6+]**
**12.30 Навигатор истории. [12+]**
**12.45 Ете егет. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.45 Специальный репортаж ГИБДД. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**17.45 Подтекст: инструкции к себе. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Полезные новости. [12+]**
**19.15, 4.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 "Байыҡ-2026". [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00, 5.45 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Новости недели (на баш. яз).**
**23.30 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.00 Х/ф "Рагин". [12+]**
**1.45 Спектакль "Пылкие любовники". [12+]**
**3.30 Д/ф Ко Дню медицинского работника. "Обыкновенный гений". [12+]**
**5.00 Новости недели (на баш. яз). [12+]**

## 21 ИЮНЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Играй, гармонь любимая! [12+]
6.55 "Часовой". [12+]
7.25 "Здоровье". [16+]
8.30 "Золотая коллекция Союзмультфильма". [0+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 "Жизнь других". [12+]
11.10 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Д/с "Победа". [16+]
13.10 "Видели видео?" [0+]
14.50 Д/ф "Я не артист, я - явление природы...". К 90-летию со дня рождения Михаила Державина. [12+]
15.50 "Призвание". Премия лучшим врачам России. [0+]
18.00 Вечерние новости.
19.00 Д/ф "Этот день Победы". [12+]
21.00 "Время".
23.00 "Большая игра". [16+]
0.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

6.00 Х/ф "Цена измены". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00 Вести.
12.00, 1.40 Д/с "Рассказы из русской истории". [12+]
13.05 Д/ф "1941. Русские не сдаются". [16+]
14.30 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 "Парад юмора". [16+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.36 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Д/ф Ко Дню медицинского работника. "Обыкновенный гений". [12+]**
**8.30 "Ҡурай даны". [12+]**
**8.45 Күстәнәс. [12+]**
**9.15 "Мама". [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз).**
**9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Тирмәкәй. [6+]**
**10.45 "Городок АЮЯ". [6+]**
**11.00 Гора новостей.**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 Сулпылар. [6+]**
**12.00 "Ат уйнатып!". [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз).**
**13.15 Ап-асык. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.00 Дорога к храму. [6+]**
**15.30 Честно говоря. [12+]**
**16.15 Д/ф Ко Дню медицинского работника. "Жить..." [16+]**
**17.00 Республика LIVE. [12+]**
**17.45 Спектакль "Помилование". [12+]**
**19.45 Әлләсе. [12+]**
**20.30 Формула здоровья. [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15 Подкаст. Интонации. [12+]**
**22.45 Клинической больнице скорой медицинской помощи - 35 лет. Концерт. [12+]**
**23.45 Х/ф "Война под крышами". [12+]**
**1.30 Спектакль "Чужой ребенок". [12+]**
**3.45 Д/ф "Жить..." [12+]**
**4.30 Колесо времени. [12+]**
**5.30 Дуҫтар. [16+]**
**6.00 Новости недели (на рус.яз.). [12+]**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1447 һижри йыл.*

| Июнь (Зөлхизә - Мөхәррәм) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 15 (29) дүшәмбе | 3:08 | 4:38 | 13:30 | 19:01 | 21:54 | 23:24 |
| 16 (1) шишәмбе | 3:08 | 4:38 | 13:30 | 19:02 | 21:55 | 23:25 |
| 17 (2) шаршамбы | 3:08 | 4:38 | 13:30 | 19:02 | 21:55 | 23:25 |
| 18 (3) кесе йома | 3:08 | 4:38 | 13:30 | 19:02 | 21:56 | 23:26 |
| 19 (4) йома | 3:08 | 4:38 | 13:30 | 19:03 | 21:56 | 23:26 |
| 20 (5) шәмбе | 3:08 | 4:38 | 13:30 | 19:03 | 21:57 | 23:27 |
| 21 (6) йәкшәмбе | 3:08 | 4:38 | 13:30 | 19:03 | 21:57 | 23:27 |

*БР Мосолмандары диниә назараты сайтынан алынды.*

✓ *100 г фундукты еңелсә ҡыҙҙырып, тартырға. Өҫтөнә 500 мл ҡайнаған һөт ҡойоп, 2 ҡалаҡ бал һәм семтем ваниль онтағы ҡушып, 15 минут тирәһе ваҡыты-ваҡыты менән болғап һыуытырға. Көн дауамында әҙләп кенә эсеп йөрөргә.*



*БАҠСА*

# ИЮНЬ АЙЫНДА...



**Июнь айы - емеш һәм емеш-еләк үҫентеләренең әүҙем үҫкән осоро, уларға тап ошо осорҙа күпләп һыу ҡойорға һәм туҡлыҡлы, бигерәк тә азотлы һәм калийлы матдәләр менән туҡландырырға кәрәк.**

Шулай ҙа һәр баҡсасы өсөн иң ябай һәм ҡул аҫтында булған ысул - ул органик ашлама. Быны өсөн бер өлөш тиҙәк һәм өс өлөш һыуҙы болғатырға һәм бер нисә көн әсетеп, тағы ла һыу менән аралаштырып, үҫемлектәргә ҡойоп сығырға кәрәк. Әсетелгән үлән бигерәк файҙалы буласаҡ, быны өсөн шулай уҡ бер өлөш үлән һәм өс өлөш һыу кәрәк.

Был ай сүп үләндәре менән көрәшеү мәле лә. Ваҡытында утап, сүп үләндәрен юл, канау ситтәренә һалығыҙ. Ул серепе, үҙенсәлекле ашламаға әүерелəсәк.

Ҡоротҡостар менән көрәшеү өсөн баҡсалағы ағастарға һәм ҡыуаҡтарға һабын, ылыҫ йәки тәмәке болғатылған һыу һибеп сығығыҙ. Гәрсис, әсе әрем, меңъяпраҡ, еҙ төймә, томаттың ботаҡтарын төнәтеп һибеү ҙә файҙа бирәсәк. Зарар килтереүсе күбәләктәрҙе юҡҡа сығарыу өсөн ағас ботаҡтарына бер аҙ кеүәҫ, крахмал шәрбәте (патока) һалынған банкалар элегеҙ. Һәр иртә һайын ҡурай еләге һәм еләктәрҙең аҫтына туҡыма түшәп, ҡыуаҡтарҙы һелкетеп сығығыҙ һәм ҡоротҡостарҙы йыйып алығыҙ. Ҡурай еләгенең ҡоротҡостарҙан зыян күргән һәргәйгән ботаҡтарын ҡырҡып алып, яндырығыҙ. Июндә емеш ағастарының емештәре ҡойола, был туҡтатып булмаған тәбиғи биологик процесс. Уларҙы йыйып алып торорға онотмағыҙ.

Июнь башында айыу баланы (жимолость) емеш бирә башлай. Уңыштың 75 проценты өлгөрөп еткәс, уларҙы йыя башларға була, сөнки саҡ ҡына һуңлаһағыҙ, был эште һеҙҙең өсөн турғайҙар һәм барҡылдаҡтар башҡарып ҡуйыуы ихтимал.

Еләк ҡыуаҡтарының кәрәкмәгән мыйыҡтарын ҡырҡығыҙ, тамыр йәйҙерә торғандарын ергә күмеп, һыу һибегеҙ. Ер ҡоро булһа, еләктәргә һыу һибергә кәрәк, ә бына ул мыйыҡ ебәргәндә һәм уңыш өлгөргән осорҙа һыу һибергә ярамай.

Июндә ер өҫтөндәге өлөшө туңып, зыян күргән алмағас күп итеп йәшел үҫентеләр ебәрә башлай. Уларҙы төбөнән ҡырҡып ташлағыҙ. Июнь аҙағында крыжовник, ҡыҙыл һәм ҡара ҡарағатты үрсетә башлайҙар. Быны өсөн ҡыуаҡтан ботаҡтар киҫеп алаһың һәм тамыр үҫешен әүҙемләштерә торған шыйыҡсаларға, мәҫәлән, гетероауксинға 8-12 сәғәткә ҡуйып торорға. Аҙаҡтан уларҙы парниктарҙа тамыр йәйҙерәләр. Торф, ҡом өҫтәлгән тупраҡ яҡшыраҡ буласаҡ. Ботаҡтарҙы 1,5-2 см тәрәнлектә ултыртырға. Температура 18-20 градустан артмаһын, унан юғары күтәрелә башлаһа, мотлаҡ ышыҡ булдырырға кәрәк. Ботаҡтарҙы парникта тамыр йәйгәнсе тоторға.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*



# НАСАР ҒӘҘӘТТӘН...

## доға менән ҡотол

**Исламда сәләмәт рух һәм сәләмәт тән менән бәйле идея бик юғары. Ислам дине тәмәке тартыу кеүек йәмғиәтебеҙҙә ғәйәт нығ таралған насар ғәҙәткә кире ҡарай. Бөгөнгө көндә тәмәке тартыуҙың кеше һаулығына насар тәьҫир итеүен дәлилләгән кире ҡаҡҡыһыҙ фәнни фактттар бар һәм улар бер үк нәмә тураһында һөйләй: тәмәке тартыу хәрәм эш. Сүрәләрҙә әйтелгән: "Үлтермәгеҙ һәм үҙегеҙҙе үлемгә этәрмәгеҙ! Аллаһ ысын мәғәнәһендә һеҙгә мәрхәмәтле!" "Һаулығыңды буштан-бушҡа исраф итмә. Исрафлыҡ - Иблестең туғандары, ә Иблес Аллаһҡа тоғро түгел".**

Тәмәке тартыусылар йыш ҡына: "Миндә һеҙҙең ни эшегеҙ бар?"- тип һораусан. Был бөтөнләй дөрөҫ түгел. Бигерәк тә махсус рәүештә билдәләнгән урында ғына түгел, һәр ҡайҙа - урамда ла, подъезда ла тәмәке тартҡан кешеләр үҙҙәренең дә һаулығын бөтөрә, башҡаларҙы ла аямай. Тартмаған кешенең өйөндә тәмәке көйрәтеү - иң ҙур әҙәпһеҙлек, сөнки бүлмәләрҙәге еҫ һеҙ сығып киткәндән һуң да оҙаҡ ҡына һаҡланып ҡаласаҡ.

Тәмәке тартҡан ҡатын-ҡыҙҙарға килгәндә инде, насар ғәҙәткә бәйле сирҙәр үпкә яман шеше, йөрәк өйәнәктәре, һ.б. менән генә сикләнеп ҡалмай әле. Әгәр ҙә буласаҡ әсә тәмәке тарта икән, балаһын да тәҙәлмәҫлек сирҙәргә дусар итеүе бик ихтимал. Ауырлы саҡта тәмәке тартыу иң тәүҙә ҡарындағы балаға кислород етмәүенә килтерә. Тәмәке тартыусы ҡатын-ҡыҙҙарҙың балалары ваҡытынан алда, йә ауырлыға етмәй, йә ғәрип булып тыуа. Шулай уҡ бындай балалар төрлө инфекцияларға һәм астма ауырыуына бирешеүсән була, тип иҫәпләй табиптар. Әлбиттә, кешенең тәмәке тартырға йәки тартмаҫҡа хоҡуғы бар, әммә ләкин ҡатын-ҡыҙ йөклө сағында, йәки балалары алдында тәмәке тарта икән, ул балаларына бер ниндәй ҙә һайлау ҡалдырмай.

Иң ҡулайы - тәмәкене бөтөнләй тартмау. Ҡатын-ҡыҙға тәмәке тартыу бер ҙә матурлыҡ та, сәләмәтлек тә өҫтәмәй. Бәғзе берәүҙәр тәмәкене тынысланыу, үҙен ышаныслы итеп тойоу өсөн тарта. Ундай осраҡтарҙа кешегә бары тик бер юл ҡала - Аллаһҡа ялбарыу. Ул ғына һеҙҙең күңелегеҙгә тынысланыу һәм ярлыҡау, ышаныс килтерер.

Әгәр ҙә кеше тарта икән, ул һис кисекмәҫтән был насар ғәҙәтте ташларға тейеш. Кеше үҙе генә ташлай алмай икән, быны өсөн махсус дауаханалар, ысулдар бар. Рухи яҡтан нығ тороу өсөн доғалар уҡыу, зекер әйтеү зарур.

*ИҪКӘРТӘБЕҘ!*



# ҺАҠҺЫҘҘАРҘЫ УТ АЯМАЙ

**Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының Башҡортостан буйынса Баш идаралығынан белдереүҙәренсә, йәйге миҙгелгә аяҡ баҫһаҡ та янғындар дауам итә.**

Мәҫәлән, Өфө районының Мөҙәрис ауылында мунсала сыҡҡан янғын фажиғәле тамамлана. Утты һүндергәндә ҡатын кешенең йәнһеҙ кәүҙәһе табыла.

Министрлыҡ белгестәре янғын хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен даими үтәргә саҡыра. Ошо талаптарҙан тайпылмаҫҡа кәрәк:

- мейесте нығ ҡыҙғанса яҡмағыҙ, ишеген асыҡ тотмағыҙ;
- мейес алдына мотлаҡ тимер ҡалай һалығыҙ;
- ярыҡ, йәки тишектәре булған мейескә ут яҡмағыҙ;
- мейесте бензин һәм башҡа еңел яна торған шыйыҡсалар менән тоҡандырмағыҙ;
- мейес башын ябыу ваҡыты мунса ингәнгә йәки, өй мейесен яҡҡанда, йоҡларға ятҡанға тиклем ике сәғәттән дә иртәрәк булмаҫҡа тейеш.

Республикала тәбиғи янғындар ҙа булып тора. Ҡоро үлән яныуы Баймаҡ районында теркәлгән. Янғын тиҙ арала һүндерелгән. Был хаҡта Башҡортостандың ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитетынан хәбәр итәләр.

Ведомство мәғлүмәттәре буйынса, 2026 йыл башынан алып дөйөм майҙаны 86 гектарҙан ашыу ерҙә 13 урман янғыны һәм дөйөм майҙаны 327 гектарҙан ашыу ерҙә 193 ҡоро үлән янғыны теркәлгән.

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



### М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**12 июнь "Я считаю до пяти"** (М. Бартенев, М. Ҡулбаев), әкиәт. 11:00. 0+
**15 июнь "Холодное сердце"** (В. Гауф, М. Ҡулбаев), әкиәт. 10:30. 6+
**16 июнь "Айболит и Бармалей"** (К. Чуковский, Р. Хәкимов), мюзикл. 10:30. 0+
**17 июнь "Чиполлино"** (Д. Родари, Р. Хәкимов), мажаралар. 10:30. 6+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**12 июнь "Чем пахнут одуванчики?"** (В.Щербакова). 11:00. 0+
**12 июнь "Волшебник изумрудного города"** (А. Волков). 12:00 һәм 15:00. 0+
**13 июнь "Муха Цокотуха"** (К. Чуковский). 12:00. 0+
**13 июнь "Чем пахнут одуванчики?"** (В.Щербакова). 11:00 һәм 15:00. 0+
**16 июнь "Лесная ярмарка"** (А.Рахманкулова). 10:00 һәм 112:30. 0+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**13 июнь "Дюмовочка"** (Г.Андерсен, Л. Ниғмәтуллина), әкиәт. 13:00. 0+
**16 июнь "Легенда о воине дракона"** (Р.Ғәйнуллиин), әкиәт. 11:00. 6+
**17 июнь "Безопасные каникулы"** интерактив спектакль-лекторий. 11:00. 0+

### БР Милли музейы

**12 июнь "Рәсәй көнө"** кинолекторийы. 11:00-17:00. 6+
**12 июнь "Музейная лепка"** оҫталыҡ дәресе. 12:00. 6+
**16** һәм **17 июнь "Кейеҙ"** оҫталыҡ дәресе. 12:00. 0+
**17 июнь "Клетка под микроскопом"** оҫталыҡ дәресе (алдан яҙылып). 12:00. 6+

*ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ*

### Бал, әфлисун һәм лимон ярҙамында ҡан тамырҙарын таҙартыу

Икешәр апельсин һәм лимонды йыуып, һөйәктәренән таҙартып, ит үткәргес аша ваҡларға. Килеп сыҡҡан массаны быяла банкаға һалып, ике ҡалаҡ бал өҫтәп, бер тәүлеккә һыуытҡысҡа ҡуйырға. Ошо рәүешле әҙерләнгән дауаны бер ай дауамында ашар алдынан ике балғалаҡ ашарға. Был ҡан тамырҙарын таҙартырға ярҙам итә, иммунитетты нығыта, матдәләр алышыныуын тиҙләтә, нервылар системаһына ыңғай йоғонто яһай.

### Иммунитетты нығытыуҙың ете ысулы

- 300 г балға 500 г ваҡланған грек сәтләүеге, 3 лимондың һәм алоэның 100 мл һутын һығып ҡушырға. Көнөнә өс тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 1 балғалаҡ ашарға.
- 100 г инжир емешенә ике стакан ҡайнар һыу ҡойоп, талғын утта 15 минут ҡайнатырға. 2-3 сәғәт төнәтеп, һөҙөп алырға һәм 100 мл күләмендә көнөнә өс тапҡыр ашар алдынан эсергә.
- 1 ҡалаҡ мүк еләген иҙеп, шәкәр өҫтәп, 200 мл ҡайнар һыу ҡойорға йә ҡара сәй яһарға. Мүк еләгенән эшләнгән сәй һыуһынды яҡшы ҡандыра, организмды тонуста тоторға ярҙам итә, арыуҙы бөтөрә, күңелде күтәрә.
- Ике ус ҡарағат япрағына 1 литр ҡайнар һыу ҡойоп, 2-3 минут торорға һәм һөҙөп алырға. Шунан сәй итеп эсергә. Ҡарағат япраҡтарының сәйе арыуҙы бөтөрә, организмдан шлактарҙы сығара.
- 100 г фундукты еңелсә ҡыҙҙырып, тартырға. Өҫтөнә 500 мл ҡайнаған һөт ҡойоп, 2 ҡалаҡ бал һәм семтем ваниль онтағы ҡушып, 15 минут тирәһе ваҡыты-ваҡыты менән болғап һыуытырға. Көн дауамында әҙләп кенә уртлап эсеп йөрөргә.

ШАҒИР ҺҮҘЕ

## МИНЕҢ ӨФӨМ

Тамара ИСКӘНДӘРИӘ

Ә минең Өфөмдөң - көмбәҙе яҡты!
Ә минең Өфөмдә - кешеләр яҡшы!
Кем, тиһең, юлыңа шәмдәлдәр яҡты?
Ул бит беҙ - өфөләр, яҡтылыҡ яҡлы!

Эй Өфөм, һин Өфөм, ҡаршыла "өф!" тип,
Йәш бөркөт ҡанатын һин ҡуйма өтөп!
Һин - рухым мәркәзе,
Тарихың - асыл.
Эй Өфөм, ҡаршымда
Яңынан асыл!

## ТӨНГӨ ӨФӨ

Төнгө Өфө, мин яратам һине.
Мең йондоҙло һинең ҡарашың.
Йәшлек ҡалаһы һин, тормош йырым,
Таныш минә һәр бер тарафың.

Ҡариҙелгә бында ҡушыла ла
Моң таратып аға Ағиҙел.
Ярҙан сәләм бирә ҡорос батыр:
"Бына ошо инде беҙҙең ил!"

Төнгө Өфөм - һәр дәүерҙә яңы!
Саҡырып шаулай проспект - Салауат.
Ҡан тамыры һымаҡ, һәр төбәктә
Тоташтырған ул бер аманат.

Һәҙиә Дәүләтшина бульварына
Яҡын ғына Сәғит Агишың.
Әйҙә, киттек Мостай урамына,
Бәлки, иҫләр беҙҙе, танышың?

Кем ҡул иҙәй унда, килегеҙ, тип?
Шәйехзада икән өндәшә:
"Башҡорт иле, гөлбостаным минең,
Сәмбөлостан булып, мең йәшә!"

Майҙан күрке булып ҡайтты беҙгә
Шайморатов атлы баһадир.
Шәхестәрҙе таныр заман, тиеп
Уйсан ғына бағыр Вәлиди.

Ғафуриға сиктәш бөйөк Пушкин,
Аксаков йортонда - театр.
Либреттоһын яҙып, Баязит Бикбай
Заһир Исмәғилгә килә атыр...

"Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, - тиеп
Башыбыҙҙан һыйпар Аҡмулла. -
Белемленең генә юлы уңа,
Йөҙө яҡты була, аҡ була!"

Зәйнәб Биишева - китап йорто,
Назар Нәжми йырлар йүкәләр
Урамдарға наҙ һәм яҡты биреп,
Өфөләрҙең күҙен иркәләр,
Өфөләрҙең йәнен иркәләр.

Төнгө Өфөм - үҙе бер оркестр!
Мин атлайым, уға һоҡланып -
Мин яратам һине, баш ҡалам, тим,
Килер яҙмышыма уҡталып.

## МОСТАЙ ЙЫЛЫҺЫ

Атлайым мин Өфө урамынан,
Һаҡлай урам Мостай йылыһын.
Бына Шағир йорто. Ул Өфөлә
Барса йорттоң иң-иң йырлыһы.

Күпме әңгәмәләр ҡорҙоҡ бында,
Ҡорҙоҡ бында күпме шиғри ҡор.
Бары юғары хис булды анда,
Шул тойғонан яҡты ул осор.

Һәр бер йорттоң йөрәге бар бит ул -
Тертләп торған моңло сығанаҡ.
Кеше китә...
Шул йорт түренең дә
Мәғәнәһе юҡҡа сыға нәҡ...

Бушап ҡала - урам ғына түгел,
Тотош ҡала, тотош йәмғиәт.
Үҙгәрешле заман саттарында
Маҡсаттарың ни ҙә, йәм ни, әйт!

Ә шулай ҙа шағир ҡалдырған ут
Яҡты итә барыр юлыңды.
Өфө урамында көҙгө ямғыр -
Һаҡлай урам, Мостай, йылыңды.

МӘҠӘЛДӘР

## АУЫҘҒА ҺЫЙМАҒАН ТЕЛ...

### ауылдан ҡыуҙыра

**Башҡорт халҡының телебеҙ тураһындағы ҡайһы бер мәҡәлдәре һәм әйтемдәрен иҫкә төшөрөп китәйек:**

- Әсәм биргән туған тел,
Бабам биргән ҡорал тел,
Халҡым биргән оран тел.
- Аҡыл - ҡаҙна, тел - асҡыс.
- Теле барҙың иле бар, иле барҙың көнө бар.
- Тел - ҡылыс, урынын белеп ҡый, урынын белеп тый.
- Тел өсөн баш яуап бирә.
- Ауыҙға һыймаған тел ауылдан ҡыуҙыра.
- Телһеҙҙең телен әсәһе белер.
- Тураға юл - тел менән, түрәгә юл - мал менән.
- Икмәкте ҡул бүлә, илде тел бүлә.
- Тел - күңел көҙгөһө.
- Ниндәй тел менән тыуғанһың, шул телең менән көн ит.
- Мираҫ итеп мал бир, малдан алда тел бир.
- Тел - хазина, тотонһаң, арта ғына.
- Яман әҙәм шул булыр, ауыҙында ике тел булыр,
Алдында һине ағартыр, артында һине ҡарайтыр.

ТЕЛ ТӨБӨ - ХАЗИНА

## БЫРҒЫ КЕЙЕМ КЕЙМӘ!

**Боронғо ҡаланың урамдары үҙе ҡыҫҡа, үҙе бырғы. Йорттар бытҡым һалынған. Ишек-тәҙрәләр ҙә быръғы ғына, тәпәш. Уларға бүрек тә ҡағылмаған. Археологик ҡомартҡы күренештәрен тасуирлау башҡорт теленең һирәк ҡулланылған һүҙҙәрен үҙләштереүгә лә ярҙам итер.**

**Бүрек.** Бүректең баш кейеме икәнен кем белмәҫ? Ә бына диалектта тәҙрә йәки ишек ҡашы шулай атала. *Тәҙрәнең бүреген нығытыу. Ишек бүреге биҙәп эшләнгән.*

**Быръғы.** "Тар" мәғәнәһендә йөрөгән һүҙ булыр "быр-ғы". *Быръғы кейем. Быръғы юлдан йөрөү.*

**Бысма.** "Бысма" "ялҡытҡыс" тигән һүҙгә иш. *Бысма хәбәр. Бысма томан баҫҡанда бысма уйға батма.*

**Бытҡым.** Диалектта "ҡуйы" тигәнгә тура килә. *Ҡыҙҙың сәсе бик бытҡым. Түтәлдә сәскә бытҡым үҫкән.*

**Бүре уты.** Бүре ыуы. Сабыртҡы тураһында ҡайһы бер урында шулай тиҙәр. *Тәнгә бүре уты ҡалҡҡан. Бүре ыуын халыҡ бик оҫта дауалаған.*

**Шулай итеп, туған телебеҙҙең бытҡым баҡсаһынан бер нисә генә һүҙен һайлап ҡабатлау һис бысма түгел.**

**НУРБИКӘ әҙерләне.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## ХӘҠИҠӘТ ӘСЕ,

### шуға ла уның ғүмере юҡ...

Өндәшмәү - алтын икән, тип, алтын һүҙең йәшермә.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Күршеләш кенә ике ауыл йәшәгән. Улар бер-береһенән әллә ни айырылмаған да, ә шулай ҙа беренсе ауылды икенсеһенән айырып торған бер билдә булған. Беренсе ауылда үтә мәҙәни, кеше күңелен ҡыймайым тип, һүҙҙәрен үлсәп кенә һөйләүсе, икенсе ауылда, киреһенсә, тураһын әйтәм, хаҡлыҡты яҡлайым, тип, ауыҙына ни тура килә, шуны ярып һалып һөйләүсе кешеләр көн күргән.**

**Беренсе ауылдағы кешеләрҙең йәшәү принцибы ошо булған: "Башҡаларҙың һиңә ҡарата ниндәй мөғәмәләлә булыуын теләйһең - үҙең дә уларға шундай мөғәмәләлә бул!" Улар, башҡалар тураһында хәстәрлек күреү, уға борсолоу тыуҙырмау бик еңел, тип иҫәпләгән. Шуға ла улар үҙ фекерен әйтер алдынан ҡат-ҡат уйлаған. Был ауылда барыһы ла йылмайып йөрөгән, сөнки улар бер-береһенә туҡтауһыҙ маҡтау һүҙҙәре яуҙырған. Был ауыл халҡы ошондай мөнәсәбәттәрҙән бик тә ҡәнәғәт булып йәшәгән.**

**Икенсе ауылдағы халыҡ, нисек кенә ауыр булмаһын, бер-береңә дөрөҫтө тура ярып әйтеү яҡшыраҡ, тип аңлаған. Шуға ла улар теләһә ниндәй мәғлүмәтте һалҡын ҡанлылыҡ менән ҡабул иткән, юҡ-барға үпкәләп бармаған, сит кешенең әйткәнен нисек бар, шулай ҡабул иткән.**

**Беренсе ауылға икенсе ауылдан берәйһе килһә, бындағылар уға көскә түҙеп торған. Йомошон йомошлап, уны тиҙерәк ауылына оҙатыу яғын ҡарағандар, сөнки уның туралығы, тупһыҙлығы барыһын да борсолорға мәжбүр иткән. Әгәр ҙә инде беренсе ауыл кешеһе икенсе ауылға барһа, уға ышанмаусанлыҡ белдереп, бында ниндәй ниәт менән килгәнен асыҡларға тырышып, бик һаҡ ҡарағандар. Тура һүҙ һөйләмәгән кеше - шикле кеше, тигән ҡараш көслө булған был ауыл кешеләрендә.**

**Шулай итеп, икенсе ауылдағы халыҡ, барыһы ла асыҡ, кемдең ни эшләгәнен белеп-күреп, иҫкәртеп торғас, ниндәйҙер бәлә-ҡазаларһыҙ ғына йәшәгән. Ә беренсеһендә иһә һәр ваҡыт ниндәйҙер бәләләр сығып ҡына торған: йә магазинды талайҙар, йә кемдеңдер йорто яна, йә кемделер туҡмап китәләр - сәбәбе билдәле инде: кеше күңелен уйлап, был бәләләрҙең сәбәбен юллап йөрөүсе, ғәйеплене асыҡларға тырышыусы булмаған.**

**Бер саҡ беренсе ауылдан бер кеше икенсе ауылдың бер кешеһен урманда осрата. Бәшмәк йыя-йыя, һөйләшеп китәләр былар.**

**- Нисек кенә йәшәйһең, яҡташ? - тип һораған беренсе ауыл кешеһе.**

**- Беҙ нисек йәшәһәк тә, һиңә барыбер түгелме ни? Һин миңә шуны әйт: ниңә һеҙ бер-берегеҙҙе һәр ваҡыт алдайһығыҙ? Ниңә дөрөҫлөктө әйтмәйһегеҙ?**

**- Дөрөҫлөк бит һәр ваҡытта ла яҡшы түгел. Күңелленән булмаған дөрөҫлөктө әйтмәй ҡалдырыу миңә еңелерәк. Бына шулай беҙ бер-беребеҙҙе аяйбыҙ: бөгөн мин уға дөрөҫлөктө әйтмәйем, иртәгә ул миңә дөрөҫлөктө әйтмәй...**

**- Ләкин һин бит ул кешегә дөрөҫлөктө әйтмәйенсә, үҙеңә оло яуаплылыҡ алаһың...**

**- Ниндәй яуаплылыҡ ти! Барыһы ла үтеп китә ул. Ялғаны ла, хәҡиҡәте лә...**

**Беренсе ауыл кешеләре шулай йәшәүҙе дауам иткән, һәр быуынға ата-олаталарының сабыр холҡо тапшырылған. Шул уҡ тәртип боҙоуҙар - магазинды талауҙар, янғын, кемгәлер туҡмаҡ эләктереүҙәр ҙә дауам иткән. Ә икенсе ауыл кешеләре, бер-береһенә эт менән бесәй мөнәсәбәтендә булыу арҡаһында, ғаилә лә ҡора алмаған, балалар ҙа тыумаған. Халыҡ ҡартайған һәм ауыл йәшәүҙән туҡтаған. Бындағы һуңғы кешене ерләргә килеүселәр уның өйө стенаһында аҡбур менән яҙылған шундай яҙыуҙы күргәндәр: "Хәҡиҡәт әсе, шуға ла уның ғүмере юҡ..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ02-01885, 30 июль 2025 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Рәсүл БАЙГИЛДИН, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
**"Башҡортостан Республикаһы" Нәшриәт йорто" акционерҙар йәмғиәте типографияһында баҫылды.**
**Тел.: 8 (347) 226-99-48.**
ИНН 027806697, КПП 027801001
(450079, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**График буйынса ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 10.06.2026 й. 17 сәғәт 00 мин.
**Ҡул ҡуйылды -** 10.06.2026 й. 14 сәғәт 30 мин.
**Баҫылып сыҡты -** 11.06.2026 й.

«Киске Өфө»нөң индексы — **ПР905**

Тиражы - 2677
Заказ - 996

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.